ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

9-15 август (урағай)
2024
№31 (1124)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Тәмле һүҙ - азатлыҡ!

3

Тормоштоң ҡәҙерен белдем...

6

Ауылдарҙы, тыуған төйәкте һаҡларға... ир-егеттәр ҙә ихлас ҡушылды

8-9

Йәштәребеҙ аралаша...

11

@KISKEUFA
Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!
смартфон камераһын төбә

***Ҡурҡып йүгергәндә күргән дошман һине тағы ла нығыраҡ эҙәрлекләйәсәк. Шуның һымаҡ, сир алдында ҡурҡып ҡалһаң, ул һине тағы ла нығыраҡ ыҙалаясаҡ. Ҡаршылыҡ булһа, йомшарасаҡ. Сиргә ҡаршылыҡ күрһәтергә кәрәк.***
***(М. Монтень).***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

***Евразия күсмә цивилизациялар музейының визит-үҙәген асыу тантанаһында сенатор Лилиә Ғүмәрованың республика Башлығына Роспатенттың "Башҡорт дебет шәле"нә патент документын тапшырыуын барыһы ла күргәндер. Шулай итеп, башҡорт халҡының тағы бер кәсебенә хоҡуҡ таныҡлығы бирелеп, Башҡортостандың тағы бер бренды барлыҡҡа килде. Был яңылыҡты нисегерәк ҡабул итте икән беҙҙең ошо кәсеп менән яҡшы таныш булған ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ?***

***Гөлсимә ИҪӘНҒОЛОВА, Мәләүез ҡалаһы:*** Башҡорт дебет шәленең патент алыуы шәл бәйләүселәр өсөн генә түгел, ә бөтә республика өсөн, һис шикһеҙ, бик әһәмиәтле ваҡиға, тип уйлайым. Башҡорт ерендә аҫыралған кәзә дебетенән бәйләнгән шәлдәрҙең матур ғына түгел, сифатлы һәм файҙалы булыуын борон-борондан беҙҙең өләсәйҙәр яҡшы белгән һәм был уларҙың төп кәсептәренең береһенә әйләнгән. Был кәсеп айырыуса Башҡортостандың көньяҡ райондарында, атап әйткәндә, Күгәрсен, Ейәнсура, Федоровка, Мәләүез, Стәрлебашта киң таралған. Заманында был шөғөл балаларҙы кейендерергә, уҡытырға, хатта йорт һалырға ярҙам иткән. Элек ебәк кеүек йылҡылдап торған, тигеҙ, матур итеп иләнгән мамыҡтан бәйләнгән шәлдәрҙең хаҡы ла лайыҡлы ине. Оҫталар бер-береһенән уҙҙырып, яңынан-яңы биҙәктәр отоп бәйләй торғайны уны.

Шәл беҙҙең ғаиләне лә ашатты, кейендерҙе. Уны беҙ ниндәйҙер ауыр эшкә лә һанамай торғайныҡ. Саҡ ҡына буш ваҡыт сығыу менән бәйләмгә тотонабыҙ. Шул уҡ ваҡытта китап та уҡыйбыҙ, телевизорын да ҡарайбыҙ. Хатта арып эштән ҡайтҡан саҡтарҙа шәл бәйләү ниндәйҙер кимәлдә ял да була торғайны. Бәйләгән ваҡытта күңел тыныслана, фекер туплана икәнен беҙ яҡшы беләбеҙ.

Ҡул эштәре күргәҙмәләрендә, шәл бәйләү буйынса конкурстарҙа, фестивалдәрҙә ҡатнаша башлағас, башҡорт шәленең традициялары тураһында эҙләнә, уҡый һәм мәғлүмәт йыя башланым. Тарихсылар билдәләүенсә, Башҡортостан Республикаһында дебеттән, йөндән шәл бәйләүҙең мең йыллыҡ традициялары бар. Улар хаҡында Сармат ҡурғандарында табылған шәл йәки туҡыма ҡалдыҡтары ла һөйләй. Бынан тыш, ҡатын-ҡыҙҙар ҡәберлектәрендә йөн-дебетте эшкәртеү, иләү ҡорамалдары ла табылған.

Башҡорт халҡының тормош-көнкүрешен өйрәнгән этнограф, академик Петр Рычков 1765 йылда дебет кәзәләрен тәүге тапҡыр күрә һәм ошо һәр башҡорт ҡатын-ҡыҙы шөғөлләнгән кәсепте өйрәнеп, шул турала хеҙмәт яҙа. Башҡорттарҙың этнографияһын өйрәнеүсе Сергей Руденко ла башҡорттарҙың кәзә дебетенән бәйләнгән шәлдәр менән һатыу итеүе тураһында яҙған. Шуға күрә башҡорт халҡы электән шәл бәйләү менән ныҡлап шөғөлләнгән, тип әйтергә була.

Башҡорт дебет шәленә патент алыу, һис шикһеҙ, уны тағы ла нығыраҡ танытырға, ҙур баҙарға сығарырға булышлыҡ итер, тип уйлайым. Шулай уҡ был яңылыҡ нисектер бер аҙ һағайтты ла. Күрше Ырымбур өлкәһе "Ырымбур мамыҡ шәле"нә патент алғас, байтаҡ ҡына сетерекле хәлдәр булғайны. Улар башҡаларға, башлыса беҙҙең башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарына, ошо бренд менән һатыуҙы тыйҙы. Беҙҙә лә берәйһе брендты һатып алып, беҙҙең кеүек шәл бәйләүселәрҙең юлын ҡыймаҫмы икән, тием. Нисек кенә булһа ла, бәйләгән кеше бәйләй инде ул. Сөнки был шөғөл беҙҙең ҡанға һеңгән. Хаҡы сығымды ҡапламаған саҡта ла барыһы ла бәйләне. Кәзәләр генә булһын!

## ӘЙҘӘГЕҘ...

# "БАШҠОРТ АТЫ" САҠЫРА!

**Быйыл "Башҡорт аты" халыҡ-ара башҡорт тоҡомло аттар фестивале өсөнсө тапҡыр уҙғарыла. Был юлы был сараға 10 меңдән ашыу кеше килеүе көтөлә. Башҡортостан Хөкүмәте кәңәшмәһендә БР Башлығы Хакимиәте етәксеһенең эске сәйәсәт буйынса беренсе урынбаҫары Азат Бадранов һөйләүенсә, фестиваль программаһы дүрт бүлектән тораҡ.**



(Дауамы 16-сы биттә).

## ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ВОДИТЕЛДӘРГӘ...



**Рәсәйҙә автомобиль номерҙарын йәшергән өсөн бер йылдан алып йыл ярымға тиклем водитель таныҡлығынан мәхрүм итеүҙәре мөмкин.**

Дәүләт Думаһы депутаттары беренсе уҡыуҙа тейешле закон проектын ҡабул итте. Ул машина номерын асыҡлауға ҡамасаулаған йәки уны йәшерергә мөмкинлек биргән ҡоролмалар ҡулланылған осраҡтарға ҡағыла. Бының өсөн яуаплылыҡты көсәйтергә кәрәк тигән тәҡдим индерелде. Хәҙер 5000 һум штраф йәки өс айға тиклем транспорт менән идара итеү хоҡуғынан мәхрүм итеү ҡаралған. Дәүләт теркәү билдәләре булмаған машинала ҡабаттан йөрөгән өсөн яза ҡәтғиләнә. Бының өсөн дә йыл ярымға тиклем таныҡлыҡтан мәхрүм ителеү янай. Башланғыс авторҙары фекеренсә, ошондай законһыҙ ғәмәлдәр юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоуға һәм юл фажиғәләренә килтерә, тип хәбәр итә Дәүләт Думаһының телеграм-каналы.

Әйткәндәй, Башҡортостанда теркәү номерҙарын йәшергән өсөн 400 фура водителенә штраф һалынған.

12+

БАШ ҠАЛАМ



# БӘЛӘКӘЙ ҠӘЛҒӘНӘН...

## миллионлыға

**Өфөбөҙ инде 450 йыл үҙ тарихын яҙа. Дүрт быуат элек бәләкәй генә ҡәлғәнән миллионлы ҡалаға тиклем үҫкән Өфөбөҙ бөгөнгө көндә үҙенең матурлығы, үҙенә генә хас йөҙө, төҙөклөгө менән күңелдәрҙе арбай. Республикабыҙҙың баш ҡалаһы исемен ғорур һәм лайыҡлы йөрөтә ул. Тағы ла күп быуаттар милләттәштәребеҙ, республиканы төйәк итеп дуҫлыкта һәм татыулыкта йәшәгән башҡа халыҡтар өсөн төп ҡала булып ҡала килһен.**

Беҙ баш ҡаланан алыҫта йәшәүебеҙгә ҡарамай, ваҡытлы матбуғат, телевидение, интернет селтәрҙәре аша Өфөбөҙҙөң нисек йәшәүен, тын алышын, үҙгәрештәрен күреп-белеп торабыҙ.

Йыл һайын ҡалала төҙөлөш эштәре гөрләй башлай: юлдар төҙәтелеп, торлаҡ-коммуналь хужалыҡтары инженер селтәрҙәрен ҡышҡылыҡҡа әҙерләйҙәр, күп фатирлы йорттарҙың эсе-тышы тәртипкә килтерелә, балалар өсөн яңы майҙансыҡтар булдырыла. Әйткәндәй, "Башҡортостан ихатаһы" программаһы баш ҡалала ғына түгел, ә тотош республика буйынса ла яҡшы темптар менән бара, тип билдәләргә кәрәк. Бары тик ошо булдырылған матурлыҡты халыҡ ҡәҙерләп һаҡлай белһен ине ул.

Өфөнөң тағы бер матур символына әүереләсәк "Әр-Рәхим" мәсетендә башланған эштәрҙе ҙур ҡыуаныс менән ҡаршы алдыҡ. Оҙаҡламай ул үҙ ишектәрен асыр һәм унан аҙан тауыштары яңғырап торор. Шулай уҡ баш ҡаланың тарихи үҙәгендә, Мостай Кәрим урамында урынлашҡан "Хәкимиә" мәсетендә лә төҙөкләндереү-реставрациялау эштәренең алып барылыуы ҡыуаныслы хәл. Ҡала етәксеһе Ратмир Мәүлиев белдереүенсә, бының өсөн маҡсатлы финанслау бүленгән. Бик мәслихәт эш.

Салауат Юлаев проспекты Өфөбөҙҙөң төп юлдарының береһе булараҡ ҡалаға килеп инеүселәргә уның тураһында тәүге тәьҫорат ҡалдырыусы булып тора. Шуға күрә был юлды һәм уның тирәягын матур, төҙөк тотоу ҡала етәкселегенең иғендә яткан күп бурыстарҙың береһе. Һәм, әйтергә кәрәк, был бурыс урын-еренә еткереп аткарыла: юл үҙе лә, эргә-тирәһе лә тәртиптә. Әлеге проспекты бер урында киҫеп үткән юл үткәүелдәренең төрлө сағыу төҫтәр менән биҙәлеүе лә - матур күренеш.

Беҙ йәш саҡта Өфөлә йәмәғәт мунсалары бик әүҙем эшләне. Ауылда мунса төшөп, сабынып үҫкән студент малайҙар, унда ике аҙнаға бер булһа ла барып ҡайта инек. Беҙ дипломлы белгес булып районлар буйлап таралдыҡ, балалар үҫеп етеп, баш ҡалаға уҡырға килде. Малайҙан һораһам, баш ҡалалағы мунсалар тураһында белмәй ҙә, күрмәй ҙә, бактиһәң, күптәре ябылып бөткән икән. Яңыраҡ Өфө үҙәгендә яңы мунса комплексы асыласағы тураһында уҡыным. Яңы күпер (Новомостовая) урамында элекке "Эдельвейс" мунсаһы урынында урынлашасаҡ комплекс күптәр өсөн көтөп алынған ваҡиға буласаҡ.

Мин театр яратҡан кеше булараҡ, ошо темаға ҡағылышлы яңылыҡтарҙы айырыуса ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡарап барам. Минең ҡыҙыҡһыныуым театрҙар репертуарына ғына ҡайтып ҡалмай. Театрҙың йөкмәткеһе лә, тышы ла, эсе лә матур булырға тейеш, тип уйлайым. Мәҫәлән, М.Ғафури исемендәге БДАДТ янындағы парк үҙенең матурлығы менән легендар театрыбыҙға тағы ла бер нур өҫтәй. Ленин урамындағы М.Кәрим исемендәге Йәштәр театры алдында ла күркәм генә үҙгәрештәр булған икән. Йәшел сәхнә, тере үҫентеләрҙән эшләнгән музыканттар фигуралары, сәскәле аркалар, эскәмйәләр - барыһының да күңеленә хуш килгәндер. "Родина" кинотеатры һәм "Башҡортостан" дәүләт концерт залы алдарын да уникаль тематик биҙәүҙәр күтә икән.

**Зөлфиә ИШДӘУЛӘТОВА.**
**Баймаҡ ҡалаһы.**

---

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# ИМАНҒА ҺӨЖҮМ

**Студент саҡта ишеткән бер көләмәс иҫтән сыҡмай. Леонид Брежнев менән Зыя Нуриев Ҡыҙыл майҙан аша үтеп баралар икән. Ҡаршыларына осраған халыҡ гел генә Зыя Нуриев менән иҫәнләшеп уҙа, ти, ә Леонид Брежневҡа өндәшеүсе юҡ икән. "Зыя Нуриевич, мин КПСС-тың беренсе секретаре, мине халыҡ танымай, ә һеҙҙе таный", - тип аптырай, ти Леонид Брежнев. Быға яуап итеп, Зыя Нуриев: "Былар бит минең яҡташтарым, Мәскәүгә Башҡортостанда етештерелгән бал, ҡуйыртылған һөт, ит ризыҡтары алырға килгәндәр", - тигән.**

Әлеге ваҡытта, әлбиттә, беҙ Мәскәүгә аҙыҡ-түлек һатып алырға йөрөмәйбеҙ, ә баш ҡаланан һәм сит илдәрҙән килтерелгән сәйер сифатлы ризыҡтар менән мөрхәтһенәбеҙ. Ошо урында тағы бер көләмәс иҫкә төшә. Башҡорт әбейе менән бабайы урыҫ ызнакумдарына ҡунаҡҡа барған, ти. Өй эсендә таралған сусҡа ите еҫен тойоп, әбей менән бабай алдарына ҡуйылған һыйға ҡағылмай ғына ултыралар икән, ти. Быны күреп, хужабикә: "Кушайте, кушайте!" - тип ҡыҫтай башлаған. "Кушайте" һүҙе әбейгә "Кош ите" тип ишетелгән һәм ул бабайына: "Кош ите, ти бит, әйҙә, ашайыҡ һуң улай ҡыҫтағас..." - тигән булған. Шулай итеп, улар сусҡа ите менән һыйланып, гонаһҡа батып ҡайтып киткән. Әле лә магазиндарҙағы аҙыҡ-түлек ҡаптарындағы ваҡ ҡына итеп яҙылған хәрефтәрҙе уҡый алмайынса, был ризыҡтарҙың ниндәй сығышлы, ниндәй сифатлы, кем етештергәнен дә белмәй һатып алабыҙ, былайтып, гонаһҡа ла батабыҙҙыр, һаулыҡты ла ҡаҡшатабыҙҙыр инде, тим.

Хәйер, хәҙер беҙҙең иманбыҙға һәм һаулығыбыҙға зыян иткән тәьҫирҙәр әйләнә-тирә тулы инде ул. Шуға бәйле, тағы бер өр-яңы көләмәс. Ҡатыны кухнянан иренә: "Ҡәҙерлем, нимә тынып ҡына ултыраһың унда?" - тип һорай. Ире: "Телевизор ҡарайым", - тип яуап биргәс, ҡатыны: "Кара, ҡара, тик тоҡандыра күрмә инде. Кисә төнө буйы, Американы һыу баҫа, тип һаташып сыҡтың", - тигән.

Балалар миңә лә 75 канал күрһәткән телевизор бүләк итте. Мин дә өйөмдөң иң түрендә ултырған телевизорға ҡарап-ҡарап ҡына ҡуям, әммә тоҡандырырға ҡурҡам. Донъянан артта ҡалһам, ҡалырмын, һаулығым, нервыларым мөһимерәк әле, тим.

**Фәүзиә ЯХИНА.**

---

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Евразия кусмә цивилизациялар музейының визит-үҙәген асыу тантанаһында сенатор Лилиә Ғүмәрованың республика Башлығына Роспатенттың "Башҡорт дебет шәле"нә патент документын тапшырыуын барыһы ла күргәндер. Шулай итеп, башҡорт халҡының тағы бер кәсебенә хоҡуҡ таныҡлығы бирелеп, Башҡортостандың тағы бер бренды барлыҡҡа килде. Был яңылыҡты нисегерәк ҡабул итте икән беҙҙең ошо кәсеп менән яҡшы таныш булған ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ?***

***Разия АРЫҪЛАНБӘКОВА, Күгәрсен районы:*** Беҙ, урта һәм оло быуын кешеләре, шәл бәйләүҙең бик файҙалы һәм килемле шөғөл булыуын беләбеҙ инде ул. Бигерәк тә совет заманында ныҡ таралғайны был кәсеп. Хаҡы ла бар ине. Матур бәйләнгән шәлгә һатып алыусы аҡсаһын йәлләмәне. Йыллына ике-өс, ҡайһы саҡтарҙа дүрт-биш тапҡыр Мәләүез баҙарына барып һата торғайныҡ. Шаршамбы көндө махсус рәүешттә шәл баҙары тип атайҙар ине. Һатып алыусылар төрлө яҡтан килә торғайны. Уртаса шәлъяулыҡтарҙы һатыулашып-һатыулашып арзанға ғына ала инеләр. Ебәк кеүек еңел, йомшаҡтарына хаҡты төшөрмәнеләр. Балдаҡтарын сисеп, шунын аша үткәреп ҡарап алған була торғайнылар.

Шәл һатҡан аҡса ҙур ярҙам булды инде ул ваҡытта. Балаларҙы мәктәпкә әҙерләгәндә лә, туйға ла, уҡыу кәрәк-яраҡтары алыуға ла шәл аҡсаһы китә торғайны. Эш араһында йәки йоҡо иҫәбенә бәйләнгәнгә күрә, мин уны буштан килгән һымаҡ күрә торғайным. Уйлап ҡараһаң, бик еңел дә эш түгел инде. Кәзә тотоу ғына үҙе ни тора! Күршең менән әрләшкән килһә, кәзә ал, тип юҡҡа ғына әйтмәгән бит халыҡ. Бик көйһөҙ мал ул. Бесәнде лә һайлап ҡына ашай. Үҙенә оҡшамағаны булһа, эҙләнә, ҡаса, кеше баҡсаһына төшә. Дебете йылҡылдап торһон өсөн махсус ашатырға ла кәрәк ине. Тарар ваҡыт етһә, көнбағыш та бирә торғайныҡ.

Беҙҙең заманда ауылда кәзә тотмаған, шәл бәйләмәгән кеше булманы. Кәзә тарарға, мамыҡ тетергә, иләргә өмә эшләнек. Һуңынан уларҙы ботлап, сиратып, йомғаҡтарыбыҙ әҙер булһа, алмашлап, берберебеҙгә кис ултырырға йөрөнөк. Шулай күберәк шәлдәребеҙ йоҡо иҫәбенә бәйләнде инде. Кемдең балалары аҙыраҡ, ире тынысыраҡ, шуларҙыҡына йышыраҡ йыйылалар. Беҙҙең балалар күп булһа ла, өй башҡаларҙыҡынан иркенерәк булғас, беҙгә килә торғайнылар. Сәй эсеп, йырлашып ултыра инек. Тормош булғас, төрлө хәлдәр була. Ҡайғы кисергән кешеләр булһа, кис ултырырға уларға барырға тырыша торғайныҡ. Бергәләп ултырып эшләгәс, һағыштары таралып, күңеле тынысланып, ҡулындағы эше лә ырап ҡала.

Башҡорт шәленең даны күптән билдәле инде. Шулай ҙа патент алыуы бик ҡыуаныслы. Әммә хәҙер ауылда кәзә бөттө бит ул. Шәл бәйләгәндәр ҙә бик һирәк. Олораҡ быуын бәйләһә, бәйләйҙер, йәштәр хәҙер ҡул эше тотоп бармай. Әлбиттә, белгән кеше кәзәһен дә тотор, дебетен иләп, шәлен дә бәйләр. Әммә уны алыусы булырмы?

Туғыҙынсы тиҫтәне тултырһам да һаман да бәйләйем. Мәләүезгә баҙарға йөрөгәнем юҡ, Себер тарафтарынан ҡайтҡан йәки шул яҡҡа ҡунаҡҡа барған кешеләр бүләккә тип алып китәләр.

Минең шундай тәҡдим: башҡорт дебет шәлен үҫтереү өсөн башҡорт кәзәләре фермалары булдырыу кәрәк. Ситтән килтерелгән дебеттән бәйләнгәндәре барыбер башҡорт шәле булмай бит инде...

---

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Өфөлә ритейл көндәре" төбәк-ара форумы сиктәрендәге пленар ултырышта ҡатнашты. Көн тәртибендә - ваҡлап һатыу базарындағы хәл һәм сауҙа секторындағы заманса трендтар. "Сауҙа - төбәк иктисадының төп өлкәләренең береһе, унда 300 меңдән ашыу кеше эшләй, - тип хәбәр итте республика Башлығы Радий Хәбиров. - Сауҙа тармағын үҫтереүҙең күп күрһәткестәре буйынса төбәк илдә алдынғы урындарҙы биләй. Ваҡлап һатыу әйләнеше 2024 йылдың тәүге ярты йыллығында 11,4 процентҡа артҡан. Был күрһәткес буйынса республика Волга буйы федераль округында - икенсе, илдә һигеҙенсе урынды биләй".

✔Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы майор Борис Дудкондың "Геройҙар ваҡыты" федераль кадрҙар программаһы сиктәрендә республикала стажировка үтәсәге хаҡында хәбәр итте. Хәрби хеҙмәткәр Бөрөлә тыуған, Ҡазан юғары танк команда училищеһын тамамлаған. Махсус хәрби операцияла 2022 йылдың мартынан ҡатнаша. Ил Президенты Владимир Путин инициативаһы буйынса старт алған "Геройҙар ваҡыты" программаһы махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар араһынан дәүләт хеҙмәте өсөн юғары квалификациялы һәм компетентлы кадрҙар әҙерләүгә йүнәлтелгән.

✔Башҡортостан юлсылары Красный Луч ҡалаһында оҙонлоғо яҡынса бер саҡрым булған участкала яңыртыу эштәре башҡарған. Подрядсы ойошма юл ҡатламын тигеҙләгән һәм асфальт-бетон ҡатламы һалған. Быйыл Башҡортостан юлсылары Луганск халыҡ республикаһында 23,4 саҡрым оҙонлоҡтағы юлды ремонтларға ниәтләй. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, 2022 йылда Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров башланғысы менән подрядсы ойошма Луганск халыҡ республикаһы юлдарын ремонтлау өсөн көнөнә 300 тонна асфальт-бетон ҡатнашмаһы етештереү ҡеүәтенә эйә булған асфальт-бетон заводын күсерҙе. Ике йылда республика юлсылары 66 саҡрымдан ашыу юлды ремонтлаған.

✔Башҡортостан спортсылары һәм уларҙың тренерҙары БРИКС илдәренең халыҡ-ара уйындарындағы еңеүҙәре өсөн аҡсалата дәртләндереү аласаҡ. Был туралағы Указға республика Башлығы Радий Хәбиров ҡул ҡуйҙы. Һүҙ Олимпия, Паралимпия һәм Сурдолимпия уйындары программаһына инмәгән дисциплиналар хаҡында бара. Шулай итеп, 1-се урын өсөн түләү - 250 мең һум, "көмөш" өсөн - 200 мең һум, ә "бронза" өсөн 100 мең һум тәшкил итәсәк.

✓ *Сит тарафтарҙан, бигерәк тә Волгоград далаларынан килтереп һатҡан дебеттән патентлы шәл булмай бит инде ул. Урындағы фермерҙарға мамыҡ кәзәһе үрсетергә дәүләт ярҙам итһә, шәл бәйләүселәр табылыр, моғайын.*



ҺАЙЛАУҘАР

# ҮҘ БУРЫСЫҢДЫ ҮТӘП...



**Башҡортостан Үҙәк һайлау комиссияһы етәксеһе Азат Ғәлимханов "Сәләм" программаһында 6 сентябрҙән 8 сентябргә тиклем үтәсәк республика Башлығын һайлау кампанияһы хаҡында һөйләне.**

Унын әйтеүенсә, Мәскәүҙә өҫтәмә һайлау участкаһы асыу планлаштырыла. Рәсәйҙең баш ҡалаһында йәшәүселәр РФ Президенты ҡарамағындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиллеге базаһында тауыш бирә аласаҡ. Шулай уҡ теркәлеү урынында булмаған кешеләр "мобиль һайлаусы" механизмына инә аласаҡ.

Кандидаттар исемлегендә: Радий Хәбиров ("Берҙәм Рәсәй"ҙән), Иван Сухарев (ЛДПР), Владимир Нагорный ("Ғәҙел Рәсәй"), Артур Шәйнуров (КПРФ) һәм Илшат Тимерйәнов ("Яңы кешеләр"). Спикер билдәләүенсә, берҙәм тауыш биреү көнөндә Өфөнөң 54-се бер мандатлы округы буйынса Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға депутат һайлау, шулай уҡ урындағы үҙидара органдарына 200-ҙән ашыу һайлау кампанияһы үтәсәк. "2 сентябргә тиклем - территориаль һайлау пункттарында йә күп функциялы үҙәктәрҙә, 28 августан 2 сентябргә тиклем - участка һайлау пункттарында һәм Мәскәү ваҡыты буйынса 3 сентябргә төн уртаһына тиклем "Дәүләт хеҙмәттәре" порталы ярҙамында уңайлы һайлау пунктын һайлай алаһығыҙ. Урындағы үҙидара органдарына - ауыл һәм ҡала Советтарына, муниципаль район һәм ҡала округтары Советтарына һайлауҙарҙа "мобиль һайлаусы" механизмы ҡулланылмай. Башҡортостан Үҙәк һайлау комиссияһының ҡыҙыу элемтәһе: 8 800 347 54 54. Үҙәк һайлау комиссияһының рәсми сайты: bashkortostan.izbirkom.ru", - тип аңлатма бирҙе Азат Ғәлимханов.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

***Евразия кусмә цивилизациялар музейының визит-үҙәген асыу тантанаһында сенатор Лилиә Ғүмәрованың республика Башлығына Роспатенттың "Башкорт дебет шәле"нә патент документын тапшырыуын барыһы ла күргәндер. Шулай итеп, башкорт халкының тағы бер кәсебенә хокук таныклығы бирелеп, Башкортостандың тағы бер бренды барлыкка килде. Был яңылыкты нисегерәк кабул итте икән беҙҙең ошо кәсеп менән якшы таныш булған катын-кыҙҙарыбыҙ?***

***Гүзәл КӘРИМОВА, Күмертау ҡалаһы:*** Дебет шәлгә патент алыуҙы ҙур ҡыуаныс менән ҡабул иттем. Дөрөҫөн әйткәндә, был хаҡта бер ваҡытта ла уйланғаным булманы. Мәҫәлән, башҡорт балы, башҡорт аты кеүек милләтебеҙҙең исеме ҡушылған әйберҙәргә башҡалар ҡул һуҙмаҫ кеүек тойолһа ла, ундайҙар ҙа табылып тороуы тураһында хәбәр интернет селтәрендә йыш осрай.

Дебет шәлгә килгәндә, уны беҙҙең яҡта мамыҡ шәл тиҙәр. Ауылыбыҙҙан ситкәрәк китһәң, ҡолаҡҡа "дебет шәл" тигәне йышыраҡ ишетелә башлай. Ғаиләбеҙҙә дүрт ҡыҙ үҫтек, әсәйебеҙҙең шәл бәйләгәнен ҙур ҡыҙыҡһыныу менән күҙәтеп, ҡарап ултыра торғайныҡ. Шулай, күршебеҙгә алыҫ райондан килен төштө, әсәйебеҙ туйға барып, ул яҡта өлкәндәр ҙә, кеселәр ҙә нисек оҫта итеп бәйләүҙәре, хатта телевизор ҡарағанда ла бәйләм тотоп ултырыуҙары тураһында һөйләне. Шул көндән алып беҙҙе шәл уртаһын бәйләргә өйрәтте, ә үҙенә дүрт сите ҡала ине, бер аҙ оҫтарғас, апайыбыҙ, һуңынан беҙ ҙә әсәйгә ярҙамға күстек. Ул ваҡытта был шөғөл ғаиләбеҙгә бик ҙур ярҙам булды. Айына ике шәл бәйләгән ваҡыттар ҙа булды. Ауыл кәзәһенең мамығынан бәйләнгән шәльяулыҡтарҙың сифатын белгәндәр 120-150 һумын да йәлләмәне. Әсәйем уны уртаһына ла бесәй тәпәйе биҙәген һалып, ҙур итеп бәйләргә ярата ине. Бәйләп бөткәс, ҡабарһын өсөн беҙгә юрған урынына ябындырып һала торғайны. Беҙҙе уҡытҡан да, кейендергән дә, ашатҡан да ошо шәл булды. Беҙҙең ауылда хатта бер апайҙың уйынлы-ысынлы, шәл бәйләп йорт һалдыҡ, тип әйткәне хәтерҙә. Хәҙер ауылдарҙа кәзә аҫыраусылар бармаҡ менән генә һанарлыҡ, уныһы ла һөт биргәне генә. Һыйырҙарын бөтөрөп, хәҙер кәзә һауғандар күп. Мамыҡ кәзәһе юҡ, тиһәң дә була. Сит тарафтарҙан, бигерәк тә Волгоград далаларынан килтереп һатҡан дебеттән патентлы шәл булмай бит инде ул. Минеңсә, урындағы фермерҙарға мамыҡ кәзәһе үрсетергә дәүләт ярҙам итһә, шәл бәйләүселәр (үҙмәшғүлдәр) табылыр, моғайын. Тик мамыҡ хаҡы ат хаҡына тиң булмаҫҡа тейештер, быныһы инде урындағы муниципаль власть ҡарамағында. Бәйләргә сеймал табылһа, ауылдарҙа ғына түгел, ә ҡалала йәшәгән ҡатын-ҡыҙҙар ҙа, бигерәк тә пенсионерҙар, ҡушылыр ине.

Хәҙер мәктәптәрҙә хеҙмәт дәресен тергеҙәләр ти бит, оҫта остаз табылһа, ошо файҙалы шөғөлгә лә өйрәтерҙәр ине. Был балаларҙың һаулығын нығытыу өсөн дә үтә ныҡ кәрәкле - бармаҡ остарын ғына эшләтеп, күпме нервы күҙәнәген тергеҙергә мөмкин. Икенсенән, китапса әйткәндә, автоматизмға еткерелгән эш башҡарғанда мейе лә ял итәсәк. Ә иң мөһиме, милләтебеҙгә хас, быуаттар төпкөлөнән килгән шөғөл шулай уҡ беҙ белмәгән әллә ни бихисап файҙа бирәсәк. Шуға күрә, патент алғас-алғас, дебет шәле эше туҡтап, йәки, элеккесә, һәр кемдең үҙ алдына, үҙ белдегенә ҡалған кәсеп кенә булып ҡалырға тейеш түгел. Ейәнсуралар тәжрибәһен төплө өйрәнеп, улар яғында аҫыралған мамыҡ кәзәләр һанын арттырырға кәрәктер. Беҙ быға ҡасандыр кире әйләнеп ҡайтырға тейеш инек, был кәсепте лә башҡалар үҙләштермәҫ борон әүҙемләштерһәк, яҡшы булыр. Дебет шәле бәйләү шатлыҡ ҡына килтермәһен, ә файҙалы ла булһын, тиһәң, бөгөндән үк мамыҡ кәзәһен үрсетеүҙе фәнни юлға ҡуйырға кәрәк.

**Лена АБДРАХМАНОВА яҙып алды.**

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# ТӘМЛЕ ҺҮҘ - АЗАТЛЫҠ!



**Үткән аҙна уртаһында, 1 августа, аралашсы һәм координатор булараҡ булышлыҡ итеүсе ил - Төркиәнең баш ҡалаһы Анкаралағы тарихи ваҡиға шаһиты булдыҡ: Рәсәй һәм Белоруссия менән - бер яҡтан; икенсе яҡтан, көнбайыш илдәрҙән Германия, Норвегия, Польша, Словения һәм АҠШ араһында төрмәлә ултырыусы әсирҙәр менән алмашыуҙар булып үтте.**

Оҙаҡҡа һуҙылған һәм көсөргәнешле һөйләшеүҙәр һөҙөмтәһендә Рәсәй үҙенең 8 гражданын: Вадим Красиковты (Германия төрмәһенән элек РФ Президенты һағында хеҙмәт иткән Федераль именлек хеҙмәте хеҙмәткәре, террорист Зелимхан Хангошвилиҙы үлтергән өсөн мәңгелеккә иркенән мәхрүм ителгән), Анна менән Артем Дульцевтарҙы (шпионаж өсөн Словенияла ете айға хөкөм ителгәндәр), Михаил Микушинды (шул уҡ сәбәп менән Норвегиянан), Павел Рубцовты (сығышы буйынса рәсәйле испан журналисы, Польша төрмәһенән), Роман Селезневты (хакер, АҠШ банк системаһын боҙоп, млрд доллар сығарғаны өсөн 27 йылға хөкөм ителгән), Владислав Клюшинды (бизнесмен, АҠШ-та 2016 йыл президент һайлауҙарына ҡыҫылышы өсөн 9 йылға хөкөм ителгән), Вадим Конощенокты (контрабанда өсөн Эстония төрмәһендә ултырған) тыуған илгә ҡайтарыуға өлгәште. Рәсәй яғы иһә үҙ төрмәләренән 16 кешене (был төркөмгә АҠШ граждандары Эван Гершкович, Пол Уилан һәм башҡа ике гражданлыҡтағы кешеләр, рәсәйлеләр, шул иҫәптән Навальныйҙың Өфөләге, Томскиҙағы, Барнаулдағы хәҙер экстремистик тип танылған һәм таратылған элекке штабтары етәкселәре Лилиә Чанышева, Ксения Фадеева, Вадим Останинды) сығарҙы һәм АҠШ тарафына тапшырҙы. Алмаш иҫәбенә азат ителгән һәм Рәсәйгә ҡайтарылған ватандаштарҙы Мәскәүҙең Внуково аэропортында РФ Президенты Владимир Путин йылы ҡаршыланы һәм ил мәнфәғәтендә хеҙмәт иткән һәм анттарына тоғро ҡалған хәрбиҙәргә рәхмәт белдерҙе. Тиҙҙән уларға дәүләт наградалары тапшырыласағы хаҡында ла белдерҙе Президент.

Был ваҡиға халыҡ-ара даирәләрҙә яңғырауыҡлы шаңдау алды. Сәйәси күҙәтеүселәр әйтеүенсә, әлегесә коллектив халыҡ-ара алмашыуҙың һалҡын һуғыш заманынан алып булғаны юҡ ине әле. Ҡайһы бер күҙәтеүселәр өмөтләнгәнсә, бындай сара Рәсәй менән уның геосәйәси дошмандары араһындағы мөнәсәбәттәрҙең йылыныуына килтереүе мөмкин булған һирәк ваҡиға, ләкин, үкенескә күрә, әсирҙәр менән алмашыуҙың ике аралағы конфликтҡа ҡағылышы юҡ, ул бары айырым кешеләрҙең яҙмышын еңеләйтеүсе ябай бер кешелеклелек акты.

Донъя күләмендәге башҡа яңылыҡтарға килгәндә, һаман да шул тыныслыҡ боҙоусы АҠШ Хәрби көстәренең Яҡын Көнсығыш тирәләй хәрби-һауа көстәрен туплауы билдәле даирәләрҙә хәүеф тыуҙырыуы иғтибарҙы йәлеп итә. Ни өсөн тигәндә, АҠШ хәрбиҙәре Иран тарафынан ҡурсыланыусы ХАМАС ислам хәрәкәте башлығы Исмәғил Хәниәнең үлтерелеүе өсөн үс алыуҙан ҡурҡҡан Израилде үҙ ҡанаты аҫтына алмаҡсы. Ул ғына ла түгел, Израилде яҡлау өсөн Яҡын Көнсығышта хәрби көстәр туплау менән Пентагон башлығы Ллойд Остин туранан-тура үҙе етәкселек итәсәк. Палестина хәрәкәте башлығы Исмәғил Хәниәнең һәләкәте АҠШ ярҙамында Израиль тарафынан ойошторолоуы раҫланған факт, шуға күрә енәйәтсе яҙаһын аласаҡ, тип белдерелә Ислам революцияһы һағы корпусының тикшеренеү документында.

Республикандар партияһынан АҠШ президентлығына кандидат Дональд Трамп белдереүенсә, Демократик партиянан президентлыҡҡа берҙән-бер кандидат Камала Харрис 4 сентябргә тәғәйенләнгән дебаттарҙа ҡатнашырға теләмәй икән. Быны Трамп Камаланың "түбән IQ"һы менән аңлата һәм "...миңә ҡаршы сығыш яһау өсөн Харрис менталь һәләтлеккә эйә түгел" тип һығымта яһай. "Ҡасан да булһа, һеҙ уның интервью биргәнен күргәнегеҙ бармы? Ул бит хатта телесуфлерһыҙ йүнләп һөйләй ҙә алмай", тип яҙа Трамп үҙенең социаль селтәрендә...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Учалы районында йәшәүселәр аҡса йыйып, һатып алған автомобиль менән гуманитар йөк туплап, Махсус хәрби операция зонаһына ебәргән. Гуманитар ылауҙы Төньяҡ хәрби округы ветераны, Шайморатов генерал ордены кавалеры Рәил Ҡорамшин, "Юлдаш" һәм "Макар" позывнойлы хәрбиҙәр оҙата. Учалылар Төньяҡ хәрби округындағы хәрбиҙәр өсөн өс УАЗ машинаһы, шул иҫәптән бер "буханка", шулай уҡ мотоцикл һатып алған. Йөк машинаһы камуфляж селтәрҙәре, ҡоралдар һәм шәхси посылкалар менән тултырылған.

✓Башҡортостанда бер тәүлек эсендә генә 34 мутлашыу осрағы теркәлгән, кешеләр мутлашыусыларға 18 миллион һумға яҡын аҡса күсергән. Хәбәр итеүҙәренсә, мутлашыусылар Өфөнән 49 йәшлек ҡатын менән бәйләнешкә сыҡҡан һәм үҙҙәрен ҡатын эшләгән мәктәптең директоры һәм хоҡуҡ һаҡлау органдары хеҙмәткәре тип таныштыра. Улар ҡатынды 2 миллион һумға яҡын аҡсаһын "хәүефһеҙ" иҫәпкә күсерергә ышандырған. Банк хеҙмәткәре үҙ аҡсаһын мутлашыусыларға күсерергә йыйынған ҡатынды туҡтатырға өлгөрә.

✓Башҡортостандан Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға Баймаҡ районынан гуманитар ярҙам тапшырылды. Хәрбиҙәр дронға ҡаршы юрғандар, йоҡо ҡапсыҡтары, аҙыҡ-түлек һәм посылкалар алды. Баймаҡ районы хакимиәте башлығы Фәнис Әминев етәкселегендәге гуманитар миссия Донецк һәм Луганск халыҡ республикаларындағы хәрбиҙәр урынлашҡан урындарҙа булды. Быға тиклем Төньяҡ хәрби округ зонаһына тағы ла Өфө ҡалаһынан һәм районынан, шулай уҡ Дәүләкән, Ҡыйғы, Шишмә, Ғафури һәм Краснокама райондарынан гуманитар ылауҙар ебәрелгән.

✓Башҡортостанда икенсел торлаҡ 1,3 процентҡа ҡимmәтләнгән. Был яҡынса 80 мең һум тигән һүҙ. Ярты йыллыҡ йомғаҡтары буйынса уртаса фатирҙың уртаса хаҡы (яҡынса ике бүлмәле) 6 миллион 17 мең һум тәшкил иткән. 1 июлдә льготалы ипотека программаһы тамамланды, эксперттар икенсел баҙар күсемһеҙ милек һатып алыусыларҙың иғтибарын йәлеп итер, "икенсел" торлаҡҡа хаҡ беренсел торлаҡ кимәленә етер, тигән фекерҙә Mirkvartir белгестәре.

ҠЫҪҠАСА

# БЕСӘНҺЕҘ ҠАЛМАҺЫНДАР

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ямғыр күп яуған райондарҙа халыҡтың бесән әҙерләй алмауына ҡарата борсолоуын белдерҙе.** Әгәр ярҙам күрһәтелмәһә, халыҡ малын күпләп тотонорға мәжбүр буласаҡ. Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә ошо мәсьәләне күтәрҙе. Был йәһәттән иң проблемалы райондар: Бөрйән, Салауат, Баймаҡ, Көйөргәҙе, Ҡыйғы райондары. "Ауылдарҙа халыҡ бесән эшләй алмай. Ҡышҡа бесәнһеҙ инеү ҡурҡынысы бар. Район башлыҡтарынан, бигерәк тә ямғырҙарҙан зыян күргән муниципалитеттарҙан, мәсьәләнең кимәлен аңлауҙарын һәм кешеләргә нисек ярҙам итә алыуыбыҙҙы тәҡдим итеүҙәрен һорайым", - тине Радий Хәбиров. Башҡортостан Башлығы Максим Забелинға һәм ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахмановҡа был эшкә ҡушылырға ҡушты. Ике аҙнала ямғырҙан зыян күргән райондарҙа йәшәүселәргә бесән һатып алыу өсөн кәрәкле сумманы билдәләү тураһында ҡарар ҡабул ителәсәк, бындай ярҙамды бүлеү механизмы булдырыласаҡ.

✓ **Республика аграрийҙары өсөн яҡшы һауа торошо август уртаһына тиклем көтөлмәйәсәге хаҡында белдерҙеләр.** Ураҡ өсөн һәр мөмкинлекте файҙаланырға һәм бар киптереү ҡеүәтен файҙаланырға кәрәк, тине Башҡортостан Премьер-министры урынбаҫары - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә. Башҡортостан аграрийҙары быйыл 2,2 миллион гектарҙа уңыш йыйып алырға ниәтләй. Шуларҙың 1,3 миллион гектары яҙғы иген һәм ҡуҙаҡлы культураларға тура килә, 380 мең га - ҡышҡы культуралар; 58 мең гектарҙа - шәкәр сөгөлдөрө, 493 мең гектарҙа майлы культуралар үҫә. Әлеге ваҡытта республиканың 27 районында иген культураларын урып-йыйыу башланған. "Бөгөн ни бары 53 мең гектарҙан уңыш йыйып алынған, - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Илшат Фәзрахманов. - 177 мең тоннанан ашыу иген һуғылған, гектарынан уртаса 33 центнер уңыш алынған. Майлы культураларҙан әлегә ужым арышы ғына йыйып алынған". Хәбәр ителеүенсә, Башҡортостанда тупраҡтың артыҡ дымланыуы сәбәпле, ғәҙәттән тыш режим индерелеүе ихтимал.

✓ **Башҡортостандың тышҡы иҡтисади бәйләнештәр һәм конгресс эшмәкәрлеге министры Маргарита Болычева "Честно говоря" программаһында Көнбайыш илдәренең республика һәм тотош Рәсәй менән хеҙмәттәшлекте дауам итергә теләүе хаҡында белдерҙе.** "Бөгөн беҙгә дуҫ булмаған илдәрҙән бик күп үтенестәр килә. Беҙгә был кәрәкме? Дөрөҫ, бөгөн беҙгә был кәрәкмәй, сөнки башҡа партнерҙарыбыҙ менән сауҙа мөнәсәбәттәрен тәҙөү мөһимерәк һәм ҡыҙыҡлыраҡ. Мәҫәлән, Ҡытайҙағы партнерҙарыбыҙ теләһә ниндәй үтенескә йәшен тиҙлегендә һәм бер бюрократияһыҙ яуап бирә. Беҙҙең ниндәй генә осрашыу булһа ла, һәр саҡ һөҙөмтәле үтә. Әлбиттә, һәр нәмәнең үҙегендә яҡшы продукт ята", - тине Маргарита Болычева һәм бөгөн республикала экспортерҙарға ярҙам итеү буйынса һөҙөмтәле ярҙам саралары булдырылыуын билдәләне. "Беҙ башҡа төбәктәр менән тәжрибә уртаҡлашабыҙ, аҡсалата һәм логистика менән ярҙам итәбеҙ, эшҡыуарҙарҙы иҡтисадтың төрлө өлкәләрендә дөрөҫ экспортларға өйрәтәбеҙ. Был - беҙҙең һөҙөмтә", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды ведомство етәксеһе.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЯМҒЫР ЭҘЕМТӘЛӘРЕН...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика Хөкүмәтендә үткән оператив кәңәшмәлә Транспорт һәм юл хужалығы министрлығына ташҡындан һуң юлдарҙы һәм күперҙәрҙе тиҙ һәм һөҙөмтәле тергеҙергә ҡушты.**



"Мөмкин булғанын тиҙ арала тергеҙегеҙ. Ҡалғанын графикка ҡуйып, муниципалитет башлыҡтары менән эшләргә кәрәк. Улар халыҡҡа ҡасан аҡса буласағын, емерелгән күперҙәрҙе, юлдарҙы ҡасан ремонтлай башлаясаҡтарын аңлатырға тейеш", - тине Радий Хәбиров. "Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, әлегә һауа торошона бәйле, беҙҙе бер яҡшы хәбәр ҙә көтмәй. Беҙ һәр ваҡыт, ямғыр юҡ, тип зарландыҡ, әммә хәҙер, дөрөҫөн әйткәндә, нимә эшләргә белмәйбеҙ. Ҡалала тәҙәкләндереү туҡтап ҡалды, сөнки хеҙмәткәрҙәр эшкә сыға алмай. Өфөнөң яртыһын ҡаҙып бөттөләр, ә барыһы ла бер урында тора. Был да ҙур проблема". Башҡортостандың транспорт һәм юл хужалығы министры Любовь Минакова хәбәр итеүенсә, Башҡортостанда ташҡындан 22 саҡрым юл, 18 күпер, 3 һыу үткәреүсе торба зыян күргән. "Беҙ 7 муниципалитет - Баймаҡ, Белорет, Йәрмәкәй, Йылайыр, Әбйәлил, Учалы, Салауат райондары менән эшләйбеҙ. Беҙ әле зыян күләмен баһалайбыҙ. Хәҙер был сумма 67 миллион һум тирәһе. Әммә зыянды тулыһынса баһалау өсөн һыуҙың сигенеүен көтәбеҙ", - тине Любовь Минакова. Уның әйтеүенсә, килһе аҙнала территориаль заказ әҙерләнәсәк һәм муниципалитеттарға аҡса тапшырыласаҡ.

# ЙӘШӘҮ ӨСӨН ШАРТТАР

ҡимммәттәрҙе ҡабул итеүе өсөн шарттар булдырырға тейешбеҙ...

Ултырышта ҡатнашыусылар сит ил граждандары менән эште ойоштороуҙа дәүләт сәйәсәтен тормошҡа ашырыуҙың төрлө аспекттарын тикшерҙе. Республика Башлығы Хакимиәте етәксеһенең эске сәйәсәт буйынса беренсе урынбаҫары Азат Бадранов социаль һәм мәҙәни яраҡлашыу мәсьәләләре буйынса ошондай фекер еткерҙе: "Сит ил граждандары республика үҫешенә, уның иҡтисадының тотороҡло эшенә ҙур өлөш индерә. Шул уҡ ваҡытта йәмғиәттә кире ҡараштарҙың һәм мигранттарҙың тәртибе менән ризаһыҙлыҡтың артыуын билдәләйбеҙ, - тине Азат Бадранов. - Был күренеш шул иҫәптән миграция сәйәсәтенең эҙмә-эҙлекле алып барылмауы менән бәйле, үҙ сиратында был власть менән йәмғиәттең ошо йүнәлештәге конструктив диалогының булмауына килтерә". Был мәсьәләне хәл итеү сиктәрендә Азат Шамил улы республика башҡарма власть органдарына миграция сәйәсәтенең аныҡ йүнәлештәрен нығытырға тәҡдим итте. Шул уҡ ваҡытта урындағы кимәлдә лә ошондай уҡ муниципаль программалар әҙерләргә кәрәклеге һыҙыҡ өҫтөнә алынды.

Башҡортостан буйынса эске эштәр министры урынбаҫары Евгений Полтавец төбәктә мигранттар менән бәйле криминоген хәл тураһында хәбәр итте. Ул республикала барлығы 83 мең самаһы сит ил граждандарының миграция иҫәбендә булыуын белдерҙе. Улар ҡатнашлығында ҡылынған хоҡуҡ боҙоуҙар өлөшө төбәк биләмәһендәге енәйәттәрҙең дөйөм һанынан 0,6 процент тәшкил итә, тине ул.

Ултырышта шулай уҡ республиканың дини лидерҙары - Рәсәй мосолмандарының Үҙәк диниә назараты рәйесе, Юғары мөфтөй Тәлғәт Тажетдин, Башҡортостан мосолмандарының Диниә назараты рәйесе, мөфтөй Айнур Биргәлин сығыш яһап, мигранттарҙың күпселеге республикаға мосолман илдәренән килә, шуға күрә дини-ағартыу эшмәкәрлегенә, шулай уҡ мигранттарҙың мәҙәни көн тәртибенә йәлеп итеүгә иғтибар бүлеү мөһим, тип билдәләне.

Башҡортостан Башлығы Өфөлә яңы Халыҡтар дуҫлығы йортон төҙөү инициативаһы менән сығыш яһаны һәм республика Хөкүмәтенә, баш ҡала хакимиәтенә учреждение проекты һәм ярашлы урын буйынса тәҡдимдәр индерергә ҡушты.

# УЛАРҒА ИХТЫЯЖ БАР

**Төбәк етәксеһе Радий Хәбиров ҡатнашлығында Башҡортостан Башлығы ҡарамағындағы Милләтара мөнәсәбәттәр буйынса совет ултырышында төбәк биләмәһендә сит ил граждандары менән эште ойоштороу мәсьәләләре ҡаралды.**

- Башҡортостан милләт-ара мөнәсәбәттәр өлкәһендә тотороҡлоҡ, тыныслыҡ һәм татыулыҡ биләмәһе, туғандарса берҙәмлекте һәм дуҫлыҡты нығытыу өлгөһө булып торҙо һәм шулай булып ҡала, - тине төбәк етәксеһе Радий Хәбиров. - Республикабыҙ өҙөм үҫешә. Беҙ яңы төҙәлештәр башлайбыҙ, инвестиция проекттарын ғәмәлгә ашырабыҙ. Шуға күрә, әлбиттә, бөгөн кадрҙарға, шул иҫәптән хеҙмәт мигранттарына ихтыяж ҙур. Шулай уҡ Башҡортостанға уҡырға йәки эшкә килгән сит ил граждандарын социаль һәм мәҙәни йәһәттән яраҡлаштырыуға системалы ҡараш булдырыу мөһим. Федераль кимәлдә миграция сәйәсәте йүнәлештәрен көйләүсе заманса норматив хоҡуҡи база булдырылды. Беҙҙең бурыс - урындарҙағы һөҙөмтәле эште дөрөҫ ойоштороу. Тәү сиратта, сит ил граждандарының төбәктә йәшәү, уҡыу һәм эшләү шарттарына социаль һәм мәҙәни яраҡлашыуын тәьмин итеү. Беҙ уларҙың рус телен, Рәсәй йәмғиәтендә ҡабул ителгән тәртип нормаларын уңышлы үҙләштереүе, хоҡуҡи аңдарын һәм хоҡуҡи мәҙәниәтен формалаштырыу, традицион рухи-әхлаҡи

# ЙОРТҺОҘ ХАЙУАНДАРҘЫ...

**Йортһоҙ хайуандарҙы үлтереү - улар кеше өсөн хәүефле булған осраҡта ғына мөмкин булған ғәҙәттән тыш сара. Рәсәй Конституция суды үҙенең ҡарарында ошондай һығымтаға килде.**

Атап әйткәндә, гуманлы ысулдар менән тормошҡа ашырылған был сара ваҡытлыса тотоу урынында булмаған эйәһеҙ хайуан кешегә һөжүм итһә, ҡурҡыныс сир менән ауырыһа, йәшәүгә һәләтһеҙ булһа ғына ҡулланыла. Хайуандарҙы ваҡытлыса тотоу пункттарына урынлаштырыу өсөн нигеҙҙе РФ субъекттары билдәләй ала.

Хужаһыҙ хайуандарҙы үлтереү башҡа саралар кешенең тейешле кимәлдә яҡланыуын, уның хоҡуҡтарын һәм азатлығын, йәмғиәт именлеген тәьмин итә алмағанда ғына мөмкин. Бының өсөн приюттарҙың тулы булыуы ла, бюджет сығымдарын оптималләштереү ҙә нигеҙ була алмай. Был хайуандар менән эш итеүҙә конституцион гуманистик башланғыстарҙан тайпылыуҙы аңлата.

Суд Рәсәйҙә йортһоҙ хайуандар менән эш итеүҙең универсаль принциптарын иҫкә төшөрҙө. Улар тотоу, вакцинациялау, чиплау, агрессив булмаған хайуандарҙы йәшәгән урындарына ҡайтарыу һәм уларҙы яңы хужаларға тапшырыу йәки приюттарҙа тотоуҙы күҙ уңында тота. Шул уҡ ваҡытта төбәктәр урындағы үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алып, үҙ тәртибен булдыра ала.

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостан Роспотребнадзоры лагерҙа файҙаланылмаған ял көндәре өсөн аҡсаны кире ҡайтарыу тәртибен аңлатты. Бындай хоҡуҡ Ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау тураһындағы закондың 32-се статьяһы нигеҙендә бирелә. Килешеүҙе өҙөү өсөн лагерь директорына яҙма рәүештә мөрәжәғәт итергә кәрәк. Ғариза ике данала төҙөлә: береһе лагерь вәкиленә, ә икенсеһе беренсе дананы ҡабул итеү тураһындағы иҫкәрмә менән үҙегеҙгә ҡала. Учреждение директоры аҡсаны кире ҡайтарыу мәсьәләһен хәл итмәһә, суд аша дәғүә белдерергә мөмкин. Һорауҙар буйынса телефон: 8-800-775-01-70.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика Хөкүмәтенең кәңәшмәһендә Өфөнөң 450 йыллығын билдәләгәндән һуң да ҡаланы комплекслы тәҙәкләндереү буйынса эш дауам итәсәген белдерҙе. "Өфө өсөн ҡыҙыу мәлдәр етә, 30 - 31 августа ҡаланың 450 йыллығына арналған төп саралар үтә. Әммә юбилей 31 августа тамамланмаясаҡ, артабан да тәртип урынлаштырыуҙы дауам итәсәкбеҙ", - тине төбәк етәксеһе.

✓"Рәсәй - спорт державаһы" XII халыҡ-ара форумында ҡатнашыу өсөн 400-ҙән ашыу ирекмән ғариза биргән. Спорт форумы 2024 йылдың сентябрь-октябрь айҙарында Өфөлә ойоштороласаҡ. Был сара тотош Башҡортостан спорт йәмәғәтселеге өсөн ысын мәғәнәһендә байрам булмаҡсы. Форумда ҡатнашыу өсөн ирекмәндәр йыйыу дауам итә. Улар түбәндәге йүнәлештәр буйынса ярҙам күрһәтә:оҙатып йөрөүсе,аккредитация ирекмәне, ирекмәндәр координаторы, халыҡ ағымы координаторы, матбуғат хеҙмәте ирекмәне.

✓Өфөлә Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусы, республикала һаулыҡ һаҡлауҙы һәм юғары медицина мәктәбен ойоштороусы, Башҡорт дәүләт медицина институтын булдырыуға ҙур өлөш индергән Зәйнулла Ихсановҡа иҫтәлекле таҡтаташ асылды. Мемориаль таҡтаташ Өфө ҡалаһының Революцион урамында Зәйнулла Ихсанов оҙаҡ йылдар йәшәгән 39-сы йортҡа ҡуйылды.

✓Өфөнән Пермгә тура авиарейстар башлана. Беренсе осош шишәмбе, 6 августа башҡарылды. Икенсе рейс иһә 20 августа. Өфө һәм Пермь халыҡ-ара аэропорттары сайттарында ошондай мәғлүмәт бар. Ташыусыһы - "КрасАвиа" авиакомпанияһы. Осоштарҙы Як-42 самолеты башҡара. Әйткәндәй, Өфөнән Санкт-Петербургҡа авиарейстар арттырылды.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# "АҠЫЛЛЫ ҠАЛА"

**Башҡортостандың ҡала-ауылдарында планлы рәүештә "Аҡыллы ҡала" системаһы элементтары индерелә. Республика етәксеһе билдәләүенсә, байтаҡ йүнәлештәр буйынса эш алып барыла.**

Ғөмүмән, республикала интеллектуаль видеокүҙәтеү системалары үҫешә. 2019 йылдан башлап "Башҡорт ихаталары" программаһы сиктәрендә йорт яны биләмәләрендә 2228 видеокүҙәтеү камераһы эшләй. 2024 йылға тағы ла 700 камера ҡуйыу планлаштырыла. Хәҙер һәр яңыртылған ихатаға уртаса өсәр камера тура килә. Балалар һәм спорт майҙансыҡтарын, парк зоналарын, парковкаларҙы, подъездарға инеү урындары күрелә. Бынан тыш, 2019 йылдан 1816 видеокамера "Торлаҡ һәм ҡала мөхите" милли проектының "Уңайлы ҡала мөхитен булдырыу" программаһы буйынса ҡуйылған. "Өфөнөң 450 йыллығы алдынан республиканың баш ҡалаһына ҙур иғтибар бүләбеҙ. Өфөлә йәмғеһе 2852 видеокүҙәтеү камераһы бар. Улар ярҙамында быйыл дүрт айҙа ғына 14 енәйәт асылды, - тине Радий Хәбиров. - Заманса технологияларҙы үҫтереүҙе дауам итербеҙ, халыҡтың тормош сифатын күтәрербеҙ".

# БЫНДА ЛА МӘҘӘНИЛЕК КӘРӘК

**Эске эштәр министрлығының Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге дәүләт инспекцияһының Башҡортостан буйынса идаралығы начальнигы Владимир Севастьянов хәбәр итеүенсә, 2024 йылдың алты айында юл-транспорт һәләкәттәре һаны уҙған йылдың ошо уҡ осоро менән сағыштырғанда 20 процентҡа, 1 256 осраҡҡа тиклем, кәмегән. Зыян күреүселәр һаны 18,5 процентҡа кәмегән, ә һәләк булыусылар, киреһенсә, 22 процентҡа артҡан.**

Ошоға бәйле Владимир Севастьянов машина йөрөтөү мәҙәниәтен үҫтереүгә һәм авария хәлдәрен иҫкәртеүгә йүнәлтелгән өҫтәмә саралар күреүҙең көнүҙәклеген билдәләне. Улар иҫәбендә - юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоуҙы фотовидеотеркәү комплекстары селтәрен артабан үҫтереү, шул иҫәптән урам саттарындағы хәрәкәт һәм ҡаршы һыҙатҡа сығыу ҡағиҙәләрен үтәүҙе контролдә тотоу. Шулай уҡ трассаларҙың авария хәләндәге участкаларына юл билдәләре ҡуйыу, балалар һәм йәштәр менән аңлатыу эшен көсәйтеү кәрәк. Хәүефһеҙлекте арттырыуға комплекслы ҡараштың уңышлы миҫалы тип Дүртөйлө - Нефтекама һәм Өфө - Бөрө - Янауыл трассалары участкаларын яңыртыуҙы ҡарарға мөмкин. Был эшкә республика Башлығы ҡушыуы буйынса 2022 йылда тотонғайнылар. Яңы юл билдәләре һәм тауыш һыҙаттары ҡуйыу, юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоуҙы теркәү өсөн өҫтәмә камераларҙы монтажлау, йәйәүлеләр үткәүелдәрен йыһазландырыу кеүек өҫтәмә саралар күрелгәндән һуң, был трассаларҙа авариялар һаны һиҙелерлек кәмегән. Ошондай уҡ сараларҙы М-5 Өфө - Иглин федераль трассаһы участкаһында һәм Өфө - Инйәр - Белорет автомобиль юлында ҡулланырға планлаштыралар.

Ултырышта ҡатнашыусылар юл һәләкәттәрендә зыян күргәндәргә ашығыс медицина ярҙамы хеҙмәтенең эшен дә тикшерҙе. Бының өсөн Башҡортостан биләмәһендә 67 травматология үҙәге эше ойошторолған. Республиканың һаулыҡ һаҡлау министры Айрат Рәхмәтуллин ведомство бойороҡтары менән үҙәктәргә яуаплылыҡ зоналарын һәм пациенттарҙы маршрутлаштырыуҙы беркетеүҙәре хаҡында хәбәр итте. Бынан тыш, төбәктә 49 вертолет һәм ултыртыу майҙаны йыһазландырылған. Был ауыр йәрәхәттәрҙән зыян күреүселәрҙе медицина учреждениеларына ваҡытында алып барып еткереү осраҡтарын арттырыу мөмкинлеген бирә.

Ведомство-ара комиссия эшенең йомғаҡтары буйынса Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров шулай тине: "Юлдарҙағы хәл беҙҙең иғтибарҙы талап итә. Авариялар һаны кәмеүгә ҡарамаҫтан, һәләк булыусылар һаны арта, - тип билдәләне республика етәксеһе Радий Хәбиров. - Шуға бәйле халыҡтың хәүефһеҙлеген арттырыу өсөн тәү сираттағы саралар комплексын билдәләү мөһим. Был мәсьәләне планлы рәүештә хәл итәсәкбеҙ".

# КӘМЕЙ ИКӘН...

**Башҡортостанда онкологиянан үлеү осраҡтары кәмей, тип хәбәр итә республиканың һаулыҡ һаҡлау министрлығы. Ведомство мәғлүмәттәре буйынса, төбәктә яман шештән үлем күрһәткесе 2019 йылда 100 мең кешегә 179,3 осраҡ тәшкил иткән, 2023 йылда - 154,9.**

Башҡортостанда онкология хеҙмәтен үҫтереү һөҙөмтәһендә юғары күрһәткестәргә өлгәшелде. Атап әйткәндә, "Һаулыҡ һаҡлау" милли проектының "Онкология ауырыуҙары менән көрәш" төбәк программаһын индереү республиканың пациенттар тикшереү үткән 13 күп профилле медицина ойошмаһы нигеҙендә амбулатор онкология ярҙамы үҙәктәрен булдырырға мөмкинлек биргән. Бынан тыш, онкология диспансерының 10 филиалында тәүлек әйләнәһенә эшләгән бүлексәләр һәм шешкә ҡаршы дарыу терапияһының көндөҙгө стационарҙары асылған. Былар барыһы ла заманса шешкә ҡаршы терапияны яҡшыртырға мөмкинлек бирә.

"Башҡортостанда яман шештең һәр икенсе осрағы иртә стадияла асыҡлана. Бынан тыш, бер йыллыҡ үлем осраҡтарының кәмеүе күҙәтелә. Ярҙам күрһәтеү сифатын яҡшыртыу 5 йыллыҡ йәшәү кимәлен арттырыуға йоғонто яһаны, 2020 йылдан был күрһәткес 11 процентҡа артҡан", - ти Башҡортостан һаулыҡ һаҡлау министрлығының штаттан тыш баш белгесе Рөстәм Әйүпов.

Телемедицина консультациялары (ТМК) үткәреү арҡаһында пациентты тикшереү логистикаһы ҡупкә яҡшырҙы. Алыҫ ауылдарҙа йәшәүселәргә һәр саҡ Өфөгә килергә кәрәкмәй. Телемедицина консультацияһын "табип-пациент" форматында хатта ФАП-та ла үткәрергә мөмкин. Мәҫәлән, быйтыр онкология профиле буйынса 60 меңдән ашыу телемедицина консультацияһы үткәрелгән.

Әлеге ваҡытта республика онкология диспансерында колоректаль яман шеш, тире меланомаһы, бәләкәй күҙәнәкле булмаған үпкә яман шеше булғанда молекуляр-генетик маркерҙарҙы билдәләү практикаға индерелә, улар ауырыуҙың клиникаға тиклемге стадияһында пациенттарҙың туғандарында онкологик патологияны асыҡларға мөмкинлек бирәсәк, тип билдәләнеләр республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығында.

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, "Сәләмәт республика - сәләмәт төбәк" акцияһы проекты сиктәрендә Башҡортостанда 15 апрелдән табиптар 140 тораҡ пунктты ҡарап сыҡты, уларҙа 77 меңдән ашыу тикшереү үткәрелде. Табиптар онкология, шәкәр диабеты һәм мең ярым саһаы йөрәк-ҡан тамырҙары сире кеүек ауырыуҙарға 1800 шик асыҡлаған. Бөтә пациенттар ҙа өҫтәмә тикшереүгә ебәрелгән.

ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!



# КҮРКӘМЕРӘК...

**Башҡортостан Республикаһының баш ҡалаһы, ҡала үҙәгенең туристик кодын проектлау буйынса конкурста еңеп, 208,8 миллион һумлыҡ федераль субсидия һәм 4,3 миллион һум күләмендә ярҙам алды.**

"Өфө туркоды ҡалала яңы әүҙемлек майҙандары, ҡала халҡы һәм ҡунаҡтары, шул иҫәптән сәләмәтлек буйынса мөмкинлектәре сикләнгән граждандар өсөн уңайлы мөхит булдырыу тигәнде аңлата. Ҡаланың тарихи үҙәгендә - Ленин урамындағы аллеяла, Салауат Юлаев исемендәге майҙанда, Сергей Аксаков баҡсаһында һәм Ағиҙел ярында булған үҙгәрештәр Өфөнө яңыса аса, уны туристар өсөн ылыҡтырғыс итә", - тине Башҡортостан Республикаһының эшҡыуарлыҡ һәм туризм министры Зөһрә Гордиенко.

Проектҡа ярашлы, өфөләргә һәм баш ҡала ҡунаҡтарына урамдарҙың һәм объекттарҙың боронғо һүрәттәрен күрһәтергә мөмкинлек биргән стереоскоптар ҡуйылған. Улар Совет, Карл Маркс, Коммунистик урамдарында, Ҡунаҡһарай һәм Салауат Юлаев һәйкәле янында урынлашҡан. "Өфө үҙенең 450 йыллығын байрам итеүгә алдан уҡ әҙерләнә башланы. Әҙерлек барышында беҙ ҡала үҙәген туристар өсөн уңайлы итеүгә айырыуса яуаплылыҡ менән ҡараныҡ. Төп ылыҡтырғыс объекттарҙы һәм ял итеү урындарын берләштерҙек. Хәҙер тарихи үҙәк тағы ла уңайлыраҡ булып китте, ҡыҙыҡлы объекттар күбәйҙе", - тип билдәләне Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев.

# ТӨҘӨКЛӘНДЕРӘЛӘР

**Өфөлә Октябрь районын төҙөкләндереү эштәре дауам итә. Әле баш ҡаланың 450 йыллығын билдәләүгә әҙерлек сиктәрендә Сәйет Ғәлиев бульвары һәм "Ҡурай тотҡан малай" фонтаны алдындағы майҙан төҙөкләндерелә.**

Ер эштәре һәм япмалар һалыу тамамланған, тышҡы яҡтыртҡыстар һәм видеокүҙәтеү системаһы ҡуйылған, балалар майҙансығы урынлаштырылған, бәләкәй архитектура формалары ҡуйылған, йәшелләндереү эштәре башҡарылған. Бордюрҙар ҡуйыу, тротуар плитәләре һалыу, нигеҙҙе асфальт-бетонға әҙерләү, газондарға автоматик һыу һибеү системаһы ҡуйыу, ҡара тупраҡ түшәү, Октябрь проспекты киҫелешендә асфальт һүтеү буйынса эштәр дауам итә. Фонтан яңыртыла. Бында тимер-бетон һауыт һәм торбалар ҡуйыу эштәре тамамланған да инде. Әлеге ваҡытта тимер-бетон һауытты тышлау буйынса эш алып барыла. Уны бер айҙан тамамлау күҙаллана.

Бынан тыш, мэрия хакимиәттең матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, Өфө һәм Башҡортостан митрополиты Никондың фатихаһы менән Комсомол урамында изге апостолдар Кирилл һәм Мефодий иҫтәлегенә арналған сиркәүе төҙөкләндереләсәк. Авария хәлендә булған ағас ҡоролма һүтеп алынған да инде, нигеҙ төҙөлә башлаған.

Урындағы төҙөүсе ярҙамында Мәжит Ғафури исемендәге парк биләмәһе төҙөкләндерелә. Эштәр 8 гектар майҙанда бара. Яңы тротуар таштары, гранит бордюрҙар, йәшелләндереү, бәләкәй архитектура формалары, яҡтыртыу, уйын майҙансыҡтары, эскәмйәләр, эттәр йөрөтөү майҙансығы эшләнә - майҙан саф һауала йөрөү һәм ял итеү өсөн уңайлы буласаҡ.

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Кәбеҫтә

Кәбеҫтә (капуста белокачанная) ике йыллыҡ үҫемлек. Ул витаминдарға бик бай. Мәҫәлән, С витамины кәбеҫтәлә әфлисун, лимонға ҡарағанда күберәк. Гәрсис майҙары булғанға еҫе лә үҙенсәлекле, көкөрт тә бар. тоҙло кәбеҫтәлә һөт кислотаһы була. Кәбеҫтәнең төп файҙаһы - уның һуты ашҡаҙан сей яраһын дауалай. Шулай уҡ колит, ашҡаҙан тонусы юғалғанда, бауыр һәм үт ҡыуығы ауырыуҙары, түбән әселекле гастритты дауалағанда ла файҙалы. Кәбеҫтәне ашҡаҙан һутының юғары кислоталылығы, эс киткәндә, метеоризм булғанда һаҡ ҡулланырға. Сей яра (язва) булғанда кәбеҫтәне шул көйөнсә ашау ярамай, уның һуты ғына файҙалы.

❖ Ангинанан тоҙһоҙ һыуҙа 300 грамм йәш кәбеҫтәне йомшарғансы бешерергә, һөҙөргә һәм 30-35 градусҡаса һыуытырға. Кәбеҫтә бешкән һыуҙың 1 стаканына 3 балғалаҡ бал ҡушырға һәм көнөнә 4 тапҡыр ашарҙан алда яртышар стакан эсергә. Тамаҡтың ауыртыуы бөткәнсе дауаланырға.

❖ Атеросклероздан яңы кәбеҫтә һутын әҙерләп, көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 1 сәғәт алда ярты стакан эсергә. Дауаланыу - 1 аҙна, шунан 5 көнгә туҡталып торорға һәм тағы ла 10 көн һут яһап эсергә. Артабан 1 айға туҡталырға һәм дауаланыуҙы ҡабатларға.

❖ Бөйәлдә таш булһа, йоҡоһоҙлоҡ, глистарҙан 1 ҡалаҡ кәбеҫтә орлоғона 0,5 литр һыу ҡойоп, 30 минут һыу парында быҡтырырға, тәүге күләменә еткергәнсе өҫтәп ҡайнар һыу ҡойорға һәм һыуытырға. Төнәтмәне ашарҙан 10-14 минут алда йәки ашағандан һуң 2 сәғәт үткәс һәм төнгөлөккә көнөнә 3-4 тапҡыр яртышар стакан эсергә. Был рәүешле 1-2 ай дауаланырға.

❖ Тымау тейгәндә яңы әҙерләнгән кәбеҫтә һутының 2 тамсыһын көнөнә 2-3 тапҡыр танауға тамыҙырға.

❖ Цирроздан көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда яңы әҙерләнгән кәбеҫтә һутын йылытып 1/2 стакан эсергә.

❖ Һипкелдәрҙән косметик салфеткаларҙы кәбеҫтә тоҙламаһына манып, һипкелдәргә ябырға. Боҫламаны көнөнә 3 тапҡыр 10-ар минут тоторға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА**
**әҙерләне.**

✓ *Берәй ваҡыт, үҙем МХО ветераны булғас, балаларыма һәм ейәндәремә ҡасандыр фронтовик олатайымдан ишеткән һүҙҙәрҙе әйтәсәкмен: "Тормошто һәм тыныслыҡты ҡәҙерләгеҙ, балалар. Был кешенең төп ҡиммәттәре".*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Ҡор, оҙан

**(Тетерев)**



Ҙурлығы буйынса өй тауығы кеүек, ата ҡорҙоң ҡанатында аҡ буй һыҙыҡтар, ҡойроғо ике яҡҡа оҙон ҡаурыйҙар менән бөгөлөп тора, үҙе ҡарараҡ төҫтә. Инә ҡош сыбар, буй-буй ҡара һыҙатлы, ҡойроғо тигеҙләп ҡырҡылған кеүек.

Урманлы, урманлы-далалы райондарҙа йәшәй. Ҡайынлыҡты, һирәк ағаслыҡты, урман ситен үҙ итә. Ҡышын ҡайын урманында ғына ҡорҙо осрата алаһығыҙ, сөнки был миҙгелдә тап ҡайын "алҡа"-һы улар өсөн төп ризыҡ булып тора. Ҡышты бер ҡорға тупланып, күмәкләп үткәрәләр, ныҡ һыуыҡ төндәрҙә ҡарға сумалар. Оялары ерҙә. Инә ҡор 5-11 йомортҡа һала. Яҙын инә ҡоштарҙы әүрәтеү өсөн ата ҡорҙар уйын үткәрә - урман аҡланында йыйылып, бер-береһе артынан йүгерә, хатта һуғышалар ҙа. Ҡайһы саҡта бындай уйындар көҙөн дә осрай.

Йәйен үлән, еләк-емеш, бөжәктәр, ҡышын - ағас бөрөһө һәм "алҡа"һы, ылыҫлы ағастарҙың йәш тубырсыҡтарын ашай.

Һуңғы мәлдә ҡорҙар кәмей, был уларға күпләп һунар итеү, урмандарҙың элекке кеүек аулаҡ булмауы, унда мал көтөү сәбәпсе.

## Һуйыр

**(Глухарь)**



Кәүҙәһенең ҙурлығы ҡаҙ кеүек, ҡойроғоноң осо түңәрәкләнеп тора. Ата һуйыр ҡара-күгелйем төҫтә, ҡорһағында һәм ҡанатының аҫҡы өлөшөндә аҡ таптары бар. Суҡышы асыҡ төҫтә, көслө. Инә һуйыр ҡара һыҙатлы, көрәнерәк ерән ҡаурыйҙарын ҡара һыҙаттар биҙәп тора.

Кеше аяғы баҫмаған ҡара урмандарҙы үҙ итә, ояһын ергә ҡора. 5-9 йомортҡаһы була. Яҙ ата һуйыр уйындары үҙе бер йәм, ул һәр иртә ерҙә йәки ағасҡа ҡунып, ҡойроғон йәйеп, башын артҡа ташлап гөрөлдәй. Гөрөлдәү ике өлөштән тора - тәүгеһе шырпы сыйған тауышҡа оҡшап тора, икенсеһе сарҙа бысаҡ үткерләгәндә хәтерләтә. Инә ҡоштар был уйындар мәлен ситтән күҙәтә.

Йәй - үлән, емеш, ҡыш башлыса ылыҫ менән туҡлана. Көҙ йылға буйында, ҡыш юлға сығып, ваҡ таш йота. Был уға ризыҡты эшкәртергә ярҙам итә: таштар бер-береһенә ышҡылып, ризыҡты ла ваҡлай.

Башҡортостандың ҡарағай урмандарында осрай. Шулай ҙа уларҙың һаны таулы-урманлы райондарҙа ғына үҙгәрешһеҙ, бер кимәлдә һаҡлана.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*ИЛҺӨЙӘРЛЕК МӘКТӘБЕ*

# ТОРМОШТОҢ ҠӘҘЕРЕН БЕЛДЕМ...

**Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы Башҡортостан яугиры яҡташтарының хеҙмәт итеүенең ысын сәбәптәре хаҡында һөйләне. Ул Башҡортостан халҡы башлыса Тыуған илгә һөйөү һәм тиҙерәк еңеүгә өлгәшеү теләге арҡаһында фронтҡа китә, тип иҫәпләй. Унын һүҙҙәренсә, Оборона министрлығы менән килешеү төҙөгән кешеләр аҡсалата ярҙам өсөн рәхмәтле, әммә беренсе урында барыбер патриотизм тора. Был хаҡта "Башҡортостан" мотоуҡсылар полкының "Журналист" ҡушаматлы яугиры Рафиҡ ӘХМӘТШИН ҡыҫҡа ваҡытлы ял ваҡытында "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы журналисына һөйләне.**



Башҡортостан юлдаш телевидениеһы каналында хәбәрсе булып эшләгән "Журналист" 2023 йылдың декабрендә илдең хәрби ведомствоһы менән контракт төҙөй. Ул әле идара итеү ротаһы операторы булып хеҙмәт итә. Рафиҡ Әхмәтшин Махсус хәрби операция башланыр алдынан да Донбасҡа журналист һәм ирекмән булараҡ күп тапҡыр бара, БСТ каналында яугирҙар тормошон, Башҡортостандың Луганск Халыҡ Республикаһындағы гуманитар миссияһын яҡтырта. Командировкалар ваҡытында егет 30 йылдан ашыу рус телен, рус мәҙәниәтен яратмағандар менән бергә йәшәргә тура килгән кешеләрҙең яҙмышы хаҡында уйлана. Бының нимәгә килтереүе бөтәһенә лә билдәле.

Бына инде ярты йылдан ашыу Рафиҡ Әхмәтшин алғы һыҙыҡта тора. Ҡыҫҡа ғына ялға ҡайтҡандан һуң, яугир тағы фронтҡа китте. "Журналист" ете ай хеҙмәт иткән ваҡытта туғандарының һәм яҡындарының һөйөүен, тыныс тормошто ҡәҙерләргә өйрәнгәнен таный. Шулай уҡ ирҙәр дуҫлығын аңлауы тураһында бәйән итә.

"Эйе, яугирҙар араһындағы ысын берҙәмлекте, бер-береңә ярҙам итеүҙең ниндәй ҡөҙрәтле көс икәнен татыным. Беҙҙең сафтарҙа хәрби хеҙмәт үтмәгәндәр ҙә бар. Улар бер ҡасан да ҡулына ҡорал тотмаған. Улар менеджер, төҙөүсе, ашнаҡсы, уҡытыусы, аграрий булып эшләгән. Хәрби күнекмә үтеүгә ҡарамаҫтан, улар өсөн хәрби бәйләнеш һыҙығынан бер нисә саҡрым алыҫлыҡта булыу һәм шартлауҙар, пулялар - былар барыһы ла донъя тәртибенең ҡырҡа үҙгәреүенә тиң, - ти Рафиҡ Әхмәтшин. - Кисә был ир-егеттәр тыныс тормошта йәшәне: күлдәк, кроссовкиҙарын кейеп, иртән үҙ коллективтарына эшкә килде, кисен ғаиләләре янында киске аш ашаны. Әммә улар ҡыйыу һәм яуаплы ҡарар ҡабул итте. Ҡайһы береүҙәргә, әлбиттә, шик-шөбһәләрҙе, икеләнеүҙәрҙе еңергә, хеҙмәт итеүгә ҡағылышлы күп һорауҙарға яуап эҙләргә тура килде, тип уйлайым. Әммә булдыра алдылар бит. Командование әҙер булмағандарҙы һуғышҡа ташламай. Улар өҫтәмә рәүештә күнекмә үтә. Һөҙөмтәлә беҙҙең полк Махсус хәрби операцияла иң көслө подразделениеларҙың береһе булып ҡала".

"Башҡортостан" полкында яңы килгән яугирҙарҙы йылы ҡаршы алалар һәм уларға туғандарса ҡарайҙар, сөнки, "Журналист" билдәләүенсә, улар барыһы ла Башҡортостан улдары. Полкта төрлө милләтле һәм төрлө дин тотҡан республика халҡы хеҙмәт итә. Әммә уларҙың барыһын да тыуған яҡҡа һөйөү берләштерә. "Беҙҙең арабыҙҙа фронтҡа аҡса өсөн килмәгәндәр бик күп. Беҙ илдең Оборона министрлығына, Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Фәрит улы Хәбировҡа бындай матди дәртләндереү өсөн рәхмәтлебеҙ, әммә ир-егеттәрҙең хеҙмәт итергә ысын мотивацияһы - илһөйәрлек. Ошо тойғо арҡаһында яугирҙарҙың улдары, аталары, ағалары артынан килеүенә миҫалдар бар. Мин Ҡырмыҫҡалы районынан "Башҡортостан" полкы хәрби хеҙмәткәре менән танышмын, ул улы менән бер батальонда йәнәш хеҙмәт итте. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, улы һәләк булды".

"Һуғышта ҡурҡынысмы?" тигән һорауға Рафиҡ Әхмәтшин йылмайып: "Аҡылһыҙ кешеләр генә ҡурҡыу тоймай. Әлбиттә, ҡурҡыныс. Әммә Башҡортостан яугирҙары иңгә-иң терәшеп һуғыша. Беҙ һәр ваҡыт бер-беребеҙгә яҡын. Юғарыла әйтелгәнсә, яугирҙар бик берҙәм. Һәм, иң мөһиме, ғаилә, яҡындарға булған мөхәббәт тураһында уйлағанда ҡурҡыу сигенә. Мин өйгә тере ҡайтырға тейешмен! Был фекер бронежилеттан көслөрәк. Аллаһы Тәғәлә бөтәһен дә - иманлыларҙы ла, атеистарҙы ла һаҡлай, - тине Рафиҡ Әхмәтшин һәм бер аҙ уйланғандан һуң дауам итте. - Берәй ваҡыт, үҙем МХО ветераны булғас, балаларыма Һәм ейәндәремә ҡасандыр фронтовик олатайымдан ишеткән һүҙҙәрҙе әйтәсәкмен: "Тормошто һәм тыныслыҡты ҡәҙерләгеҙ, балалар. Был кешенең төп ҡиммәттәре".

Рафиҡ Әхмәтшин үҙенә ныҡ тәьҫир иткән бер факт менән урта҆лашты. Ул Учалы районы Байсаҡал ауылынан килгән 60 йәштән үткән контрактник менән таныша. Ул ғүмер буйы водитель булып эшләгән. Махсус хәрби операция башланғанға тиклем Ирәмәлгә туристар йөрөткән, уларға башҡорт төбәгенең матурлығын күрһәткән. "Журналист" фекеренсә, ир артабан да эске туризм өлкәһендә эшләй алыр ине, әммә ул Махсус хәрби операцияны һайлаған. Уны бер нисә тапҡыр хәрби комиссариаттан кире боралар, сөнки ул йәше буйынса яраҡһыҙ иҫәпләнә. Әммә ул бик ныҡышып йөрөп, контрактҡа ҡул ҡуйыуға һәм "Башҡортостан"ға ҡабул ителеүгә өлгәшә. Һуңыраҡ ул ейәнсәрен дауалауға аҡса кәрәклеге тураһында әйтә. "Фронтта ул водитель булып хеҙмәт итә, әммә был уның хәүефһеҙлектә булыуын аңлатмай, - ти Рафиҡ Әхмәтшин. - Беҙҙең тирә-яҡта дошмандың пилотһыҙ аппараттары даими әйләнә һәм теләһә ҡайһы ваҡытта беҙҙең эргәлә генә снаряд ярылырға мөмкин. Фронтта водителдәрҙең ни тиклем хәүефле вазифа биләүен белһәгеҙ икән, улар һәр ваҡыт дошмандың күҙ алдында. Оборона министрлығы менән бәйләнешкә инеү һәм хәрби хәрәкәттәр алып барыу зонаһында хеҙмәт итеү - был ябай аҙым түгел һәм бик шәхси ҡарар. Буласаҡ яугирҙарға бер төрлө генә кәңәш юҡ. Һәр кем үҙе ни өсөн яҙмышында шундай боролош кәрәклеген аңлай. Әммә шуға ышанам: Ватанды яҡлаусы ихтирамға һәм ныҡ итеп ҡулын ҡыҫыуға лайыҡ, сөнки ул икеләнеүҙәрҙе еңеп, ҡыйыу аҙым яһаны..."

...Бына ял көндәре һиҙелмәй үтеп тә китте. Рафиҡ Әхмәтшинды оҙатырға уның ғаиләһе һәм коллегалары күмәкләп килде. "Журналист"тың ҡатыны Зөһрә Арсаева "Юлдаш" радиоһында эшләй, яңылыҡтар хеҙмәтен етәкләй. Бынан алда "Башинформ" Башҡортостан юлдаш телевидениеһы һәм "Юлдаш" радиоһы коллективы аҡса йыйып, "Башҡортостан" полкы хәрбиҙәренә гумконвой менән ебәрелгән дрон һатып алыуы хаҡында хәбәр иткәйне.

Зөһрә Арсаева иренең ҡарары уның өсөн көтөлмәгән хәл булыуын һөйләне: "Рафиҡ Махсус операцияға барыуын юлға сығыр алдынан ғына әйтте. Ирем, ысынлап та, Тыуған иленең патриоты һәм беҙ уның ҡарарын хөрмәт итәбеҙ. Илгә, республикаға һөйөү уның репортаждарында, шиғырҙарында, яҡташтарына ҡарата мөнәсәбәтендә күп тапҡыр сағыла. Беҙ ғаиләлә уның ҡарарынан оло тетрәнеү кисерҙек. Башта бик ауыр булды. Һөнәребеҙ буйынса фронттың һәм Махсус хәрби операция яугиры булыуҙың нимә икәнен беләбеҙ бит инде. Әммә һуңынан көс, сабырлыҡты йыйып, Өфөгә йыйылыу пунктына килдек. Бөтә туғандар, коллегалар Рафиҡты оҙатырға килде һәм тиҙерәк ҡайтыуын теләне. Көн һайын көтөү һәм өмөттәр мине көслөрәк итә. Өмөтһөҙлөккә, паникаға бирелмәйбеҙ, улай ярамай. Тиҙҙән барыһы ла тамамланыр һәм ғаилә башлығы өйҙә булыр, ярат҆ан эшен дауам итер, тигән өмөт менән йәшәйбеҙ. Уны бөтә дуҫтары көтә һәм мин уларға ярҙамдары өсөн рәхмәт белдерәм. Балалар менән уны һәм башҡа яугирҙарҙы иҫән-һау әйләнеп ҡайтыуҙарын көтәбеҙ".

**Эдуард ҠУСҠАРБӘКОВ.**

✓ *Ришүәтселеккә килгәндә, моғайын, Ермолаев башҡаларҙан гонаһлыраҡ та булғандыр, әммә, дөйөм алғанда, уны белгәндәрҙең баһаһы буйынса, ул дини ҡарашлы, ярлыларға ярҙам ҡулы һуҙып тороусыларҙан булған.*

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**Кенәз Г.С. Волконский**

**(1803-1817 йылдарҙа Ырымбур хәрби губернаторы була).**

Зауряд-офицер чиндары булған Ырымбур казактары менән хеҙмәт иткән саҡтарында башҡорттар шундай уҡ чиндар менән бүләкләнде. Бындай чиндарҙы биреү төбәктәге барса ғәскәрҙәрҙең командиры булған хәрби губернаторҙан торҙо. Кенәз Волконский ваҡытында, бындай заттарға мохтажлыҡ булмаһа ла, башҡорттарға зауряд-офицер чиндарын биреү сиктән ашып китә. Уларҙың һәр ҡайһыһы тиерлек көмөш бөлдөргәлә офицер ҡылысын йөрөтөргә теләне. Башҡорттарҙың биштән бер өлөшө зауряд-офицерҙарға, башлыса, есаулдарға әйләндерелде, йөҙ баштары ла булды, әммә хорунжийҙары аҙ булды, улар туранан-тура иң юғары чин алырға ынтылды тип, һис бер арттырмайынса әйтеп була.

Казактарҙа булмаған чиндар ҙа уйлап сығарылды, мәҫәлән, "Поход старшинаһы", уға хеҙмәткә барған саҡтарында башҡорттар менән етксөлек итеү - "дистаночный начальник" вазифаһын башҡарыу йөкмәтелә, уның ҡулы аҫтында бер яҡтан йыйылған бер нисә башҡорт командаһы була, әммә был һирәк осрай торған чин ине. Хәрби хеҙмәттә башҡорттар казак офицерҙарына буйһондо.

Зауряд-чиндар менән бүләкләүгә кантон начальниктары тәҡдим итә, улар бының өсөн ҙур ришүәт ала һәм Ырымбурға, ул саҡтағы канцелярия етәксеһе, көслө власҡа эйә булған подполковник Алексей Терентьевич Ермолаевҡа ебәрә, ә ул чин юллап килеүселәргә шундуҡ кенәз Волконский исеменән патент рәүешендә чин биреү хаҡындағы указдарҙы тапшырған.

Ермолаев үҙенең писарҙарына ҙур байрамдар алдынан чин бирерлек башҡорттарҙы һайлап алып, бының өсөн аҡса йыйыуға рөхсәт бирә. Ә кенәз Волконский барыһына ла имза ҡуя һәм кантон начальниктарына ебәргән күрһәтмәләрендә чин биреүҙе ҙур байрамдар хөрмәтенә башҡарылыуы хаҡында аңлатма ла бирә . Башҡорттарҙың чин алыуҙы нисек итеп намыҫ эше тип ҡарауы хаҡында халыҡ араһында оҙаҡ ҡына йөрөгән бер әйтемде килтерәм: ситтән килгән кеше бер башҡорттан ни тураһындалыр һорашҡас, ул бына нисек яуап ҡайтарған: "передний не спроси, задний спроси, моя брат урядник служит".

Башҡорттарға шундай чиновниклыкты индереү халыҡтың ике төркөмгә бүленеүенә килтерә: был класс үҙҙәрен ябай башҡорттарҙан өҫтөнөрәк итеп күрә һәм ҡайһы саҡта уларҙан үҙҙәренә денщик кеүек хеҙмәт итеүҙе талап итә. Халыҡтың телəктәшлеге ҡаҡшай һәм ул бола күтәреү хаҡында уйлап та бирмәй.

Ермолаев башҡа күп осраҡтарҙа ла казактарҙан да, ҡырғыҙҙарҙан да ришүәт ала, һәм бар нәмәне лә үҙ ҡулында тотоп, бик ҙур капитал туплай, башҡорттарҙан артыҡ ҙур күләмдә булмаған ер һатып ала - балалары булмаған, уны күсемһеҙ милек әллә ни ҡыҙыҡһындырмай.

Ул замандағы ҡылыҡһырлау өсөн тағы ла бер миҫал килтерәм: кенәз Волконский казак форштадтына пар ат егелгән коляскала йөрөй. Унда бик көслө ике казак йөшәгән. Береһенең фамилияһы иҫемдә ҡалған - Хлебников, халыҡ уға "күбә-казак" тигән ҡушамат таҡҡан. Бына шул "күбә", шаярып, экипаждың артҡы тәгәрмәстәрен ҡулдары менән эләктереп, уны ебәрмәй тота икән. Кенәз асыуланмай; экипаждан бер аҙ аҡса ташлай ҙа: "Ебәр", - тип әйтә. Казак башын эйә лә әйтә икән: "Түләүһеҙ булмай". Янынан әжер бирең, кенәз форштадт буйлап йөрөүен дауам иткән.

Бында халыҡтың ул замандағы характерлы булған хәрәфәттәргә ышаныуын һүрәтләгән тағы ла бер фактты килтерәм. Кенәз Волконский ваҡытында төндәрен ҡалала "кеше-суҫка" рәүешендәге әүермән йөрөүе, яңғыҙ кешеләргә ташланып, уларҙы аяҡтан йығыуы хаҡындағы хәбәрҙәр ысынға алынған. Ҡурҡыштан һуштары киткән кешеләр, иҫтәренә килгәс, үҙҙәренең ҡиммәтле әйберҙәре юғалыуын белгән. Ҡаҙнасы Алексей Михайлович Романовский нисектер бер төндә кенәз уҙғаран кисәнән ҡайтып килгәнендә, баҙар янында әлеге "суҫка"ны осратҡан; һуңғыһы, мырҡылдап тороп, уға ташланған һәм, башҡаларҙы һуғып йыҡҡан кеүек, уны ла аяғынан йығырға ниәт иткән, әммә ул йығылмаған һәм, "суҫка"ның ҡулдарын күреп ҡалып, уның менән көрәшә башлаған, начальниктар янына барғанында һис бер ҡалдырмаған шпагаһы менән ҡолаҡтарына һуҡҡан; шул саҡта "суҫка"-уның башынан бик оҫта итеп уның мороно һүрәтләнгән баш кейеме ысҡынып килеп төшкән. Романовский бер һалдаттың суҫка булып кейенеп, төндәрен ҡурҡаҡ кешеләрҙе талап йөрөүен аңлап ҡала. Икенсе көндә ҡолағы яраланған һалдат тотолған һәм хөкөмгә тарттырылған, шул ваҡыттан бирле ҡалала әүермәндәр осрамай башлай.

Күпкә һуңыраҡ, 1843 йә иһә 1844 йылдарҙа, ошо әүермән суҫка менән бәйле бер комик хәл килеп сыға. Бер төндә төрмә янында үҙ көтөүенән тороп ҡалған ҙур көҙәлә ата суҫка пәйҙә була. Төрмә ҡарауылында торған һалдат офицерына әлеге әүермәндең янынан бында килеп сығыуы тураһында әйтә. Офицер уны эҙәрлекләргә рөхсәт итә һәм үҙе лә ошо эштә ҡатнаша. Эҙәрлекләүгә дусар ителгән, ысынлап та йыртҡысҡа оҡшаған хайуан ҡурҡышынан быҫраҡ күләүеккә кереп китеп, шунда йығыла. Офицер уны эләктереп алам тигәндә, тегеһе ысҡынып, ҡасып китә... Офицер ҡуйы батҡаҡҡа батып, быҫранып бөтә. Кейемен алыштырырға ваҡыты ҡалмағас, уны, шундай йәмһеҙ, быҫраҡ ҡиәфәттә үҙенең начальнигы күреп ҡалып, ҡулға алырға бойора һәм башҡаларға уның нисек итеп рисуай булыуы хаҡында һөйләй. Был офицер Неплюев хәрби училищеһы курсын тамалаған прапорщик Дьяконов була.

Волконский Ырымбурҙан киткәс, Ермолаев отставкаға сыға, ә яңы тәғәйенләнгән губернатор Эссен, уның эштәрендә башбаштаҡлыҡҡа юл ҡуйылыуын күреп, уны хәрби судҡа бирҙертә, әммә был эҙемтәһеҙ ҡала. Ҡырғыҙ (ҡаҙаҡ) солтанының бәләкәй генә ҡыҙ сағынан уҡ килтерелгән балаһы уның тәрбиәһендә үҫә, һуңынан суҡындырыла һәм Екатерина тип исемләнә, тәрелек атаһы буйынса уны Василий ҡыҙы тип атайҙар Ул беренсе мәртәбә адъютант, майор Ивановҡа кейәүгә бирелә һәм унан ике ҡыҙы тыуа - олоһо Анна Осип ҡыҙы һәм кесеһе Вера Осип ҡыҙы, һуңғыһы 1893 йылдан бирле дворяндарҙың элекке губерна башлығы булған Ипполит Шоттка кейәүгә бирелә; минән һуң уның улы Лев Шотт та Ырымбур губернаһы дворяндары етәксеһе итеп һайланды.

Ермолаев ябай сығышлы ине - һалдат улы, пехота полкында барабансы,ә аҙаҡтан писарь вазифаһын башҡара.

Ришүәтселеккә килгәндә, был ул замандың дөйөм боҙоҡлого булды. Моғайын, ошо йәһәттән Ермолаев башҡаларҙан гонаһлыраҡ та булғандыр, әммә, дөйөм алғанда, уны белгәндәрҙең баһаһы буйынса, ул дини ҡарашлы, ярлыларға ярҙам ҡулы һуҙып тороусыларҙан булған. Уның васыятына ярашлы, үҙе биләгән ике ауылда - Репьевкала һәм Ҡорғаҙыла - Ермолаевтан ҡалған капитал иҫәбенә сиркәүҙәр һалына. Ермолаев Ырымбур интеллигенттарының ҙур булмаған йәмғиәте өсөн саҡырылған мәжлестәр уҙғара, бында, башлыса, һәр шәмбелә тиерлек күпләп әҙерләнгән билмән менән һыйлайҙар. Был көндә Ермолаев мунсаға йөрөгән, һәм төшкө аш мәжлесендә өҫтәлгә урындағы кешеләр һәр саҡта ла бик яратып ашаған билмән ҡуйылған. Башҡа яҡшы йорттарҙа ла ошо йола башҡарыла торған була.

Кенәз Волконскийҙы ҡылыҡһырлау өсөн үтә әһәмиәтле бер ваҡиғаны миҫалға алырға була. Штабтағы хәрби дежурствола, хаттар менән эш итерлек офицерҙар етешмәгәс, бер граждан чиновнигы адъютант вазифаһын башҡара. Үҙенең бындағы ябай ғына хәле менән риза булмайынса, юғарыраҡ баҫҡысҡа күтәрелергә өмөт итеп, ул үҙен майор чинына күсереүгә лайыҡ тип, бүләкләү исемлегенә индерә; ул быны ни рәүешле башҡарған, йәғни Волконский ҡағыҙға имза ҡуйғасмы, әллә шуға тиклемме, тарихта ҡалмаған, әммә кенәз уның мутлығы хаҡында был ҡыйыу аҙым армия полкына күсерелгәс кенә белеп ҡала, бик ныҡ асыулана, һәм, ошо кешене аҫып ҡуйырға уйлап, былай тип әйтә: "Аҫып ҡуям да ошо менән тамам, ә хакимбыҙ мин ҡартты ғәфү итәр". Әммә был килеп сыҡмай. Ялған майор армияла хеҙмәт итә башлай, ә французҙар менән һуғыш ваҡытында генерал дәрәжәһенә тиклем күтәрелә һәм ҡайҙалыр губернатор вазифаһына тәғәйенләнә.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы бар).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Көнсығыш Померания һөжүм итеү операцияһында

1945 йылдың 10 февралендә 16-сы гв. атлы дивизияһына төньяҡ-көнсығыш йүнәлешендә, дошмандың ҡамауҙа ҡалған төркөмө Штаргард и Штеттинга сигенә алмаһын өсөн, Ростенберг, Гутсдорф, Гезен һәм Верделгә табан һөжүм итергә бойорола. 16-сы гв. атлы дивизияһы һулда 14-се гв. атлы дивизияһы, уңдан - 61-се армияның 9-сы уҡсы корпусы хәрәкәт итә (12 февралдән 7-се гв. атлы корпусы 61-се армияға оператив буйһондорола). Төньяҡтан Меркиш һәм Фридландҡа табан Поляк ғәскәренең 1-се армияһы һөжүм башлай.

Шул көндә 16-сы гв. атлы дивизияһына уға тиклем ремонтта булған 32-се танк полкы ҡайта. Танкистарға Гутсдорф тораҡ пунктын алыу бурысы ҡуйыла. Иң алда өлкән лейтенант И.И. Беляевтың танк ротаһы бара. Ул, ҡурҡыу белмәйенсә, Драге йылғаһын үҙенең танкыһында кисеп сыға, полктың уның артынан ҡуҙғалған барса экипаждары ла ҡаршы яр буйын биләй. 62-се гв. атлы полкы беренсе булып ошо йылғаны кисеп сыға, ә 148-се гв. артминполкы батареялары, Драге йылғаһын кисеп сығыу менән, дошман позицияларын көслө утҡа тота.

Эскадрондар атакаға ташлана, улар Гутсдорф һәм Гутедорфермюле тораҡ пункттарын ала. Был алышта немецтарҙың 2 миномет батареяһы, 12 пулеметы, 6 танкҡа ҡаршы пушкаһы юҡ ителә. Беҙҙең танкистар айырыуса ҡыйыу алыша. Взвод командиры, лейтенант В. В. Тарабаев, мәргәндәрсә атып, дошмандың 3 танкҡа ҡаршы ата торған пушкаһын емертә һәм Гутсдорфҡа бәреп инә. Танк роталары командирҙары И.И. Беляев, П.И. Криковлюк, взвод командирҙары, лейтенант В. Салыпанский һәм кесе лейтенант К. К. Захаровтар тәүәккәл эш итә, уларҙың танкистары, немец позицияларын утҡа тотоп, тапап-иҙеп үтә. Был офицерҙар Ҡыҙыл Байраҡ орденына лайыҡ була.

Дошман командованиеһы, Гутсдорфты кире алырға ниәт ҡороп, танкылар менән контратакаға ташлана. Беҙҙең командирҙар ошо ауылға илткән шоссе юлындағы күперҙе шартлатырға ҡарар итә. Быны башҡарыу бик хәүефле була: күпер асыҡ урында була, уның тирә-яғын немецтар төрлө яҡтан утҡа тота ала. Сапер взводы гвардиясыһы Назаров, һис бер ҡурҡыуһыҙ, күпер эргәһенә шыуышып барып етә һәм уны шартлата. Немецтарға танкылар менән һөжүм итеү юлы ябыла. Әммә дошман, ҡамауҙа ҡалған төркөмдән Штеттин ҡалаһы менән бәйләнеш тоторлоҡ берҙән-бер юлын өҙҙөрмәҫкә теләп, бер нисә тапҡыр контратака яһай. Беҙҙең яугирҙар уларҙы кире ҡаға.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

*✓ Улдарыбыҙҙы ир-егет итеп тәрбиәләп үҫтереү фарыҙ. Ауылда үҫкән малайҙар ир-егеттәргә генә хас булған һөнәрҙәрҙе үҙләштерә алһын өсөн дә ир-аттың даими өйрәтеүе кәрәк.*

# АУЫЛДАРҘЫ, ТЫУҒАН ТӨЙӘКТЕ

## ир-егеттәр ҙә

**Уҡыусыларыбыҙға Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты, Башҡортостан Республикаһының "Ир-егеттәр ҡоро" төбәк йәмәғәт ойошмаһы рәйесе Зариф Закир улы БАЙҒУСҠАРОВ менән уҙғарған әңгәмәбеҙҙе тәҡдим итәбеҙ.**

**Хөрмәтле Зариф Закир улы! Һеҙ етәкләгән "Ир-егеттәр ҡоро" йәмәғәт ойошмаһы нисек барлыҡҡа килде?**

- Быға тиклем республикабыҙҙа ир-егеттәргә генә хас проблемалар менән шөғөлләнгән, уларҙы йәмәғәт эштәренә йәлеп иткән, берләштерә алған айырым ойошма булманы. Шул уҡ ваҡытта ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ үҙ мәсьәләләрен хәл итеү маҡсатында байтаҡ йылдар инде үҙҙәренең айырым йәмәғәт ойошмаларын булдырғайны, мәҫәлән, Башҡортостан Республикаһының Ҡатын-ҡыҙҙар советы, Башҡортостан Республикаһының "Ағинәй" төбәк йәмәғәт ойошмаһы бик уңышлы эшләп килә. Шуға күрә ир-егеттәрҙең дә ошондай йәмәғәт ойошмаһын булдырыу өлгөрөп еткән мәсьәлә ине. Мин тәүҙә Рәсәй субъекттарында айырым ирҙәр ойошмаһы бармы-юҡмы икәнен белештем. Ҡыҙғаныҫҡа күрә, Рәсәйҙә ирҙәрҙең ошондай хәрәкәте ойошторолмаған булып сыҡты.

Әлбиттә, Рәсәйҙең ҡайһы бер төбәктәрендә "Атайҙар союзы" тигән ойошмалар бар. Әммә беҙ ойошторасаҡ ир-егеттәр ойошмаһына атайҙарҙы ғына түгел, ә барса йәштәрҙәге ир-атты - олоһон да, кесеһен дә йәлеп итеү маҡсатҡа ярашлы буласаҡ, тип уйланыҡ. Берҙән, йәш үҫмер малайҙарҙы, йәш егеттәрҙе ошондай ойошма аша йәмғиәткә файҙалы эштәр менән ҡыҙыҡһындырып, билдәле бер йүнәлештә тәрбиәләп була. Икенсенән, тормош тәжрибәһе туплаған аҡһаҡалдар ойошманың әхлаҡи, рухи нигеҙен тәшкил итә. Шулай уйланыҡ та, шулай хәл иттек.

Бына ойошмабыҙ дүрт йыл эшләп килә, ошо арала күҙгә күренерлек башланғыстарыбыҙ булды, байтаҡ файҙалы ғәмәли эштәр башҡара алдыҡ.

**Баштан уҡ асыҡлап китәйек әле, ни өсөн тап ошондай ойошма кәрәк булды, райондарҙа, ҡалаларҙа башҡа ойошмалар ҙа бар бит: ветерандар, йәштәр, балалар, яҡташтар ойошмалары һ.б.?**

- Башҡортостанда халҡыбыҙҙың байтаҡ өлөшө район үҙәктәрендә, бәләкәй ҡалаларҙа һәм ауылдарҙа көн итә. Ә уларҙа тиҙ арала хәл итергә кәрәк булған проблемалар етерлек. Аҙ бюджетлы төбәктәр булған аҡсаны мөһимерәк, ҙурыраҡ мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн ҡулланырға тырыша, башҡаса мөмкинлек юҡ. Тик шуныһы, ауыл советтары, район хакимиәттәре һәр бер ауылдың вағыраҡ проблемаларына ҡасан тотонор, тип көтөп ятһаҡ, бер нәмә лә үҙгәрмәйәсәк. Мәҫәлән, һәр ауылдың зыяраты бар. Күп кенә ауылдарыбыҙҙа улар ҡарауһыҙ булды, емерелеп ятты. Ә типһә тимер өҙөрҙәй егеттәребеҙ, башҡа бер эше булмаһа, көндәр, аҙналар буйына бер файҙалы эш башҡармай, йыйылышып, эске ойоштороп йөрөнө.

Бер заман законһыҙ рәүештә алкоголле эсемлектәрҙе өйҙәренән һатып ятыусылар күбәйеп китте. Быға бер ауыл советы, йә иһә участка полицейскийы ғына ҡаршы сығып, әллә ни ҡыра алмай. Быны бер ҙур ғына башҡорт ауылында араҡы һатыу менән бәйле хәлде миҫалға килтерәм. Унда дүрт урында законһыҙ һатыу итеүселәрҙе барыһы ла белә. Ошо ауылдың ир-егеттәре менән осрашҡанда һорайым: "Ни эшләп шул кешеләргә сара күрмәйһегеҙ?" Улар ауыл советына, участковыйға һылтана. Шунан быларға әйтәм: "Ауылығыҙҙы яратаһығыҙмы? Уның киләсәген ҡайғыртаһығыҙмы?" Ыңғай яуап бирәләр.

Тимәк, ауыл йәштәренең эскелеккә бирелеп китмәүе өсөн дә көрәшергә кәрәк, тим.

Мин ошо тәртипле, эшсән егеттәргә ошондай кәңәш бирҙем: "Бер көндә бергәләп йыйылышһағыҙ, участковыйҙы, ауыл хакимиәте башлығын, мулланы саҡырып һөйләшеп, теге араҡы һатыусыларҙы ҡәтғи киҫәтәһегеҙ: әгәр ҙә ошо законһыҙ эштәрегеҙҙе туҡтатмаһағыҙ, халыҡты ағыулауҙы дауам итһәгеҙ, һеҙгә ҡарата закон талап иткән барса саралар ҡулланыласаҡ. Туҡтай алмайһығыҙ икән, был ауылда йәшәргә тейеш түгелһегеҙ!" Һеҙгә кәңәшемде үтәргә бер ай ваҡыт, мин янынан килеп,был эштең нисек тамамланғаны тураһында белешермен, тимен.

Бер айҙан ана шул Урал аръяғы тип йөрөтөлгән, йәғни республикабыҙҙың көньяҡ-көнсығыш зонаһында урынлашҡан ауылға янынан килдем. Егеттәрҙе йыйып алып, ниндәйерәк һөҙөмтәләр булғаны хаҡында һораштым. Дүрт араҡы һатыусы менән дә әңгәмә уҙғарылған, уларҙы ҡаты киҫәткәндәр, өсәүһе алама кәсептәрен ташлаған, береһе дауам итә икән. Ауылға полиция начальнигын саҡырттыҡ, әлеге кешенең өйөнә барып, акт төҙөнөк, уға ярайһы уҡ ҙур ғына штраф һалынды. Әйтергә кәрәк, элек ошондай административ хоҡуҡ боҙған өсөн 2 мең һум ғына штраф һалына ине, ә бит бындай бәләкәй штрафты араҡы һатыусы бар тип тә белмәй.

Халыҡ һорауы буйынса мин тейешле законға үҙгәрештәр индереү инициативаһы менән сыҡтым, Дәүләт Думаһында закон ҡабул ителде, штраф кимәлен 30 мең һум иттек. Әгәр ошонан һуң да законһыҙ ғәмәлдәрен дауам итә икән, был кешегә енәйәт эше ҡуҙғатыласаҡ, һәм ул кешенең суд ҡарары менән иркенән мәхрүм ителеүе лә мөмкин. Ҡабатлап әйтәм: элек-электән хәмер эсеү генә түгел, араҡы һатыу халҡыбыҙға хас ғәмәл булмаған. Халҡыбыҙҙы хәмерҙән ҡотҡарыу юлдарын табырға һәм ҡулланырға кәрәк, был беҙҙең киләсәгебеҙ өсөн үтә мөһим. Шуға күрә "Ир-егеттәр ҡоро" был маҡсатты ирҙәрсә хәл итә алырға бурыслы. Әйтергә кәрәк, һәр бер ауылда әүҙем ир-егеттәр бар, тап улар "Ир-егеттәр ҡоро" ойошмаһының ғәмәли эштәрен бойомға ашыра ала.

Ойошмабыҙҙың тағы ла бер эш йүнәлеше - балаларыбыҙға тейешле тәрбиә биреүҙә ҡатнашыу. Улдарыбыҙҙы ир-егет итеп тәрбиәләп үҫтереү фарыҙ. Ә быны тап ирҙәр ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда яҡшыраҡ булдыра. Мәҫәлән, ауылда үҫкән малайҙар ир-егеттәргә генә хас булған һөнәрҙәрҙе үҙләштерә алһын өсөн дә ир-аттың даими өйрәтеүе кәрәк. Ә йыш ҡына атайҙар улдарын тәрбиәләүҙән ситтә ҡала бирә. Халҡыбыҙ әйткән бит, атанан күргән - уҡ юнған, тип. Шуға күрә мин малайҙарҙы аталары менән бер команда рәүешендә күҙ алдына килтерәм, шул уҡ уйындарға, спорт ярыштарына атайҙарҙы мотлаҡ йәлеп итеүҙе хуплайым. Атайҙар үҙҙәре лә ошондай сараларҙа ҡатнашыуҙан ҡәнәғәт ҡала, улдарының дөйөм эштә ҡатнашып йөрөгәндәрендә яңы сифаттарын аса.

Ике аҙна элек Белорет районында бер сара уҙғарҙыҡ: улдары аталары менән солоҡ яһарға өйрәнделәр. Был бик борондан башҡорт кәсебе, уны тергеҙеүҙә һәм үҫтереүҙә беҙҙең ойошмабыҙ ҙур роль уйнай ала. Әлбиттә, атайҙары менән бергә эшләгәс, балалар бик тырыша инде. Көн буйына аралашыу бара, һәр кем кәңәш-төңәш ҡора, башҡаларҙың эшен күҙәтә. Арып киткәс, күмәкләп мәжлес ҡорҙоҡ, һарыҡ һуйғайныҡ, тәшкә аш бик күңелле уҙҙы. Быны тағы ла бер мөһим нәмә: һәр эштең башланғысы була, бында шәхси өлгө бик мөһим. Тыуған ауылымда өй һалғас, мин үҙем дә ихатала солоҡтар ҡуйҙым, урманда ҡарағай олонон соҡоп та солоҡтар яһаныҡ. Кемдер берәй яҡшы нәмә эшләһә, уға башҡалар ҙа ҡушылып китә икәнен үҙ тәжрибәмдә тағы бер тапҡыр раҫланым..

**Ауылдарҙа эш юҡ, мал тотоп ҡына йәшәп булмай, тип**





***✓ Республикабыҙҙа Талҡаҫ күлен белмәгән кеше һирәктер. Быйыл яҙ күлдең был яҡ яр буйын таҙартып, 200 ҡарағай ултырттыҡ. 10 августа уҙғарыласаҡ өмәлә 300-ләп кеше ҡатнашыр тип өмөт итәбеҙ.***

# ҺАҠЛАРҒА...

## ихлас ҡушылды

**зарланыусылар бар. Һөҙөмтәлә бик күп ир-ат вахтаға йөрөй башланы. "Ир-егеттәр ҡоро" ошо проблема менән шөғөлләнәме?**

- Әлбиттә. Тырышҡан, үҙ йүнен үҙе күрергә теләгән кеше ауылда ла бик һәйбәт йәшәй ала. Бына Сибайҙа 5 мартта ир-егеттәр менән уҙғарылған бер сарала 300-ләп кеше ҡатнашты. Ауылдарҙа йәшәгән эшҡыуарҙар, фермерҙар, элегерәк вахтала эшләп, ауылына ҡайтып, үҙ кәсептәрен асҡан ир-егеттәр ҙә килгәйне был сараға. Шунда бер ауыл эшҡыуары бик фәһемле итеп сығыш яһаны. "Вахтала эшләгәндә айҙар буйына балаларым менән аралаша алмау үҙәкте өҙә ине. Уйланым да, үҙ эшемдә башларға булдым. Халыҡтан ит һатып алып, билмән эшләү цехын асып ебәрҙем. Башланғысым уң булды: хәҙер ошо кәсептән алған килемем вахталағынан бер нисә тапҡырға күберәк. Иң мөһиме - ғаиләм менән бергәмен, - тип шатлығы менән уртаҡлашты. - Баштан уҡ шулай эшләргә кәрәк булған, күпме ғүмерем сит-ят ерҙәрҙә уҙҙы", - тине ул. Башҡаларға уның хатаһын ҡабатламаҫҡа, үҙ өлгәһендә эш асырға саҡырҙы. Был сарала урындарҙағы хакимиәт, министрлыҡ вәкилдәре лә ҡатнашты, үҙ эштәрен асҡан кешеләрҙең хөкүмәттән ниндәй ярҙам алыу мөмкинлектәре булыуы хаҡында халыҡҡа тейешле мәғлүмәт бирелде. Ошондай осрашыуҙарҙы ойоштороуҙы һораған йәштәр бар, август аҙағындамы, сентябрҙәме, тағы ла шундай уҡ сара уҙғарырбыҙ, тим. Райондарҙа ойошмабыҙҙың филиалдары бар, әүҙем егеттәребеҙ менән бергәләп эшләйбеҙ.

**Күнелде ҡырған бер күренеш бар: байтаҡ ҡына ауылдарыбыҙҙа әлегә тиклем ташландыҡ өйҙәр күп, улар ауылдың йәмен ебәреп, ҡотон алып ултыра. Ошо проблеманы нисек хәл итеп була?**

- Бының менән дә шөғөлләнәбеҙ, бынан дүрт йыл элек ошо проблема буйынса махсус инструкция төҙөлдө. Бер осраҡта ташландыҡ өйҙөң ситтә йәшәгән хужаһы бар, икенсеһендә - был мөлкәт бер кемгә лә теркәлмәгән. Ауыл хакимиәте суд аша ошо ташландыҡ йортто үҙ мөлкәте иҫәбенә күсертә ала. Шулай иткәндә, ошо өйҙә законлы рәүештә ҡутарып алырға була. Ә ташландыҡ өйҙөң хужаһы бар икән, егеттәргә уның менән һәйбәтләп һөйләшергә ҡушабыҙ, улар хужанан ярым емерек йортон йә ипкә килтереүҙе, йә иһә ҡутарып алыуҙы талап итергә хоҡуҡлы. Әлбиттә, был эшкә иң элек ауыл хакимиәтен дә йәлеп итеү фарыҙ. Әгәр хужаһы емерек өйөнән баш тартһа, уның ризалығы менән ул өйҙө ҡутарып алырға була.

Тыуған ауылым Ҡалмаҡта бер емерек өй ултыра ине. Бәктиһәң, бик күп йылдар элек унда ҡартатайымдың атаһы ла йәшәгән булған икән. Ошо йорттоң хәҙерге хужаһын таптым, һөйләштем. Ул өйҙө һатып алып, егеттәр менән ҡутарып, ауылдаштарға утынға бирҙем. Ә ошо урында яңы өй һалып ҡуйҙым. Хәҙер ул урамды йәмләп тора. Ауылыбыҙ бик бәләкәй, ситтә йәшәгәндәр ҙә байтаҡ. Вафат булған ата-әсәләренең өйҙәре буш тора, йәмһеҙләнә, емерелә. Шуларҙың телефондарын алып, һөйләштем. Ата-әсәләренең егәрле булыуы, үҙ көстәре менән йорт-ҡура ҡороуы хаҡында иҫтәренә төшөрҙөм. Үҙҙәре тәпәй баҫҡан урындың ошондай ҡыҙғаныс хәлдә ҡалыуын әйтеп, оялта ла алдым, буғай. Тыңланылар, тыуған йорттарын ипкә килтерҙеләр.

Шулай, ауылға ҡайтҡанымда бер иҫке йорттоң ҡоймаһын һүткән егеттәргә тап булдым. "Ни эшләп ҡойманы алаһығыҙ?" - тимен. Улар әйтә: "Һеҙ үҙегеҙ ҡуштығыҙ бит, яңы ҡойма ҡуябыҙ", - тиҙәр. Иплэп һөйләшһәң, халыҡ ыңғай яҡҡа боролорға ғына тора. Һәр бер ауылда алдынғы ҡарашлы кешеләр бар, улар ошондай төҙөкләндереү эштәрен башлап ебәрә ала. Аллаһҡа шөкөр, күп кенә райондарыбыҙҙа ир-ат араһынан сыҡҡан лидерҙар, ирекмәндәр башҡаларҙы ойоштора, файҙалы эштәргә йәлеп итә башланы. Һуңғы ваҡытта "Ир-егеттәр ҡоро"ноң төбәк ойошмалары булмаған көнбайыш райондарҙан да ошондай эшкә ҡушылырға теләүселәр йыш ҡына мөрәжәғәт итә беҙгә. Беҙҙең ойошмабыҙ республика етәкселеге менән берлектә 2021 йылдың апрель айында Башҡортостан ир-егеттәренең I форумын уҙғарғайны. Был йыйында республикабыҙҙа ир-егеттәр хәрәкәтенең эшен әүҙемләштереү, уны бөтөн республика буйынса йәйелдереү хаҡында фекер алышыу булды, яңы маҡсаттар ҡуйылды. Киләсәктә ошо хәрәкәтте мөмкин булғанса киңәйтеү, "Ир-егеттәр ҡоро"ноң эшмәкәрлеген киң матбуғат сараларында яҡтыртыу бурыстары тора.



***Иплэп һөйләшһәң, халыҡ ыңғай яҡҡа боролорға ғына тора. Һәр бер ауылда алдынғы ҡарашлы кешеләр бар, улар ошондай төҙөкләндереү эштәрен башлап ебәрә ала. Аллаһҡа шөкөр, күп кенә райондарыбыҙҙа ир-ат араһынан сыҡҡан лидерҙар, ирекмәндәр башҡаларҙы ойоштора, файҙалы эштәргә йәлеп итә башланы. Һуңғы ваҡытта "Ир-егеттәр ҡоро"ноң төбәк ойошмалары булмаған көнбайыш райондарҙан да ошондай эшкә ҡушылырға теләүселәр йыш ҡына мөрәжәғәт итә беҙгә.***

**"Ир-егеттәр ҡоро"ноң тағы ла ниндәйерәк яңы эш йүнәлештәрен күҙаллайһығыҙ?**

- Мин шәхсән һыбай йөрөргә яратам. Ишембай районында 50 атай һәм уларҙың улдары ҡатнашлығында аттарҙа һыбайлы походҡа сығып, ике көн йөрөп ҡайттыҡ. Барыһы ла бик көнәғәт булды. Берҙән, тыуған ягыбыҙҙың тәбиғәтенә һоҡланып туймаңыҡ, аралаштыҡ, балалар менән уйындар ойошторҙоҡ, бергәләшеп ашарға бешерҙек, кисен усаҡ янында ҡурай моңдарын тыңлап, боронғо башҡорт йырҙарын бергәләп йырлап, күңел асып ултырҙыҡ. Бына шул рәүешле үҫеп килгән быуындарҙа ысын ватансылыҡ тойғоһон тәрбиәләп була. Шундай аралашыу барышында тыуған еребеҙ, тәбиғәтебеҙ, уның байлыҡтары, халҡыбыҙ тарихы, туған телебеҙ хаҡындағы хәҡиҡәтте балалар яҡшыраҡ төшөнә. Әле бына ни турала уйлап торам: Ирәндек тауы битенән боронғо Ҡәнифә юлы уҙа, ул Хәйбулла далаларына барып сыға. Бына шул юлды тикшереп, маршрутын билдәләр, квадрациклдарҙа йә иһә һыбай туристик поход ойошторорға була бит! Өр-яңы, бик фәһемле туристик объект булыр ине был, әгәр ғәмәлгә ашырып булһа.

**Боронғолар ҡотҡа ышанған. Кешенең генә түгел, йәшәгән өйҙөң дә, тотош ауылдың да ҡото була. Ҡото китҡән ауылдарға яңынан ҡот ҡайтарыуҙы бик сауаплы эш итеп ҡарарға кәрәктер.**

- Дөрөҫ, ҡалаларҙа йәшәгән ауылдаштарға ошондай эштәргә ҡушылыу фарыҙ, бит уларҙың ата-әсәләренән тороп ҡалған йорттарҙы яңыртып, матурлап була, теләк кенә кәрәк. Егеттәребеҙ тыуған йорт нигеҙен онотмаһындар, ташламаһындар ине, шул осраҡта ысынлап та ауылдарыбыҙға ҡот керәсәк. Бына ауылыбыҙҙан йыраҡ түгел "Иҫке йорт" тип аталған урын бар. Унда элек ауыл булған, XVIII быуатта яндырылған. Шунда бер шишмә бар ине, урыны һаҙлыҡҡа әйләнеп бөткән. Шуны ипкә килтерергә булдыҡ. Мәләүездән төҙөлөш материалдары килтерҙек, шишмә урынын ҡаҙып таҙарттыҡ, бетон ҡулсалар һалдыҡ, шишмә өҫтөнә беседка эшләнек, кәртәләп тә ҡуйҙыҡ, ҡырсын таш килтереп, юл һалдыҡ. Шундай матур шишмәгә әүерелде ул, туй-фәлән булһа, йәштәр ошонда килеп, фотоға төшә хәҙер.

**Минең дә тыуған ауылымда шишмәләр байтаҡ, әүҙем ир-егеттәребеҙ һеҙҙәге һымаҡ уларҙы төҙөкләндереп ҡуйҙы. Әүәл 112-се Башҡорт дивизияһында һуғышта ҡатнашып, иҫән-һау йөрөп ҡайтҡан Таһир Хужин бабайыбыҙ ҡыуаҡ араһынан ағып сыҡҡан бер шишмәне ҡаҙып, торба һалып ҡуйғайны, ул әлегә тиклем сылтырап ағып тора. Ошо шишмәне "Таһир шишмәһе", тип атаны халыҡ. Һеҙҙең башланғыс менән ҡоролған шишмәне мин "Зариф шишмәһе" тип атар инем...**

- Эш исемдә түгел. Һәр беребеҙ тыуып үҫкән еренә ниндәй ҙә булһа файҙа килтерә, матурлай ала. Беҙҙең ойошмабыҙ тыуған еребеҙҙең экологияһы хаҡында ла ҡайғырта, райондарҙа, ауылдарҙа сүпләнгән, ҡый-һай баҫҡан урындар күп әлегә. Шуға күрә егеттәребеҙ менән йыш ҡына экологик өмәләр ойошторабыҙ. Был "Ирҙәр ҡоро" ойошмаһының бик мөһим эш йүнәлештәренең береһе.

Республикабыҙҙа Талҡаҫ күлен белмәгән кеше һирәктер. Бик матур күл ул, уның һыуы ла шифалы. Әммә уның ярҙары ҡыйланған, сүп-сар күп. Беҙ йыл һайын Талҡаҫ күлендә экологик өмәләр уҙғарабыҙ. Быйыл ошондай өмә 10 августа дүртенсе тапҡыр уҙғарыласаҡ. 2021 йылда беренсе өмәлә 35 кеше ҡатнашһа, 2022 йылда - 60, 2023 йылда 150-гә яҡын кеше үҙ ирке менән ошо сауаплы сарала ҡатнашты. Быйыл яҙ, 22 апрелдә, күлдең был яҡ яр буйын таҙартып, 200 ҡарағай ултырттыҡ. 10 августа уҙғарыласаҡ өмәлә 300-ләп кеше ҡатнашыр тип өмөт итәбеҙ. Былтыр яр буйын таҙартып, 150 тоҡ ҡый сығарҙыҡ. Ҡыҙғаныс, күлгә килеп ял итеүселәрҙә тәбиғәткә мәҙәниәтле ҡараш тәрбиәләнмәгән, улар яр буйын нык сүпләй. Балыҡсыларҙы ла маҡтап булмай, яр буйындағы һыуҙа нимә генә юҡ! Шуға водолаздар саҡырабыҙ, улар ҙа экологик өмәлә ҡатнашып, күл төбөнә ташланған нәмәләрҙе ярға сығара. Ошо мәсьәлә буйынса Бөрйән, Баймаҡ, Әбйәлил, Хәйбулла, Йылайыр райондарының, Сибай ҡалаһының урындарҙағы "Ир-егеттәр ҡоро" төбәк ойошмаларының етәкселәре менән кәңәшмә уҙғарҙыҡ. Ошондай өмәләрҙе республика кимәленә сығарырға ниәт итәбеҙ хәҙер.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Зариф Закир улы менән бик ентекле һәм үтә ҡыҙыҡлы әңгәмә ҡорҙоҡ. Бер әңгәмә барышында телгә алынған барса проблемаларҙы, уларҙы хәл итеү юлдарын тулыһынса сағылдырып булмай. Әммә шуға иманыбыҙ камил, Башҡортостандың "Ир-егеттәр ҡоро" ойошмаһы матур саралар уҙғара, киләсәккә матур пландар ҡороп, изге ниәттәр менән йәшәй. Уңыштар теләйек аҫыл ир-егеттәребеҙгә. Редакциябыҙ исеменән ир-аттарҙы ошо хәрәкәткә ҡушылырға саҡырабыҙ, ә 10 августа иң әүҙем ирекмәндәрҙе Талҡаҫ күле буйында уҙғарыласаҡ экологик өмәгә саҡырабыҙ.**

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

✔ ***Көн яҙлыҡтырмай оҙайлы һорау алыуҙар, мәғәнәһеҙ ҡапаҡлауҙар, аямай типкеләүҙәр башланды. Фауарис үҙе менән ни өсөн шулай ҡыланғандарын аңлап та етмәй ине, әммә тегеләрҙең күрһәткән ҡағыҙына ҡултамғаһын ҡуйманы.***

***Иҙрис НОҒМАНОВ***

# ҺАҒЫНДЫМ, АЛБАҪТЫМ!

***(Булған хәл)***



–Төш етә бит, балам, тормайныңмы?..

Ҡайҙандыр ер аҫтынан ишетелгәндәй тоноҡ тауыш, шомло һиллекте боҙоп, иҫһеҙ ятҡан Фауаристы һиҫкәндерҙе лә асылына ҡайтарғандай булды. Әсәһе өндәшә түгелме? Эйе уның танһыҡлап кителгән йомшаҡ, ойотҡос тауышы. Ҡасандан ишетелгәне юҡ... Кинәт йөрәкһегән егет ҡуҙғалмаҡсы итте, әммә бөтә тәнен һөйәктәренә тиклем өтөп алған ҡот осҡос ауыртыуҙан ҡабат ҡараңғылыҡҡа сумды..

- Эй-й, ошо малайҙың! Ҡайһы еренә шул ҡәҙәре йоҡламаҡ кәрәк, ә? - Әсәйенең инде әргә тартым шелтәле тауышы тағы ишетелде. - Атаң, ана, яңғыҙы китте. Еңел эшме бесән сабыуы...

Фауарис ыңғырашып ҡуя. Әй, әҙләкһеҙ мәшәҡәттәрҙән баҫылып йонсоған бахыр атайы әҙ генә көтөп торһа ни була инде... Уны шул тиклем йәлләй бит ул. Хәленән килһә, түргә генә ултыртып ҡуйыр ине лә. Ошоға ҡәҙәр атайының, тырнаҡ менән ҡағылыу түгел, бер ауыр һүҙ әйткәне юҡ улына ҡарата. Ә әсәйе үпкәләгән була, тәрбиәләмәйең, эшкә өйрәтмәйең, ти, бер йоҡо моҡсайы булып ҡына үҫә инде. Тәьсирләрәк булһын өсөн танауын һөртөп, мыршылдап та ала. Ышаныслы итеп.

- Һин, улым, әсәйең ҡушҡанды тыңлап ҡына йөрө. - Атайҙың бар шелтәһе ошо була...

- Бик барыр инем, әсәй, ни эшләптер тора алмайым да ҡуямсы. Аяҡ-ҡулым ойоп тора, бәйле кеүек.

- Таң атҡансы ҡыҙ... ҡайҙалыр, кемдер артынан сапҡаһың...

Фауарис тағы ярым-ярты иҫенә килә, шешмәкләнгән ҡабаҡтарын күтәрә. Улары ла ауырайып киткән һымаҡ, көслөк менән асыла. Барлы-юҡлы ғына ғәйрәтен ала. Ниндәй көнгә ҡалды бит, ә, кисә генә тибеп тимер өҙөрлөк ир-егет, күҙен асырлыҡ та хәле юҡ.

...Баш осонда зәңгәр упҡын. Шул упҡынды инләп кәпәс ҙурлыҡ ҡына бер-ике аҡ болот йөҙә. Кәйелеп-кәйелеп ниндәйҙер ҡоштар уйнай. Уларға һуғыш юҡ, уларға рәхәт, уларҙың бер ере лә һыҙламай...

Сеү! Ҡайҙан килә йән өшөткос геүләү? Күк күкрәүенә тартым гөрөлдәү тәүҙә ишетелер-ишетелмәҫ кенә башлана ла көсәйә, ҡеүәтләнә бара һәм нимәлер әсе итеп һыҙғыра башлай. Ахырҙа, емергес көс, ер һелкетеп, үкерергә, дөбөр-шатыр килеп ажғырырға тотона. Сафтан-саф зәңгәрлекте һөрөм баҫа, тынды ҡурып барған ҡайнар ҡояш аҫтында тонсоҡторғос саң-туҙан күтәрелә. Салҡан ятҡан Фауаристың битенә ваҡ таш, балсыҡ киҫәктәре яуа, күҙҙәренә тупраҡ тула. Ә уның шул күҙҙәрҙе ҡапларлыҡ та әмәле юҡ. "Ҡыл ҡыбырлатырлыҡ хәл ҡалманы", - ти торғаны атайы, бына ҡалайыраҡ була икән ул. Фауарис сәскәрөп ебәрә, йүткерергә итә, әммә күкрәгенә менәрләгән энә ҡаҙалыуҙан хәрәкәтһеҙ ҡала. Ул тағы һушһыҙ. Әсәй тауышы тағы ризаһыҙлыҡ белдерә:

- Әрме барам, әрме китәм тигән булаң, йоҡоһона баш була алмаған һалдат унда нимәгә? Һине кем алһын әрмегә? Үҙ башына бер хәсрәт итеп?

"Бер хәсрәт итеп..." Ошо һүҙҙәр Фауаристың иң яратмағаны. Уның бит бер кемгә лә баш хәсрәте булғыһы килмәй. Әсәйе лә инде...

Хәйер, әлеге һүҙҙәрҙе, гәзиттә, әсәй кеше иң һуңғы дәлил итеп ҡуллана. Башҡаларының бер ниндәй тәьсире ҡалмағанда ғына. Әлбиттә, яман уйҙан сығып түгел. Бөтә әсәйҙәр кеүек, ул да үҙ балаһына тик яҡшылыҡ ҡына теләй, сос, егәрле кеше булыуына өмөт бағлай. Ниндәй генә әсә башҡаса уйлаһын да, башҡаса эшләһен инде. Ҡәҙерле кешеһенең ошолай әйтеүе була, таңға ғына ятып, илерек ише йоҡоһона баш була алмай аҙапланған Фауарис йылдам һикереп тора һала. Шул ҡәҙәре намыҫына тейә әлеге һүҙҙәр...

* * *

"Әрме? Әрме, тинеме әсәйе?" Фауарис, инде нисәнсе тапҡыр, күҙҙәрен тағы асты. Асты ла ғәжәп булмаған тынлыҡҡа ҡолаҡ һалып ята бирҙе. Шылт иткән дә тауыш юҡ. Ул ҡайҙа? Бәй, яртылаш күмелгән килеш ниндәйҙер тупраҡ өйөмө аҫтында аунап ята бит. Ә атайы менән әсәйе? Тауыштарына ҡарағанда, әле генә ошондалар һымаҡ ине.

Ҡолаҡҡа ятышлыҙ ят телмәр ишетелде. Һоро кейемдәге кешеләр уны уратып алдылар ҙа усал ҡарап тора башланылар.

- Штейт ауф! - Автоматын арҡыры тотҡан береһе аяғына килтереп типте. Ҡанға батып ятҡан Фауарис, ныҡ ауыртынһа ла, ҡыбырламаны. Ҡыбырларлыҡ көсө ҡалмағайны. Әллә эске аңы менән ҡотолоу юлы тик ошо хәрәкәтһеҙ ятыуҙа ғына икәнен аңланымы?

- Капут! - Икенсеһе рыя ғына ҡул һелтәне.

Үлем көсәп артабан киттеләр. Бер аҙҙан уларҙың аҡырышҡандары, һаһылдашып көлөшкәне, атыш тауыштары ишетелде. Илбаҫарҙар ирәйеп байрам итә.

"Ниместәр!" Ҡайҙа һәм ни сәбәптән аунап ятҡаны Фауаристың шунда ғына аңына барып етте. Әле генә бит уның күҙенә әжәл ҡарап торҙо. Туп-тура итеп. Нисек һиҙмәне дошман һалдаты уның тере икәнен? Кем, ниндәй көс фашисты атып ебәреүҙән тыйҙы? Атай-әсәй фатихаһымы, түш кеҫәһендә ятҡан доғалы бетеүме? Уны, ахыры, барыбер әҙәм булмай, барыбер үҙе дөмөгә тип уйланылар. Ҡаты яралыларҙы атып йөрөгән яһилдар шул рәүешле Фауарисҡа бер патрон йәлләнеме? Ниндәй һаҡсылдар, ә! Бөтмөр ҡәбәхәттәр!

Фауаристың янында әсәйе лә, атайы ла, башҡа кеше лә юҡ. Ҡаршыһында һуғыш ҡына. Үлем сәскән, ҡайғы-хәсрәт сәскән ҡәһәрле һуғыш! Ә бая ишетелгән танһыҡ тауыштар - һаташыу ғына булған. Бары шул ғына!

1941 йылдың бар мәғәнәлә лә ҡайнар июнь аҙаҡтары. Ил сиге һаҡсыһы булып хеҙмәт башлаған Фауарис шулай һуғыштың башында уҡ ҡаты йәрәхәтләнеп, ауыр хәлдә ҡалды. Әле ул ни тере, ни үле. Бая ниместәр ҙә ошоно күргәндер. Ул күңеленән инде барыһы менән дә бәхилләшеп бөттө. Хуш ерем, хуш илем, хушығыҙ атай-әсәй, ҡусты-һеңлеләрем! Бәхил булығыҙ, тыуған яҡтарым! Мин һеҙҙе башҡаса күрә алмамдыр. Онотмағыҙ мине, иҫкә алып, рухымды барлап тороғоҙ. Тик бына ҡайҙа ауғанымды, ҡайҙа ятҡанымды ғына белә алмаҫһығыҙ. Үкенес.

Сираттағы "терелеүендә" Фауаристы кемдер, ҡайҙалыр өҫтәрәй кеүек ине. Бик ауырлыҡ менән. Яралының һәленеп төшкән уҫлаптай кәүҙәһе алға шыумай, ҡарышып-ҡарыша.

- Тиҫкәре башҡорт! Албаҫты! Был тиклем дә ауыр булырһың икән! - Яҡында ғына санитарка ҡыҙҙың илаулағаны ишетелә. Ул, күрәһең, һуңғы көсөн һалып тырмаша. Әрләй, тиргәй башҡортто. Әйтерһең дә, башҡорт үҙ теләге менән ошо хәлгә төшөп ята. Ҡана һуң ошоноң ише яман тәҡдирҙәргә буйһонмай ғына йәшәп булғанда...

Бер аҙҙан теге тиргәү йәлләү-әүрәтеүгә күсә:

- Әйҙә, йәнем, әйҙә баһадирым-башҡортом, түҙ инде, Албаҫтым, хәҙер етәбеҙ, тағы аҙ ғына ҡалды... - Тауышы былай наҙлы ғына икән был санитарканың. Әсәйенеке кеүек. Әллә ысынлап та әсәйеме? - Һалдат тағы һаташа һымаҡ. - Юҡтыр ҙа, әсәйе өйҙә ҡалды. Ул бында ни эшләп йөрөргә тейеш. Шайтан ҡотҡоһона бирелеп Әжәл туй үткәргән яланда... Тик был русса һөйләшкән ҡыҙ "албаҫты" тигән башҡорт һүҙен ҡайҙан белә?

- Һин кем? - тип ыңғырашып һораны һалдат. - Һин башҡорт ҡыҙымы?

- Бына албаҫты, үлеп барғанда ла үҙенең башҡорттарын таптыра... - тип, көскә хәл алған ҡыҙ тағы алға ынтыла...

* * *

...Ун туғыҙы ла тулмаған йәш кешенең тәнендәге тәрән йәрәхәттәр ярайһы уҡ тиҙ уңалды. Ярай әле, эргәһендә генә ярылған туптың баҙлаған ярсыҡтары нисектер йән еренә ҡағылмаған, ғүмерен аяған. Өс ай самаһы хәрби-ялан госпиталендә дауаланғандан аҙаҡ сығыу көнө етте. Ошо арала яу ҡырынан алып сыҡҡан шәфҡәт туташы Полина менән дуҫлыҡ ептәрен шөйлә нығыттылар. Хәйер, дуҫлыҡ ҡынамы?.. Ташып барған хистәрҙе дуҫлыҡ тип кенә атап буламы икән? Полинаның теге саҡта, яралы Фауаристы яу яланынан һөйрәкләп алып сыҡҡанда, "Албаҫтым! Башҡортом!" тип һөйләнә-һөйләнә тиргәшеүе лә юҡтан булмаған: олатаһы башҡорт милләтенән булған уның. Бөйөк Ватан һуғышында осратҡан уның олатаһын өләсәһе. Аҙаҡ юлдары айырылған. Өләсәһе ауыр яраланып, оҙаҡ ҡына Мәскәү госпиталендә дауаланып ятҡан. Ҡыҙы, Полинаның әсәһе лә, шул госпиталдә тыуған. Һуғыштың ҡыҙыу мәлендә ҡыҙының атаһын юллап йөрөү форсаты ла булмағандыр инде, шул көйө аралар өҙөлгән рус ҡыҙы менән башҡорт һалдатының. Тик олатаһынан ана шул "Албаҫтым!" тип яратып әйтелгән һүҙен генә ғүмер буйы теленән төшөрмәгән өләсәһе...

...Штабта кәрәкле ҡағыҙҙарын тиҙ арала йүнләп бөткән бәхетле Фауарис ишек яғына йүнәлде.

- Туҡта, туҡта, рядовой, - ошо мәл көтөлмәгән хәл булды. Оло өҫтәл артындағы зәңгәр тирәсле фуражка кейгән өтәк капитан уны туҡтатты: - Кил әле бында, һалдат.

- Есть! - Күтәренке күңелле Фауарис тып итеп уның ҡаршыһына баҫты, - иптәш капитан, рядовой...

- Һине бит немец автоматчиктары уратып торғанын күргәндәр... - Тегеһе уны бүлдерә һалды. - Шаһиттар бар.

- Бәлки, күргәндәрҙер, мин иҫләмәйем. Һушһыҙ ятҡанмын.

- Шулай уҡ иҫләмәйһең? - Офицерҙың ауыҙы мыҫҡыллы салышайҙы. - Бөтөнләйме?

- Так точно!

- Ә хәҙер шуны әйт: башҡаларҙы эт урынына атып йөрөгән фашистар ниндәй мөғжизә менән һиңә теймәне?

- Бе... белмәйем, иптәш капитан... Аңламайым да, һеҙ нимәгә төрттөрәһегеҙ?..

- Араларында ҡоҙаң булмағандыр бит?

- Ниндәй ҡоҙа, ти! Улар фашист! Мин уларҙы күрә алмайым. Мин уларҙы...

- Һеҙҙекеләр барыһы ла шулай аҡлана.

- Һеҙҙекеләр? Ипт... кап...

Фауаристы, ҡулдарын ҡайырып, шунда уҡ комендатураға оҙаттылар. Унан айырым бүлек (особый отдел) тип аталған ҡот осҡос урынға бикләп ҡуйҙылар ҙа, унда ниҙер таптырып, ниҙер әйттерергә, ниндәйҙер ҡағыҙ остоғона ҡул ҡуйҙырырға теләп, хәтһеҙ туҡмағандан һуң иҫһеҙ көйө махсус зинданға ырғыттылар.

Көн яҙлыҡтырмай оҙайлы һорау алыуҙар, мәғәнәһеҙ ҡапаҡлауҙар, аямай типкеләүҙәр башланды. Фауарис үҙе менән ни өсөн шулай ҡыланғандарын аңлап та етмәй ине, әммә тегеләрҙең күрһәткән ҡағыҙына ҡултамғаһын ҡуйманы. Ул инде был урындан ҡотолоу ғына түгел, тере ҡалыуҙан да төңөлөп бөттө. Шундай көндәрҙең береһендә һорау алыу (язалау, тип уҡы) бүлмәһенә зәңгәр күҙле, һары сәсле, һомғол кәүҙәле йәш кенә ҡыҙ килеп инде. Бите-башына ҡан уҡмашҡан Фауаристы күреп, ул телһеҙ ҡалды. Шаҡ ҡатҡан һылыуҡай бер аҙ торғандан һуң ғына асылына килеп, усал һораны:

- Был егет ни сәбәптән бында? Ни өсөн туҡмайһығыҙ уны?

- Бәй, һеҙ таныштармы әллә? - Бер мөйөштә аҫтыртын йылмая биреп ултырған офицер телгә килде. - Бына көтмәгән инем.

- Мин уны ут эсенән алып сыҡтым, - булды яуап, - ул ҡаты яралы һәм һушһыҙ ине.

- Сержант Прохорова, һин уның немецтар менән һөйләшеп торғанын күргәнме?

- Ниндәй һөйләшеү? Ниндәй тороу? Әйтәм бит, ул үлем хәлендә ине. Ул... эх, һеҙ!

- Туҡта, сержант! - Капитан ҡыҙҙы тупаҫ рәүештә бүлдерҙе: - Әллә һатлыҡ йәнде яҡлашып маташаһың инде?

- Иптәш капитан, ул һатлыҡ түгел. Ул ауыр яралы, тупраҡҡа яртылаш күмелеп ята ине.

- Һәйбәт маскировка. Башы еткән.

- Ә яраланыу? Ул да маскировкамы? Ул үҙенә-үҙе туптан атҡанмы? Уның һау урыны ҡалмаған ине...

- Ә ни эшләп уны, нәҡ уны ғына, дошман һалдаттары расходҡа сығармай киткән? - Капитан тыныс ҡына тәмәкеһен борхотто, - бына эш нимәлә. Һин ҡыҫҡырыма әле бында.

- Уныһы миңә билдәһеҙ, - сая ҡыҙ ҡаушай төштө. - Бәлки, улар араһында ла кеше йәнлеләре барҙыр...

- Кеше йәнлеләре? Фашистарҙа?

Ошо мәл ишектә ыҫпай генерал күренде. Бүлмәләгеләр аяғүрә баҫты. Хәлһеҙ Фауаристан башҡаһы.

- Тә-әк, иптәш яугирҙар, - генералдың талапсан ҡарашы, сиратлап, барыһын да ҡапшап сыҡҡандан һуң өтөк офицерҙа туҡталды. - Бында нимә булып ята, капитан? Был яралы һалдат ни өсөн лазаретта түгел?

- Һатлыҡ йәндән һорау алабыҙ, иптәш ген...

- Ул һатлыҡ йән түгел! Мин уны үлемдән ҡотҡарҙым!

- Унда тағы кемдең тауышы сыға? - Генерал мөйөштә бөршәйеп торған ҡыҙға боролоп ҡараны. - Ә-ә, санитарка Полина. Сибәр балаҡай.

Сержант аяғүрә баҫып, генералға честь бирҙе. Йөҙө ҡарайған өтөк ҡойолоп төштө.

- Йә, яҡшылап аңлатығыҙ, ниндәй эш боҙған был рядовой? - Тынныслана төшкән генерал өҫтәл артына ултырҙы.

- Уны немец һалдаттары атмай китте, - иң әүәл капитан осоп сыҡты. - Тимәк, ул һатлыҡ йән...

- Түгел! Түгел! - Әсенгән Полина ҡысҡырып уҡ ебәрҙе. - Ул яралы ине! Ул үлем хәлендә ине! Мин уны үҙебеҙҙең алғы һыҙатҡа, окопҡарға тиклем һөйрәп килтерҙем.

- Капитан, ҡаршы яҡтың атып үлтермәй китеүе һатлыҡ йәнлеккә һылтау була аламы? Был дәлилдә ҡайҙан алдың? Ошо иҫбат ителмәгән ғәйепте сәбәп итеп, ниңә ҡыҙыларме-ецты шул ҡәҙәре ҡыйнарға? - Генерал һорау артынан һорау яуҙырҙы. - Уның шаһиты бар, ә һинеке ҡайҙа?

- Бы... бына уның яр... ярала-ныу тарихында яҙылған. Немецтар ҡарап торғандар ҙа...

- Ул тарихты һин уйлап сығарманыңмы ни?

- Барыһын да түгел...

- Ҡыҫҡаһы, мин хәрби тикшереү эше үткәрергә бойорам. - Генерал тубығына һуғып алды. - Үтә етди һәм энтекле итеп. Сөнки хәлдең былдайы беренсе тапҡыр түгел.

Күп тә үтмәҫтән, күҙ-башы ҡарайып бөткән "тырыш" капитан хәрби трибунал алдына баҫты. Күренеп тора, үҙе кеүек унан да "дөрөҫлөктө" йоҙроҡ ярҙамында һығып сығарғандарҙыр ҙа, әйтергә теләмәгәнен әйттергәндәрҙер. Уның әлеге алым менән башҡа байтаҡ, хатта бик күп яугирҙарҙы эшлектән сығарыуы асыҡланды. Бына ҡайҙа булған ул ысын һатлыҡ йән, хәсис дошман!

Трибунал рәйесе полковник ҡарарҙы уҡып ишеттерҙе. Ул ҡыҫҡа һәм аныҡ ине:

- Бер сәбәпһеҙгә намыҫлы яугир ҡыҙыларемеецты сафтан сығарып, совет иленен, уның халҡының һуғышсан һәләтенә кире ҡайтарғыһыҙ зыян килтергәне өсөн халыҡ дошманы тип һанарға һәм иғлан итергә. Башҡарылған енәйәте өсөн, юғары командование иғлан иткән хәрби хәлгә ярашлы, саф алдында атыу язаһына тарттырырға. Ҡарар ҡайтанан ҡаралмай һәм уны кисекмәҫтән тормошҡа ашырырға. Алып китегеҙ...

Шулай итеп, үҙен донъя кендеге һанап йөрөгән капитан үҙ башына үҙе етте. Ә Фауарис - күкрәген сөгән туп ярсыһы онтап, әжәлдән ҡала алған совет һалдаты - ныҡ туҡмалыуҙан имгәнеп, хәрби хеҙмәткә ярақһыҙ ғәрип тип табылды һәм өйөнә ҡайтарып ебәрелде...

* * *

- Тора һалһаң ни була, балам...

- Хәҙер, әсәй, мин уяу ятам. - Бер күҙе күрмәгән Фауарис ауырлыҡ менән тороп ултыра. Уның "һуғышта" һынып-онталып бөткән ҡабырғалары әле булһа үҙәккә үткәреп һыҙлай. Тик был турала ул әсәйенә лә, башҡа кешегә лә белгертмәй. Әште лә ауырына-еңеленә бүлеп тормай, ни ҡушһалар, шуны урын-еренә еткереп башҡарырға тырыша.

Сараһыҙҙан табип комиссияһына эләгеп, демобилизацияланған Фауаристың ҡайтып төшөүенә ярты йыл тула. Ошо осорҙа фронтҡа алынған атайының хәбәрһеҙ юғалыуы хаҡында ҡағыҙы килде. Шулай ҙа, хәбәр-хәтәрһеҙ юғалған - ҡаһармандарса һәләк булған түгел, өйҙәре менән уны көтәләр, өмөтләнәләр.

Фауаристы ике тапҡыр үлем ҡосағынан йолоп, баштараҡ сәләм-хат ебәреп торған шәфҡәт туташы һылыу Полина ла нишәләр яҙмаҫ булды. Яҙмаҫ булды тип, ул кем һуң Фауариска? Фронт юлдарында осраҡлы ғына тап булған мәрйә. Өс хаты килгән икән, унан нимә? Бәлки, Фауаристың яуап хатын алмағандыр, шуға күрә яҙмайҙыр. Бәлки, икенсе берәүҙе осратҡандыр. Йәш, матур ҡыҙ - бының бер ғәйебе лә юҡ.

Ошо рәүешле һуңғы мәлдә, ғәжәп, отставкалағы рядовой Фауаристың уйында ла, төшөндә лә, хатта ҡайсаҡ телендә лә гелән Полина булды. Ҡыйыу сержант Прохорова. Шул ауан ҡыйыулығы арҡаһында шәһит китеүе лә бар. Һуғыш ҡорбанһыҙ булмай. Бигерәк тә кешелекте күрә алмаған фашист илбаҫарҙары менән яғалашҡанда.

- Ана, һинә килгәндәр, улым, - бер иртәлә түтәл тәрбиәләп йөрөгән әсәйе йүгереп инде.

- Кем ул?

- Сибәр генә бер ҡатын. Һалдат кейемендә.

Күтәрмәлә лейтенант погондары таҡҡан Поля-Полина йылмайып тора. Алһыу сикәләрендә матур уйымдар барлыҡҡа килгән. Фауарис бер килке үҙ күҙенә ышанмай торҙо.

- Нимә, танымайһыңмы әллә, рядовой Фауарис? - Ҡыҙ зынлатып көлдө. Нәҡ теге мәл, ялан госпиталендәге кеүек.

- Нисек бы... былай... көтмәгәндә? - Егет көскә телгә килде.

- Һағындым, Албаҫтым.

- Мин дә. Оҙаҡҡамы?

- Бөтөнләйгә.

- Ысынлапмы?

- Хәрби хеҙмәттән ваҡытлыса азатмын. - Полина тағы көлдө. - Беҙҙең генерал юллауы буйынса.

- Нисек улай?

- Ә мин өләсәйемдең яҙмышын ҡабатламаҫҡа булдым. Йөрәк аҫтымда тағы бер албаҫтым бар... Бәләкәй генә. Ул үҙ атаһы янында булырға тейеш, тип уйланым...

- Ah, яҙмышым минең!

- Иплә̄п ҡылан, башҡорт...

Фауарис мәрйәне һаҡ ҡына ҡосағына ҡыҫты. Был мәл өйҙән сығып килгән әсәйе уларға ҡарап шаҡ ҡатҡан ине.

## МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# ФОТОЛАРҘА - ТАРИХ

**Башҡортостандың Милли музейында Өфө ҡалаһының 450 йыллығы айҡанлы Рәиф Бадыҡовтың һәм Вячеслав Стрижевскийҙың "Өфө - 450. Халыҡ һәм ҡала" фотокүргәҙмәһе асылды. "Был Өфө менән унда йәшәүселәр араһындағы бәйләнеште күрһәткән, үткәндәрҙең бөгөнгө менән айырылғыһыҙлығын сағылдырған проект. Рәиф Бадыҡов менән Вячеслав Стрижевский ҡала киңлеген ваҡиғалар, кешеләр аша тулыһынса күрһәтә алды", - ти күргәҙмәне ойоштороусылар.**

Рәиф Бадыҡов ижади эшмәкәрлеген ҙур тиражлы "Тәҙрәүсе тауышы" гәзите менән хеҙмәттәшлек итеүҙән башлай. Хеҙмәт юлын 1980 йылда "Вечерняя Уфа" ҡала гәзитендә башлай, ә 1983-2021 йылдарҙа "Республика Башкортостан" республика ижтимағи-сәйәси гәзитендә фотохәбәрсе булып эшләй. Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостан Республикаһының Фоторәссамдар союзы ағзаһы. Башҡортостан Республикаһының Журналистар союзы ағзаһы. Ул Рәсәйҙең иң яҡшы фоторәссамдарының береһе булараҡ билдәле.

Вячеслав Стрижевский төрлө республика баҫмаларында фотохәбәрсе булып эшләй, "БашФото-Нур" продюсерлыҡ берекмәһенең генераль директоры, Республика рус драма театры директоры, Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрының генераль директоры була. 2001-2006 йылдарҙа Рәсәй Театр эшмәкәрҙәре союзының (Мәскәү) Үҙәк контроль-ревизия комиссияһы рәйесе. Башҡортостан Республикаһының һәм Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Башҡортостандың Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһы лауреаты. Вячеслав Александрович - Башҡортостан Республикаһының мәҙәни тарихы, театр социологияһы һәм театр эшен ойоштороу проблемалары буйынса 20-нән ашыу фотокитап, утыҙ ғилми мәҡәлә авторы.

# "АЛТЫН БИТЛЕК" ПРЕМИЯҺЫНА...

**Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрының "Бөйрәкәй" спектакле "Алтын битлек" премияһына тәҡдим ителде. Ул 2023-2024 театр миҙгеле спектаклдәре араһында алдан һайлап алыуҙы үткән тамашалар исемлегенә инде.**

Рәсәй милли театр премияһы һәм "Алтын битлек" фестивале тураһындағы положениеға ярашлы, премияға дәғүә итеүселәрҙе билдәләү өсөн спектаклдәрҙең видеояҙмалары нигеҙендә алдан һайлап алыу үткәрелә. Эксперт советының эш йомғаҡтары тураһындағы мәғлүмәт 2024 йыл аҙағына тиклем иғлан ителәсәк.

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, режиссер Айрат Абушахманов күренекле яҙыусы Таңсулпан Ғарипованың популяр "Бөйрәкәй" романын сәхнәләштергәйне. 5 сентябрҙә спектакль - Өфөлә, ә 10 сентябрҙә "Федерация" Бөтә Рәсәй милли театрҙар фестивале сиктәрендә Х. Нурадилов исемендәге Чечен дәүләт драма театры сәхнәһендә күрһәтеләсәк.

# ГОРЬКИЙ - ЗАМАНСА

**Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры Мәскәүҙә Денис Хөснийәровтың "Атай" спектакле менән сығыш яһаясаҡ. Тамаша 9 августа Мәскәү йәштәр театрының Ҙур сәхнәһендә "Горький +" фестивале сиктәрендә күрһәтелә.**

Фестиваль 8 августан 11 августа тиклем Мәскәүҙә үтә. Программа Горький паркында ғына түгел, Мәскәү йәштәр театрында, Яңы Третьяков галереяһында һәм Горький исемендәге киностудияла планлаштырылған. Мәскәү йәштәр театры сәхнәһендә төрлө төбәктәрҙән Горький әҫәрҙәре буйынса ҡуйылған спектаклдәр күрһәтеләсәк. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, "Атай" ғаилә драмаһы Максим Горькийҙың 1908 йылда яҙылған "Һуңғылар" пьесаһы буйынса ҡуйылған. Был ата-әсәнең хаталары, ялғандары, асыуы йәки быуынһыҙлығы балалар яҙмышына нисек йоғонто яһауы тураһындағы хикәйә, быуындар бәйләнеше призмаһы аша ғаилә тураһында әңгәмә. Өфөлә премьера 2022 йылдың 17 декабрендә үтте. Спектакль өҫтөндә Санкт-Петербургтан саҡырылған ижади төркөм эшләне. "Был театрҙың, режиссерҙың, артистарҙың бик етди белдереүе. Горький хәҙер бик заманса яңғырай - беҙ ҙә бик ауыр заманда йәшәйбеҙ, ғаиләләр тарҡалған, һәр кемдең ҡарашы айырылған, бер-беребеҙҙе аңламайбыҙ, үҙебеҙҙе нисек тоторға белмәйбеҙ. Бик күп ҡиммәттәр юҡҡа сығарылды, балалар бик ауыр хәлдә ҡалды", - тип билдәләне Рәсәйҙең алдынғы театр тәнҡитселәренең береһе, "Алтын битлек" премияһының эксперт комитеты рәйесе Татьяна Тихоновец.

Белешмә. "Горький +" сәнғәт фестивале - Максим Горький ижадына һәм шәхесенә арналған күләмле мәҙәни проект. Фестиваль тәүге тапҡыр 2022 йылда Мәскәүҙең төп паркында "Горький в парке Горький" исеме аҫтында үткәрелде. Унда Евгений Миронов, Александра Урсуляк, Юрий Башмет һәм "Мәскәү солистары" ансамбле, "Комонь" ансамбле һәм башҡа бик күп артистар ҡатнашты. Проект "Йыл мәҙәни ваҡиғаһы" номинацияһында "Йыл ваҡиғаһы" премияһын алды.

**Ләйлә АРАЛБАЕВА.**

# ЙӘШТӘРЕБЕҘ АРАЛАША...



**Йылайыр районында "Аҫылташ - 2024" йәштәр мәғариф форумы үҙ эшен тамамланы.**

Республиканың маҡсатлы йәштәре өс көн дауамында бында белемдәрен камиллаштырҙы, уңышлы яҡташтарыбыҙ менән осрашты, оҫталыҡ дәрестәрендә һәм үҫтереүсе уйындарҙа ҡатнашты. Форум сиктәрендә "Батырҙар уҙышы" ла ойошторолдо.

"Йолаларҙы һаҡлап" девизына нигеҙләнгән форумдың төп принциптарының береһе - башҡорт мәҙәниәтен һаҡлау һәм популярлаштырыу. Был маҡсатта ойошторолған этномайҙансыҡтарҙа йәштәр кейеҙ баҫыу оҫталығына өйрәнде, үҙҙәрен уҡ атыуҙа һынап ҡараны, халыҡ бейеүе элементтары менән танышты, заманса түшелдеректәр эшләү серҙәренә төшөндө. Ә түнәрәктә ойошторолған халыҡ уйындары барыһының да күңеленә хуш килде.

Форумдың тағы бер сағыу ваҡиғаһы "Росмолодежь" Бөтә Рәсәй йәштәр проекттары конкурсын йомғаҡлау булды. Грanttar конкурсының 3,5 миллион һумлыҡ фондын 9 еңеүсе бүлеште. Сараны ябыу тантанаһында иң әүҙемдәргә республика Башлығының "Башҡортостан Республикаһының ирекмәне" почет билдәһе һәм рәхмәт хаттары тапшырылды.

"Халҡыбыҙҙың, республикабыҙҙың киләсәге йәш быуындың ниндәй булыуы менән бәйле. Мин үҙем йәштәр сәйәсәтендә ҡатнаштым, һәм ул ваҡытта беҙ былдай саралар тураһында хыяллана ғына инек", - тип мөрәжәғәт итте форумда ҡатнашыусыларға республика Башлығы Хакимиәте етәксеһенең эске сәйәсәт буйынса беренсе урынбаҫары Азат Бадранов. Ул һәләтле йәштәр менән бергә Йылайыр районының "Дуҫлыҡ" лагерындағы йәштәр аллеяһына ағас үҫентеләре ултыртыуҙа ҡатнашты.

"Аҫылташ" форумы Башҡортостан Республикаһы Башлығы гранттары фонды ярҙамында Йәштәр яҡташтар ассоциацияһы менән берлектә республиканың Йәштәр сәйәсәте буйынса дәүләт комитеты тарафынан "Берҙәмлек" проекты сиктәрендә тормошҡа ашырылды.

✔ *Маҡсатлы йәшәгән кешеләр араһында иртә һәм осраҡлы үлем һирәк осрай. Бынан тыш, физиологтар әйтеүенсә, маҡсатлы кешеләр хроник ауырыуҙар менән һирәгерәк яфалана, уларҙың һаулыҡ торошо күпкә яҡшыраҡ була.*



ИНТЕРНЕТТАН



# МАҠСАТЛЫ БУЛ!

■ Маҡсатҡа ынтылып йәшәү - кеше характерының ыңғай сифаты ғына түгел. Тормошта маҡсат булыуы кешенең физик сәләмәтлегенә лә яҡшы йоғонто яһай. Психологтар һәм физиологтар үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, маҡсатлы йәшәгән кешеләр араһында иртә һәм осраҡлы үлем һирәк осрай. Бынан тыш, физиологтар әйтеүенсә, маҡсатлы кешеләр хроник ауырыуҙар менән һирәгерәк яфалана, уларҙың һаулыҡ торошо күпкә яҡшыраҡ була.

■ Кальций организм өсөн бик файҙалы, әммә был микроэлементҡа бай булған һөт аҙыҡтарын яратмайһығыҙ икән, уның урынына башҡа аҙыҡтар ҡулланырға тәҙәтләнегеҙ. Мәҫәлән, борсаҡ йәки чечевица ашы, балыҡ консервалары, һөйәкле иттән бешерелгән аш кальцийға бай. Кальций шулай уҡ аҡ фасолдә, сельдерейҙә күп. Хатта ҡайһы бер тәм-томда ла кальций булыуын иҫәпкә алығыҙ. Төндырмаға миндаль сәтләүеге йәки инжир һалып тәҡдим итһәгеҙ, был аҙыҡтан балалар ҙа баш тартмаясаҡ.

■ Һөт аҙыҡтары диабет менән ауырыусыларға ла файҙалы. Америка ғалимдарының ун йыллыҡ тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, аҙнаһына 35 тапҡыр һөт аҙыҡтары ҡулланыу күп ауырыуҙарҙан ҡоткара, быға һөттәге кальций һәм макронутриттар йәки аҡһым һәм майҙар булышлыҡ итә. Улар организмды диабеттан һаҡлап ҡына ҡалмай, ябығырға ярҙам итә, гипертония һәм йөрәктең ишемик ауырыуҙарын булдырмай.

■ Тикшеренеүселәр әйтеүенсә, "һабан турғай"ҙарының сәләмәтлеге лә нығыраҡ, көҙәһе лә һомғолораҡ, кәйефе лә яҡшыраҡ була. Белгестәр быны уларҙың иртәрәк уянып, эш көнө башланғанға тиклем күп эштәрен эшләп өлгөрөүе менән аңлата. Йәғни, шуға ла уларҙың тормошонда депрессияға урын юҡ, сөнки ваҡытында үтәлмәгән эште башҡарыу өсөн хәүефләнергә кәрәкмәй. Йоҡонан һуң тороусылар йыш ҡына депрессияға бирелә, артыҡ ауырлыҡ менән яфалана.

■ Ғалимдар йөрәк ауырыуы булған 608 кешене тикшереп, омега-3 майлы кислоталары кешене ҡартайыуҙан һаҡлауын билдәләгән. Бындай кислоталар йөрәк өйәнәгенән һуң тиҙерәк һауығыу мөмкинлеге бирә, ҡартая барған һайын хәтер насарайыуын аҡрынайта, күҙ ауырыуҙарын булдырмай. Майлы кислоталарға бай рацион эсәк яман шеше сире барлыҡҡа килеүҙе 40 процентҡа кәметә. Бындай йәшлек эликсирын һәр магазинда ла һатып алып була. Америка ғалимдары фекеренсә, һөмбаш, макрель һәм сардина балыҡтары майлы кислоталарға бай.

■ Ҡайһы саҡта ҡайҙалыр инеп, унда нимә инәнегеҙҙе онотҡанығыҙ бармы? Нотр-Дам университеты тикшеренеүселәре лә ошо билдәле феноменды тикшереп ҡарарға булған. Уларҙың фекеренсә, ишек уйымы аша үтеү ҡыҫҡа ваҡытлы хәтерҙе насарайта. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусы студенттар виртуаль һәм реаль шарттарҙа бер нисә эксперимент үткән. Беренсе һынау ваҡытында улар виртуаль ысынбарлыҡта предметтарҙы ҡаптарға төргән һәм ҡапты йә бүлмәнең икенсе урынына күсереп ултыртҡан, йәки икенсе бүлмәгә алып сыҡҡан. Бынан һуң тәжрибәне реаль шарттарҙа эшләп ҡарағандар. Өсөнсө һынауҙа ҡапҡа төрөлгән объект бер нисә бүлмә аша үтеп, кире тәүге бүлмәгә әйләнеп ҡайтҡан. Асыҡланыуынса, экспериментта ҡатнашыусыларға икенсе бүлмәгә сығырға тура килһә, уларға ҡап эсендә нимә ятыуын хәтерләүе ауырға тура килгән. Өсөнсө һынау күрһәтеүенсә, хәтергә шарттар түгел, ә ишек уйымы аша үтеү нығыраҡ тәьҫир итә. Тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе Гэбриэль Радвански иҫәпләүенсә, ишектән инеүҙе йәки сығыуҙы мейе эшмәкәрлек эпизодтарының тамамланыуы тип ҡабул итә һәм "архивҡа тапшырып" өлгөрә.

КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП...

# БӘХӘСТӘН БӘХЕТ ТЫУАМЫ?



Тукһан туғыҙ йортло ҙур ғына ауылда бик бәхетле кешеләр йәшәгән. Берeһенән-береһе матурыраҡ, зауыҡ менән биҙәлгән өйҙәрҙә йәшәгән улар. Һәр хужалыҡты гүзәл баҡсалар уратып алған. Ауылдаштар йыл әйләнәһенә емеш-еләктән, йәшелсәнән өҙөлмәгән. Яҙҙарҙы дәртләнеп ҡаршы алғандар, йәйҙәрҙе көндәлек хеҙмәт менән күңелле үткәргәндәр. Байрамдарҙа уйнап-көлөп, йырлап-бейеп күңел асҡандар. Көҙ мул уңыш йыйғандар ҙа, ҡышҡыһын рәхәтләнеп ял иткәндәр. Ерҙә йәшәһәләр ҙә, күккә баҡып, йондоҙҙарға ҡарап, өмөтләнгәндәр, йәшәйеш тураһында уйланғандар, киләсәккә ышаныс менән ҡарағандар, кейеҙ-келәмдәргә йыһан есемдәрен биҙәк итеп төшөргәндәр.

Өс йылға бер тапҡыр июль айында ауыл кешеләре йәшәгән урындарынан йыраҡ булмаған яланда ҡорға йыйыла торған булған. Өс йылға бер тапҡыр кешеләр Аллаһы Тәғәлә тауышын ишеткән һәм үҙ һорауҙарына яуап алған. Маңлай күҙҙәре менән күрмәһәләр ҙә, кешеләр күңелдәре менән эргәләренә килгән Хоҙайҙы тойғандар. Һәр кем ошо мәлдә киләсәккә уй-хыялдар ҡорған, Хаҡ Тәғәлә менән көнәшләшкән. Мөғәмәлә төрлө кимәлдә барған: берәүҙәр тәрән уй-фекергә сумған, икенселәр ябай ғына донъяуи кимәлдә аралашҡан, өсөнсөләрҙең мөғәмәләһе уйын-көлкөгә ҡоролған.

Мәҫәлән, берәү ошондай һорау биргән:

- Хоҙайым, ниңә һин бөгөн беҙҙә ямғыр һиуыуна ҡойондорҙоң? Иртә менән лысма һыу иттең дә, төшкә ҡарай ғына ҡояш йылыһын өләштең. Әллә үҙең төшкә тиклем йоҡондан уянманыңмы, әллә беҙҙең байрам майҙанына йыйылғанды көтөп торҙоңмо?

- Юҡсы, - тип яуап бирә Хоҙай. - Мин иртә таңдан уҡ байрамығыҙ күңелле үтһен өсөн хәстәрлек күрҙем. Арағыҙҙа иртәнге тәһәрәт алырға йыбанғандар бар. Улар байрам йәмен ебәрмәһен, тинем дә, бөтәгеҙҙе лә бер юлы ҡойондорҙом. Әле бына таҙарынып кибендегеҙ.

- Улайһа, бик шәп иткәнһең, - тип ризалаша һорау биргән кеше.

Сәстәренә сал төшкән олпат ир бөтөнләй икенсе төрлө һорау бирә:

- Хоҙайым, әйт әле миңә, йыһандағы йондоҙҙарҙың мәңгелек тәртибе ни аңлата? Ерҙәге тормоштан биҙһәм, үҙем һайлаған йондоҙға ғиләм менән күсенеп бара аламмы?

- Йондоҙҙар һеҙгә йыһан тураһында мәғлүмәт бирә. Ерҙәге ығы-зығынан арынып, күңел тыныслығына өлгәшә алһағыҙ, йондоҙло китап һеҙгә үҙ серҙәрен асыр. Әммә бының өсөн тән таҙалығы ғына етмәй, күңел сафлығы мөһим. Йыһан сикһеҙ - һайла, әйҙә, үҙеңә оҡшаған планетаны. Тик бының өсөн бер генә шартты үтәргә кәрәк: йондоҙҙарға ғүмерең, ерҙәге тормошоң менән сағыштырғанда, тик ижад менән генә һуғарылһын.

Шулай күңелле йәшәгән был ауыл халҡы.

Көндәрҙән бер көндө был ауылға бер ыңғайҙан йөҙ аҡыл эйәһе килгән. Киң күңелле ауылдаштар ят кешеләрҙе бик ҡунаҡсыл ҡаршы алған, һый-хөрмәт күрһәткән. Бындай муллыҡты күреп, хакимдарҙың иҫе киткән. Уларҙың береһе былай тип һүҙ башлаған:

- О, кешеләр, һеҙ бик матур йәшәйһегеҙ. Әммә тормошоғоҙ үтә талғын, бер тигеҙ үтә. Һәр бер өйгә ҡот ҡунып, етеш йәшәһәгеҙ ҙә, Аллаһы Тәғәлә менән дөрөҫ һөйләшә белмәйһегеҙ, һеҙгә тәрбиәлелек етешмәй. Шуға күрә һеҙ Илаһи көскә дан йырлап табына белмәйһегеҙ.

- Юҡсы, бер ҙә улай түгел, - тип, ауылдаштар борсола башлаған. - Аллаһ менән беҙ өс йылға бер тапҡыр тиң күреп аралашабыҙ. Уны күрмәһәк тә, һәр иртәлә Ул беҙгә ҡояш булып балҡый, бал ҡорто булып бал йыя, ҡышҡы һалҡындарҙа ерҙе аҡ шәл менән ҡаплай. Ул һәр саҡ эргәбеҙҙә, беҙгә тәбиғәттең һәр миҙгеле ҡәҙерле.

- Юҡ, һеҙҙә эштәр дөрөҫ ойошторолмаған, - тигән аҡыл эйәләре. - Беҙ һеҙҙе Аллаһ менән аралашырға өйрәтергә килдек. Бөтә Ер шары буйлап ғибәҙәтханалар, матур-матур ҡорамдар төҙәлә. Был изге урындарҙа кешеләр Аллаһ менән көн дә һөйләшә ала. Беҙ һеҙҙе лә өйрәтәсәкбеҙ.

Өс йыл дауамында ауыл кешеләре аҡыл эйәләренең һүҙҙәрен диҡҡәт менән тыңлаған. Һәр хакимдың үҙенә хас ҡарашы, үҙ теләге булған: берәүҙәре ҡорамды нисегерәк эшләү тураһында аҡыл һатҡан, икенселәре ғибәҙәт ҡылыу тәртибе тураһында һөйләгән - һәр кем үҙ яғына ҡайырған. Ауылдаштарҙың ҡайһы аҡыл эйәһен һайларға белмәй баштары ҡатҡан. Етмәһә, улар сит кешеләрҙе рәнйетеүҙән ҡурҡҡан. Шуға күрә һәр өйҙә, һәр аҡыл эйәһен тыңлап, ҡорамдар төҙәргә булғандар. Тик ауылда туҡһан туғыҙ йорт булһа, аҡыл эйәләре йөҙ булған. Был яңы ауыл кешеләренең ҡарарын ишетеп, аҡыл эйәләре хафалана башлаған. Нисек инде улай, тимәк, бер аҡыл эйәһенә ҡорам етмәйәсәк, ул хәйер-саҙаҡаһыҙ ҡаласаҡ бит? Килмешәктәр кемдең теорияһы иң хаҡ икәнен иҫбатлап, бәхәсләшә башлаған. Йәйләп был бәхәскә ауыл кешеләре лә ҡушылған. Бәхәс шул тиклем көслө булған: ауылдаштар өс йылдан һуң яланға ҡорға йыйылыу тураһында ла онотҡандар хатта!

Тағы өс йыл үткән. Ауыл тирәләй туҡһан туғыҙ мөһабәт ҡорам ҡалҡып сыҡҡан. Улар эргәһендә кешеләрҙең элекке өйҙәре йәмһеҙ һәм шөкәтһеҙ булып күренгән. Кешеләр емеш-еләкте, йәшелсәләрҙе лә ҡарамаған, баҫыуҙар ташландыҡ хәлгә ҡалған, баҡсалар ҡороған.

Һәр аҡыл эйәһе үҙ ҡорамына бикләнеп, кешеләргә аҡыл һатҡан: "Һеҙ әле тулыһынса иманға килмәгәнһегеҙ. Хәйер-саҙаҡаны күберәк алып килегеҙ, көнө-төнө табыныгыҙ".

Ҡорамһыҙ тороп ҡалған йөҙөнсө аҡыл эйәһе иһә йәшертен үҙ эшен алып барған. "Ғибәҙәтхана улай төҙөлмәй, табынғанда ла икенсе һүҙҙәр ҡулланырға кәрәк. Аллаһ менән нисек көн һайын һөйләшергә икәнен бер мин генә беләм", - тип өгөтләгән ул.

Әгәр ҙә ауылдаштарҙың береһе уның өгөт-нәсихәтенә инанһа, ауыл эргәһендә яңы ҡорам төҙөлгән, элеккеһе ташландыҡ хәлгә дусар булған. Хәҙер инде ҡорамһыҙ тороп ҡалған икенсе аҡыл эйәһе халыҡты үҙ яғына ауҙарырға тырышҡан. Шулай бик күп йылдар уҙған.

Көндәрҙән бер көндө ауылдаштар өс йылға бер йыйылған элекке ҡорҙо иҫтәренә төшөргән. Аллаһ тауышын тағы үҙҙәренә ишеткеләре килгән. Ауыл эргәһендәге яланға йыйылғас та, улар күмәкләп яуап таба алмаған һорауҙарын биргән: "Аллаһы Тәғәлә, әйтсе беҙгә, ни өсөн беҙҙең баҡсаларҙы ҡорт баҫты? Ни өсөн беҙ элеккеләй йыл да мул уңыш йыймайбыҙ? Ни өсөн кешеләр бер-береһе менән бәхәсләшеүҙән бушамай? Ни өсөн беҙ, күпме генә ыҙғышһаҡ та, үҙ иманыбыҙға ҡайта алмайбыҙ? Беҙ күпләп төҙөгән ҡорамдарҙың ҡайһыныһында йәшәйһең Һин"?

Кешеләр яуапты оҙаҡ көткән. Күктән был юлы күңелһеҙ, арыған тауыш ишетелгән:

- Эй, кешеләрем, мин һеҙҙе берҙәм итеп яралттым. Һеҙ берҙәм булғанда ғына илаһи хыялға ирешеп була. Ә һеҙ һәр берегеҙ, үҙ аллаһын эҙләп, айырым ҡорамдарға бикләндегеҙ. Ҡәҙерле балаларым, әйтегеҙсе, мин ҡайһы ҡорамда булырға тейеш? Бөтәгеҙҙе лә тиң күргәс, берегеҙҙе лә рәнйетмәҫ өсөн ҡайһы ҡорамды һайлайым? Һөйөү менән һайлау ирке һеҙҙең һәр берегеҙҙең үҙендә. Берҙәм ҡарарға килһәгеҙ генә хыялығыҙ тормошҡа ашыр...

Шулай тигән дә тауыш шымған. Ҡасандыр гөл-сәскәгә күмелгән ауылда йәшәгән кешеләр иһә бөгөнгәсә бәхәсләшә. Өйҙәре емерек, баҡсалары ташландыҡ хәлдә. Ҡорамдар бейегәйгән һайын, бәхәс тә ҡыҙа бара...

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Был кинәйәлә кемдәр һүрәтләнә, аңғарҙығыҙмы? Шулай шул. Ҡорамдарыбыҙ бейегәйә, аҫ-яланғас түгелбеҙ, тамағыбыҙ туҡ - ә беҙ һаман бәхәсләшәбеҙ, зарланабыҙ. Шөкөр итеү тигәндә бөтөнләй онотток. Былай барһа, бер көн килеп ысынлап та емерек ҡорамдарға, ярыҡ ялғашҡа ҡалмаҫмы икән көнөбөҙ?**

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ**
**әҙерләне.**

✓ *Мине яратмағандарҙы, хөрмәт итмәгәндәрҙе күҙ уңымдан ыҫҡындырырға һүҙ бирәм! Һөймәгәнгә һөйкәлмәм, нурын миңә һипмәҫ күҙҙәрҙе көсләп астырмам, мине көтмәгәндәрҙе көтөп, ҡараштарым талдырмам.*



*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# КӨНДӘЛЕК ДОҒАЛАР ҺӘМ ЗЕКЕРҘӘР



## ДОҒА

Кешелеккә Илаһи шәфҡәтлелек итеп ебәрелгән бөтөн бәйғәмбәрҙәр һәм әүлиәләр ҙә ауырлыҡта ла, еңеллектә лә, хәсрәттә лә, шатлыҡта ла Аллаһ Тәғәләгә шөкөр итеүҙәрен, бағлаған өмөттәрен үә ялбарыуҙарын доға аша башҡарғандар. Уларҙы беҙ үҙҙәренең миҫалында Аллаһ Тәғәләгә мөхәббәт тәрбиәләүсе, хаҡ юлдан әйҙәүсе пак шәхестәр тип беләбеҙ. Аллаһ Тәғәләгә һыйыныу - тормош ҡануны, Хоҙайға буйһоноуҙың асылы ул. Ерҙә лә, күктә лә бөтөн нәмә Илаһи ихтыярға буйһона, һәр ҡайһыһы үҙенең телендә сикһеҙ ҡөҙрәт Эйәһен иҫкә ала һәм Уға ялбара. Дөрөҫ дини тәрбиә мөьминдә һәр саҡ доғала булыу теләген уята, сөнки доға мөьминдең йөрәгендәге Аллаһ Тәғәләгә алып барыусы юлдың ҡапҡаһына асҡыс булып тора. Ҡабатлаған һайын доға мөьминдең күңелендә эске тойғолар сифатында һеңеп ҡала бара, холоҡ-фиғелендәге ыңғай сифаттарҙың берәһенә әйләнә. Быны аңлағандар шуның өсөн дә һәр саҡ доға менән йәшәй. Аллаһ Тәғәлә менән Уның ҡоло араһында күҙгә күренмәҫ бәйләнеш һәр саҡ доға ҡылып, Раббыһына ялбарып йөрөгән мөьминдең йөрәгендә барлыҡҡа килә. Әгәр ҙә доға ҙур ихласлыҡ һәм ләззәт менән ҡылынһа, был - бәндә күңеленең Илаһи шәфҡәтлелек менән тоташыу мәле.

**Эй Раббыбыҙ! Беҙҙе ҙур теләк, күҙ йәштәре, ихласлыҡ аша Илаһи мәрхәмәткә һәм ярлыҡауға өлгәшеү һәләте менән бүләкләсе. Һинең ризалығыңа өлгәшеү өсөн күңелдәребеҙҙе Үҙең тыуҙырған бөтөн нәмәгә ҡарата ла бөтмәҫ-төкәнмәҫ шәфҡәтлелеккә күндерсе. Үҙеңдең ҡолдарыңдың ихлас доғалары аша беҙҙең фатихалы Ватаныбыҙға - тыныслыҡ һәм бәхет, халҡыбыҙға берҙәмлек һәм муллыҡ бирсе. Әмин!..**

## АЛЛАҒА ҺЫЙЫНЫУ

**"Мин (Бәйғәмбәр - салләллааһу ғәләйһи үә сәлләм) шундай һүҙҙәрҙе беләм, әгәр ҙә берәй кеше уларҙы ярһыған сағында әйтһә, ярһыуы баҫылыр. Бына ул һүҙҙәр: Аллааһүммә иннии әғүүҙү бикә минәш-шәйтаанир-раджиим.**

"Эй Аллаһ Тәғәлә! Ҡәһәрле иблестең яуызлығынан Һиңә һыйынам" *(Бохари. "Бәғҙүл-Халҡ", 2-се хәҙис; Мөслим. "Бирр", 109-110-сы хәҙистәр).*

Әгәр ҙә ҡол был доғаны көн башланғанда һәм төн башланғанда уҡыһа, Аллаһ Тәғәлә уны иблестән һаҡлаясаҡ:

**Бисмилләәһи ҙиш-шә'ни ғәҙыымил-бурһәәни шәдиидис-султаани мәә шәә' Аллааһу кәән. Әғүүҙү билләәһи минәш-шәйтаан.**

"Аллаһ исеме менән! Данлы Ул, бөтөн хакимлыҡ һәм ҡеүәт Унда. Бөтөн нәмә лә тик Унын ихтыяры буйынса ғына башҡарыла.Ҡәһәрле иблестең яуызлығынан Һиңә һыйынам".

**Рамаҙан уғлы Мәхмүт САМИ китабынан.**
**Рус теленән Сәлмән ЯРМУЛЛИН тәржемәһе.**
**(Ҡыҫҡартып алынды).**

*СӘХИФӘНӘН*

# ҮҘ-ҮҘЕМӘ ҺҮҘ БИРӘМ




**Интернет селтәрҙәрендә, ватсаптарҙа, ғәҙәттә, бер хәбәр-мәғлүмәт сәхифәнән сәхифәгә күсеп йөрөүсән. Мәғәнәле һүҙҙәрҙе, матур фекерҙәрҙе беҙ ҙә "Киске Өфө" биттәренә күсереп алырға ғына торабыҙ. Ҡайһы саҡта ул яҙмаларҙың авторҙары ла ҡайҙалыр "аҙашып" ҡалған була. Түбәндәге яҙманың да авторын билдәләй алманыҡ, шулай ҙа уны уҡыусыларыбыҙ иғтибарына еткермәксе булдыҡ. Авторының күҙенә салынып, үҙен белгертһә, шат булырбыҙ.**

- Үҙемә-үҙем терәк булырға һүҙ бирәм! Мин үҙемде иң яҡшы белгән кеше. Минең кеүек мине берәү ҙә аңламаясаҡ. Мин был донъяла берәү генә. Шуға күрә, үҙемде яҡларға, ҡәҙерләргә, һәр ваҡыт алға әйҙәргә һүҙ бирәм!

- Үткәндәргә әйләнеп ҡайтмаҫҡа һүҙ бирәм! Артҡа ҡараһаң, барыр юлдар аҙаштырыр. Тик алға ынтылырға, үткәндәргә үкенмәҫкә, хәтер һандығында ураған һайын соҡонмаҫҡа һүҙ бирәм!

- Мине яратмағандарҙы, хөрмәт итмәгәндәрҙе күҙ уңымдан ыҫҡындырырға һүҙ бирәм! Һөймәгәнгә һөйкәлмәм, нурын миңә һипмәҫ күҙҙәрҙе көсләп астырмам, мине көтмәгәндәрҙе көтөп, ҡараштарым талдырмам.

- Барҙың ҡәҙерен белергә һүҙ бирәм! Нәфсенең сиге юҡ. Үҙ утрауы булған байҙар ҙа, тағы бер утрау һатып алам, тип, күҙенә аҡ-ҡара күренмәй аҡса артынан саба. Иң оло бәхет ул - һулар һауаң, баш осонда балҡыр ҡояш, эсер һыуың, ашар ризығың булыу, үҙ илеңдә үҙ телеңдә һөйләшеп йәшәү. Ошо хазинаны йөрәгеңә ҡәҙерле кешеләрең менән бергә татыу - икеләтә бәхет.

- Бер ҡасан да бирешмәҫкә һүҙ бирәм! Мин был Ергә килгәнмен икән, Хоҙай күпме ғүмер сәғәте биргән, шуның һәр көнө, һәр минутының ҡәҙерен белеп, ауырлыҡтарҙы тик һынау тип ҡабул итеп, ғорур аҙымдар менән тик алға атларға һүҙ бирәм!

- Нисек бар, шулай яратырға һүҙ бирәм! Һәр ағас, һәр таш, һәр йәнлек, һәр кеше, ел-ямғырҙар, дауыл-ҡарҙар - Хоҙай емеше. Минең уларҙы күрә алмаҫҡа, уларға асыуланырға хаҡым юҡ. Был Ерҙә һәр кемдең, һәр нәмәнең үҙ урыны, үҙ юлы. Ошо дөрөҫлөктө ысын күңелдән ҡабул итергә һүҙ бирәм!

*ФӘҺЕМ*

# БӘХЕТ ҠАНУНДАРЫ



Эштә, мәктәптә һәм маҡсатыңа илткән юлда уңыш яулау тормош сифатына өлгәшеү нигеҙе булып хеҙмәт итә. Ләкин уңыш юлдашы булған билдәлелек үҙе генә бәхеткә илтмәй. Билдәлелек алҡыштарға күмә, ләкин ҡәнәғәтләнеү бирмәй. Билдәлелек эҙемтәһе булған ныҡышмалы эҙәрлекләүҙәр генә яңғыҙлыҡтан ҡотолдормай.

Билдәлелек бәхетле тормошҡа илткән юлда ҡапҡан булып әүерелергә лә мөмкин, сөнки ул кешене ябайлыҡтан һәм һиҙгерлектән мәхрүм итә. Күп билдәле кешеләргә хас хәсрәт һәм төшөнкөлөк. Шуға ла билдәлелек өсөн түгел, уңыш яулау өсөн көрәшегеҙ. Ә шулай ҙа билдәлелек килә икән, уға әллә ниндәй ҙур әһәмиәт бирмәгеҙ, уға еңел ҡарарға өйрәнегеҙ.

**Аугусто КЮРИ.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

## Бишенсе хат: "Тормош мәғәнәһе нимәлә?"

Йәшәйешеңдең маҡсатын төрлөсә билдәләргә мөмкин, әммә маҡсат булырға тейеш - юғиһә, тормошоң тормош түгел, ә бушлыҡ. Тормошта принциптар ҙа булырға тейеш. Уларҙы көндәлеккә яҙып ҡуйыу яҡшы, тик көндәлегең ысын булһын, уны берәһенә лә күрһәтергә ярамай - бары үҙең өсөн генә яҙырға. Һәр кемдең тормошонда, тормош маҡсатында, принциптарында бер ҡағиҙә мотлаҡ булырға тейеш: тормошто лайыҡлы үтергә кәрәк, аҙаҡ хәтерләгәндә йөҙөңә ҡыҙыллыҡ килтерерлек булмаһын.

Абруй кешеләргә ҡарата яҡшы мөнәсәбәттә, киң күңелле, тоғролоҡло, яҡшы дуҫ булыуҙы, башҡаларға ярҙам итеүҙән ҡыуаныс кисереүҙе талап итә. Тормошоң лайыҡлы булһын өсөн ваҡ һәм шаҡтай ҙур ләззәттәрҙән баш тарта белеү зарур... Ялағайланыу һәм алдашыуға ҡарағанда ғәфү үтенә, башҡалар алдында хатаңды таный белеү яҡшыраҡ. Алдашҡанда кеше тәү сиратта үҙен алдата, сөнки ул, алдап яҡшы иттем, тип уйлай, ә башҡалар быны аңлаһа ла, күңелен уйлап, өндәшмәй ҡала. Алдыҡ һәр ваҡыт һиҙелә. Алдайҙармы, дөрөҫтө әйтәләрме икәнде кеше тоя. Әммә дәлилдәр юҡ, йышырағын тейге лә килмәй...

Тәбиғәт кешене миллиондарса йылдар буйы барлыҡҡа килтерә һәм тәбиғәттең ошо ижади эшен, уйлауымса, хөрмәт итергә кәрәк, тормошто лайыҡлы йәшәргә һәм беҙҙе барлыҡҡа килтергән тәбиғәт рәнйемәҫлек итеп үтергә кәрәк. Тәбиғәт ижади, ул беҙҙе барлыҡҡа килтергән, шуға беҙ тормошобоҙҙа донъялағы емергес көстәрҙе түгел, ә тап ошо ижади үҫеш йүнәлешен, ижадты күтәрмәләргә бурыслыбыҙ. Быны нисек аңларға, үҙ тормошонда нисек ҡулланырға тигәндә, һәр кем үҙ һәләттәренә, ҡыҙыҡһыныуҙарына һ.б. таянып, яуаптарҙы үҙе табырға тейеш. Әммә ижад итеп, ошо халәтеңде һаҡлап йәшәү зарур. Тормош бер төрлө генә түгел, тимәк, ижад итеү ҙә төрлөсә, йәшәйешебеҙҙә ижадҡа ынтылышыбыҙ ҙа һәләттәребеҙгә һәм күңелебеҙгә ятҡандарға ҡарап, төрлөсә булырға тейеш. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ?

Диңгеҙ кимәленә ҡарап бейеклекте үлсәгән кеүек, тормошта бәхетлелекте иҫәпләй торған шундай бәхет кимәле лә бар. Башланғыс нөктә. Бына шулай, ошо бәхет кимәлен ҙурҙа ла, бәләкәйҙә лә күтәреү, тормошта арттырыу - һәр кешенең бурысы. Үҙеңдең шәхси бәхетеңде лә хәстәрләйһең. Ә иң мөһиме - тирә-йүндәгеләрҙекен, иң яҡын кешеләрҙекен, уларҙың бәхет кимәлен арттырыуы ябай, еңел һәм һис мәшәҡәтһеҙ. Бынан тыш, был илеңдең һәм ахыр сиктә бөтә кешелектең бәхет кимәлен арттырыуҙы аңлата. Быныҡ ысулдары күп төрлө, әммә һәр кемдең ҡулынан килерлектәре бар. Аҡыл менән хәл ителгән дәүләт мәсьәләләре һәр ваҡыт бәхет кимәлен күтәрә, әммә шәхсән һеҙҙең быны эшләргә мөмкинлегегеҙ юҡ икән, үҙеңдең эшмәкәрлек даирәһендә, мәктәп кимәлендә, дуҫтарың һәм иптәштәрең араһында бәхетлелекте арттыра алаһың. Бындай мөмкинлек һәр кемгә бирелгән.

Йәшәү - тәү сиратта ижад, ләкин был һәр кеше йәшәү өсөн рәссам, балерина йәки ғалим булып тыуырға тейеш, тигәнде аңлатмай. Ижадты ла тыуҙырырға була. Үҙең тирәләй яҡшылыҡ мөхите, хәҙергеләр әйтмешләй, яҡшылыҡ аураһы тыуҙырырға мөмкин. Бына, мәҫәлән, кеше йәмғиәткә үҙе менән шикләнеүсәнлек мөхитен, ниндәйҙер ауыр тынлыҡ алып килеүе ихтимал, йәки шунда уҡ шатлыҡ, яҡтылыҡ та өҫтәүе бар. Ошо ижад була ла инде. Ижад - ул өҙлөкһөҙ. Шунлыҡтан тормош - ул мәңгелек ижад итеү. Кеше тыуа һәм үҙе тураһында иҫтәлек ҡалдыра. Ниндәй хәтирәләр ҡалдыра? Был хаҡта ниндәйҙер бер йәшкә еткәс кенә түгел, ә тәүҙән үк хәстәрлек күрә башларға кәрәк, сөнки кеше яҡты донъяны ҡасан ташлап китерен белмәй. Һәм шуға үҙе тураһында ниндәй хәтирәләр ҡалдырыуы бик мөһим.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**

✓ *Айыу менән осрашҡанда ситкә ҡарамағыҙ, әкрен генә сигенегеҙ, тыныс булығыҙ. Әгәр йыртҡыс һеҙгә табан йүнәлә икән, уның ҡылығын туҡтап, күҙәтеп торорға кәрәк.*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# 8 АВГУСТ - БӨТӘ ДОНЪЯ БЕСӘЙҘӘР КӨНӨ



**Бесәйҙәргә арналған байрамдар бик күп илдәрҙә бар икән. Мәҫәлән, Рәсәйҙә Бесәйҙәр көнө 1 мартта билдәләнә, ә Польшала - 17 февралдә, Японияла - 22 февралдә, АҠШ-та - 29 октябрҙә. Ә был халыҡ-ара кимәлдә бындай байрам 2002 йылда барлыҡҡа килгән һәм миллиондарса кешеләрҙе берләштерә.**

Бөтә донъя бесәйҙәр көнө Animal Welfare Халыҡ-ара хайуандарҙы яҡлау буйынса фонд башланғысы менән был йомшаҡ хайуандарҙы хөрмәтләү йәһәтенән генә түгел, берәҙәк бесәйҙәр мәсьәләһенә иғтибар йүнәлтеү маҡсатында ла ойоштоңрола. Ер йөҙөндә бесәй яратмаған кешеләр ҙә байтаҡ шул. Әйткәндәй, бесәйҙәр тураһында фән дә бар - фелинология тип атала, felinus - латин теленән "бесәй", logos - "фән" тигәнде аңлата. Был фән бесәйҙәр аҡыллы һәм кеше өсөн файҙалы булыуын иҫбатлай. Рәсәйҙә ике ғаиләгә, 3 төркөмгә һәм 12 төргә ҡараған бесәйҙәр йәшәүе билдәле.

Ҡыҙыҡлы факттар. Бесәйҙәр борондан иң күп аҫралған йорт хайуандары иҫәпләнә. Бесәй тотоусылар йөрәк ауырыуҙары менән һирәгерәк сирләй, тип иҫбатлай ғалимдар. Австрияла аҙыҡ-түлек келәтен һаҡлаған бесәйҙәргә ит һәм һөт менән пенсия түләйҙәр, ә Ҡытайҙа бесәйҙәрҙе закон яҡлай. Японияла 17-се быуатта яугирҙарға хеҙмәт иткән 7 бесәйгә Бесәйҙәр ғибәҙәтханаһы төҙөлгән, Германияла - Бесәй музейы бар. Донъяла яҡынса 600 млн йорт бесәйе йәшәй. Шуларҙың 1 млн тирәһе - Санкт-Петербург ҡалаһында йәшәй. Мыраубайҙар көн һайын 16-18 сәғәт йоҡлай, 5 сәғәт йыуына икән. YouTube каналында бесәйҙәр тураһында 10 миллионға яҡын ролик бар: һәр минут һайын ике яҙмаға артып тора. Башваҡкыста бесәйҙәр тураһында башҡорт халыҡ мәҡәлдәрен табырһығыҙ.




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**30-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Вертикаль буйынса:** Диләфрүз. Чиполлино. Мырҙабай. Алма. Әлифба. Нарат. Күмер. Аниме. Лайнер. Үлмәҫбай. Үс. Ләм. Оса. Зат. Ала. Ҡайны. Лама. Ыҙма. Ҡын. Ҡунаҡ.

**Горизонталь буйынса:** Какао. Аҡмулла. Рәүеш. Чабан. Алдыҡ. Атом. Ил. Памир. Алтын. Алыҫ. Ата. Ҡаҙаҡ. Йола. Бали. Йәйен. Ока. Үлән. Йәшелсә. Ырғаҡ. Француз. Антракт.

*ҮӘТ БИТ ӘЙ!*

# БӨРЙӘН АЙЫУҘАРЫ ШУНДАЙ!



**Бөрйәндәге "Шүлгәнташ" дәүләт ҡурсаулығының музей-экскурсия комплексы хеҙмәткәрҙәре өсөн тағы бер мәшәҡәт өҫтәлгән: улар килгән ҡунаҡтартарҙы, ял итеүселәрҙе айыуҙарҙан ҡурсалай.**

Был юлы комплексҡа өс айыу килә. "Шүлгәнташ" дәүләт ҡурсаулығы директоры Михаил Косарев һөйләй: "Беҙ бер нисә хеҙмәткәр менән кис килеп, айыуҙарҙы күҙәтеү өсөн һәр беребеҙ уңайлы урын алдыҡ. Беҙҙең алда ҡатмарлы бурыс тора: нисек тә был өс йыртҡысты ҡыуып ебәрергә. Ләкин айыуҙар кешенән ҡурҡмай, уларҙы ваҡытлыса ғына өркөтөргә була. Оҙаҡламай хайуандар яңынан пәйҙә була һәм ҡунаҡ йорттарына, сүп-сар һауыттарына, умарталарға яҡынлай. Яңыраҡ бер тайыштабан ҡунаҡтарҙың ҡотон алғайны. Икенсе тайыштабан сүп-сар контейнерҙарын түңкәреп, ҡурсаулыҡ биләмәһендә аҙыҡ эҙләп йөрөнө. Уларҙың ҡарбуз һәм ҡауын ҡалдыҡтарын эҙләп килеүенә инандыҡ..."

Дәүләт инспекторы Кирилл Евстегнеев поста дежурҙа торғанда тайыштабандың төнгө мажараларына шаһит булыуы тураһында һөйләне: "Бер айыу музейға һәм экскурсия комплексына Ағиҙел йылғаһы яғынан килгән, ҡурсаулыҡ экскурсоводтары йәшәгән йорт янынан үткән. Улар миңә шунда уҡ хәбәр иттеләр. Йыртҡысты ҡыуа башланым, ә ул тау яғына урманға инеп китте. Күп тә үтмәне, яҡындағы ҡунаҡхананан шаушыу, ҡысҡырыуҙар ишеттем. Шул саҡ аңланым: айыу сүп-сар һауытын ҡолатҡан һәм унан ҡауын алған. Был хәл төнгө сәғәттә булды", - тине Кирилл Евстегнеев.

Экологик белем биреү, пропаганда һәм мәғлүмәт секторы начальнигы Ләлә Хәйбуллина граждандарға хайуанды ашатырға, уға яҡын барырға ярамағанлығы хаҡында иҫкәртә һәм аҙыҡ-түлек ҡалдыҡтарын туҡталыштар, йорттар янында төнгә ҡалдырмаҫҡа кәңәш бирә. "Айыу менән осрашҡанда ситкә ҡарамағыҙ, әкрен генә сигенегеҙ, тыныс булығыҙ. Әгәр йыртҡыс һеҙгә табан йүнәлә икән, уның ҡылығын туҡтап, күҙәтеп торорға кәрәк. Белгестәр йүгермәҫкә, ағаҫҡа менмәҫкә кәңәш итә - айыуҙар быларҙың барыһын да кешеләргә ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ башҡара, һеҙ ҡотола алмаясаҡһығыҙ, һөжүмде ҡуҙғытасаҡһығыҙ. Уға бер нәмә лә ырғытмағыҙ һәм ҡысҡырмағыҙ, әммә тигеҙ тонда һөйләшергә, кирәһенсә, хайуанды тынысландырырға кәрәк", - тип кәңәштәре менән уртаҡлаша "Шүлгәнташ" ҡурсаулығының музей-экскурсия комплексы хеҙмәткәре.

**Дарья СУББОТИНА.**

*СПОРТ*

# БЕҘҘЕКЕЛӘР БУЛДЫРА!

Октябрьскийҙан грек-рим көрәшсеһе Илья Кандалин Европа беренселегенең финалына сыҡты. Яҡташыбыҙҙың еңеүе хаҡында республиканың спорт министры Руслан Хәбибов хәбәр итә. Европа турнирының ярымфиналында Илья Кандалин Грузия көрәшсеһенен еңде. "Ильяға финалда уңыштар теләйбеҙ! Республика менән янып-көйәбеҙ!" - тип яҙа Руслан Хәбибов үҙенең telegram-каналында. Бынан алдараҡ Илья Кандалин Владивостокта Рәсәй беренселегендә чемпион исемен яуланы. Финал алышында ул Чечен Республикаһынан дәғүәсеһен ваҡытынан алда еңде.

✓ *Тәҡдимем бар ине: мал ҡыуыусылар ролен башҡарыусылар өҫтөндә шул осор кейеме булһын ине. Мал ҡыуыусыларҙың береһе Фәрзәнә исемле ҡыҙ: "Сабаталарыбыҙ туҙып, теткеләнеп бөтә ине", - тип әйтә бит.*



*ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ...*

# ШӘП ФИЛЬМ БУЛАСАҠ!



**Бөйөк Ватан һуғышынан һуң Башҡортостандан Украинаға ярҙам йөҙөнән бер нисә кешенең йәйәүләп ҙур ғына һыйыр малы көтөүе ҡыуып алып барғаны тураһында, былдай ярҙамсыллыҡ һәм фиҙаҡәрлек әҙәм ышанырлыҡ хәл булмаһа ла , документаль сығанаҡтарҙан уҡып, ишетеп белә инем инде. Әле яңыраҡ ҡына БСТ каналынан ошо тарихи ваҡиғаға арнап, кинофильм төшөрәсәктәре хаҡында әйттеләр. Миненсә, был бик тә әһәмиәтле һәм бөгөнгө көн өсөн фәһемле, урынлы картина буласаҡ.**

Уйландым... Был ваҡиғаны аңлау ғына түгел, бәлки, шул ҡәһәрле йылдар ауырлығын бөләкәй булһам да үҙем дә баштан кисергән кеше булараҡ уйландым. Ошо хаҡта ҡыҫҡаса ғына булһа ла фекеремде белдермәксемен. Әйтеп, һөйләп аңлатҡыһыҙ хәтәр осор булды ул һуғыш йылдары һәм унан һуңғы ваҡыттар. Бөгөнгө быуын уҡып, ата-бабаларының ошо ауырлыҡтарҙы йырып сыҡҡан рух ныҡлығынан фәһем, өлгө алһын һәм үҙ тормоштарында бер ҡасан да юғалып, баҙап ҡалмаһындар өсөн төрлө тарихи сығанаҡтарҙан мәғлүмәттәр тупланым. Бөгөн ул тулы 3 том булырлыҡ материал. Билдәле яҙыусы һәм журналист Зөһрә Ҡотлогилдинаның да Бөйөк Ватан һуғышы осоро балаларының иҫтәлектәр йыйынтығы бар миндә. Беҙҙә, һуғыш осоро балаларын, рәсми таныһындар өсөн Рәсәй һәм Башҡортостан етәкселегенә бер нисә тапҡыр мөрәжәғәт иткәйнек. Республикабыҙ етәкселегенә рәхмәт - беҙгә танытма тапшырылды. Һуң булһа ла... Мин үҙем 20 йылдан ашыу ауыл биләмәһенең ветерандар ойошмаһын етәкләйем. Исемлектәр төҙөнөм, шул иҫәптән һуғыш йылдары балаларының да иҫәбе алынды. Хатта ауылдан ситтә йәшәүсе яҡташтар ҙа онотолманы. Бөгөн иҫән ҡалғандарҙан барыһы 17 кешебеҙ. Ә бер заман 159 инек бит!..

Бая телгә алған кинокартина билдәле журналист һәм яҙыусы Сәлимйән Бәҙретдинов әҫәре буйынса төшөрөләсәк. Был тарихи ваҡиға хаҡында "Киске Өфө" гәзитенең дә тотош өс һанында (2021 йылдың 18-20-се һандары) "Әҙәм ышанмаҫлыҡ сәйәхәт" тигән баш менән ҙур мәҡәлә баҫылып сыҡҡайны. Фильм төшөрөүселәргә тәҡдимем бар ине: мал ҡыуыусылар ролен башҡарыусылар өҫтөндә шул осор кейеме булһын ине. Мал ҡыуыусыларҙың береһе Фәрзәнә исемле ҡыҙ: "Сабаталарыбыҙ туҙып, теткеләнеп бөтә ине", - тип әйтә бит. Һуғыштан һуң да әле мәктәптә өлкән класта уҡып йөрөгәнемдә өҫтөмдә киндер күлдәк-ыштан ине. Шөкөр, әсәйем мәрхүмә оҫта һәм уңған булды, ялаңғас итмәне.

Әле телевидениеның ҡайһылыр каналы боронғо төрөк тормошон сағылдырған фильм күрһәтә, ә актерҙар заманса кейенеп алған. Был бит һис кенә лә боронғолоҡ осорон күҙ алдына килтерергә ярҙам итмәй. Дөрөҫөрәге, күңел ундай фильмды ҡабул итмәй. Беҙҙең бала саҡ осорондағы кейемдәр өлгәһөн тарихи фотоларҙан да күрергә була. Мәҫәлән, "Киске Өфө"нөң бая күрһәтелгән һандарында, шулай уҡ "Йәшлек"тең 2021 йылдағы 48-се һанында, "Башҡортостан"гәзитенең 2021 йылдағы 37-се һанында баҫылды ундай фотолар. Ул кейемдәр беҙҙең музейҙарҙа ла һаҡлана бит инде ул. Кемдендер ғаиләһендә лә һаҡланыуы мөмкин. Кино өсөн биреп торорҙар, тип уйлайым.

Әйтергә теләгән тағы бер тәҡдимем: кино шул ваҡиғаларҙы ҡоро һөйләп йә күрһәтеүгә генә ҡоролмаһын, ә башҡорт халҡының булмышын, киң күңелле һәм ярҙамсыл булыуын да сағылдырһын ине.

**Йәмних ҠАШҠАРОВ.**
**Баймаҡ районы**
**Әбделкәрим ауылы.**

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# "БАШҠОРТ АТЫ" САҠЫРА!



**(Башы 1-се биттә).**

Беренсе бүлектә йылҡы ите, шулай уҡ ауыл хужалығы тауарҙары күргәҙмә-йәрминкәһе тәҡдим ителәсәк. Йәрминкәгә "Хәләл" стандарты буйынса эшләгән Башҡортостан етештереүселәре саҡырылған.

Икенсе бүлек - эшлекле программа. 15 августа "Евразияның абориген йылҡы тоҡомдарын һаҡлау һәм үрсетеү" халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференцияһы, "Ат спортында башҡорт атын ҡулланыу: яңы үҫеш этабы" семинары, "Ирәндек" туристик-рекреацион кластерының мастер-планын әҙерләү һәм Урал арьяғында туризмды үҫтереү буйынса модерацион осрашыу үтәсәк.

Өсөнсө һәм дүртенсе бүлектәр ижадҡа һәм спортҡа арнала. Ижади бүлектә Башҡортостандың үҙешмәкәр коллективтары һәм сәнғәт оҫталары ҡатнашлығында театрлаштырылған тамаша һәм концерт программаһы, интерактив этнографик майҙансыҡтар, биҙәү-ҡулланма ижады оҫталары күргәҙмәләре ойошторола. Башҡорт ҡурсаҡ театры фестиваль өсөн махсус интерактив спектакль әҙерләгән.

Быйыл спорт саралары һаны артҡан. Улар араһында милли көрәш, мас-рестлинг, самбо буйынса республика, арҡан тартышыу буйынса төбәк-ара турнирҙар бар. Шулай уҡ "Таш ырғытыу", "Таш күтәреү", "Тарт-эт", "Тартыш", "Таш күсереү", "Ирәндек мәргәне" йәйәү һәм һыбай килеш традицион яндан уҡ атыу асыҡ республика турниры, Эльбрус Ниғмәтуллин командаһы ойошторған "Урал батыр" халыҡ-ара бәйләүҙәр турниры ойошторолаҫаҡ. Бынан тыш, быйыл ГТО нормативтарын тапшырыу өсөн майҙансыҡ булдырыласаҡ. Төп программала "Тай-тулаҡ", "Ауҙарыш", "Ашаҡ" ярыштары тәҡдим ителә. Бынан тыш, 6 төр ат сабышы планлаштырыла. Алдағы йылдарҙағы кеүек, төп бүләк - автомобиль.

- Байрамда йыл һайын ниндәйҙер инфраструктура булдырырға килештек. Әйҙәгеҙ, фестиваль барышында тағы ла нимә эшләргә кәрәклеген урында ҡарайыҡ, - тине республика Башлығы. - Туризм министрлығының бында эшләүе гәзел. Өфө халҡы сағыу байрам ҡарарға барасаҡ. Шуға күрә унда "Башҡортостан оҙон ғүмерлелеге" кеүек проекттарҙы ла ҡуйығыҙ, эшләһендәр. Сөнки был, ысынлап та, сағыу ваҡиға.

**Ләйсән ЗАКИРОВА.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АТТЫҢ ШӘБЕ - КЕШЕЛӘ,

## ҡатын шәбе - күршелә

Йәшем етте ҡыр(ы)ҡҡа, эшем китте шырыҡҡа.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Аҡылдың бик аҙы ғына тотоноуҙан туҙа, күп өлөшө ҡулланылыш тапмай тутыға.

**(Каролина Бови).**

Өлкән кешегә сабырлыҡ матурлыҡ өҫтәй.

**(Поль Эллиот).**

Йылмай - донъя һинең менән бергә йылмайыр, ила - һин яңғыҙың ғына иларһың.

**(Элла Уилкокс).**

Яуызлыҡ уның менән көрәшһендәр өсөн булдырылған, ә көйәнтәгә элеп үлсәр өсөн түгел.

**(Иосиф Бродский).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер уҡытыусының фәлсәфә һатырға, үҙен ижади әҙләнеүсән кеше итеп күрһәтергә тырышыусы шәкерте була. Бер саҡ Алла тураһындағы уйҙарға сумып ултырған был шәкерткә бик ныҡ мохтажлыҡ кисергән бер фәҡир мөрәжәғәт итә. Шәкерт уны тыңлап та тормаҫтан, "Алла ярҙам итер", ти ҙә, уйланыуын дауам итә. Фәҡир кеше уны борсоғаны өсөн ғәфү үтенә һәм ары китә. Шунан был фәҡир эргәһенә үҙенең ярҙамын тәҡдим итеп, икенсе бер кеше йүгереп килә.**

**Был хәл тураһында уҡытыусыһы ишетеп ҡала һәм шәкерте янына килеп, шулай тип телмәр тота: "Күрәһең, был фәҡир һинән ярҙам һорағанда йөрәгеңдә Алла булмағандыр. Алла һәм Уның һөйөүе был фәҡиргә ярҙам итергә тип йүгереп килгән кешенең йөрәгендә ҡунаҡта булғандыр. "Алла ярҙам итер", тип дөрөҫ әйткәнһең, тик ләкин һөйөүе һинең йөрәгендәге Алла үҙенең Һөйөүе аша изгелек тыуҙырған һәм ул кешенең ҡулдары менән фәҡиргә ярҙам иткән. Ә бит ул ярҙам итеүсе Алланы эҙләп, көн-төн баш ҡатырып, уйланып та ултырмаған, сөнки Алла уның йөрәгендә урынлашҡан. Әммә ул быны хатта белмәй ҙә. Улар Уның менән баш һәм тән кеүек үк бер бөтөн, баш күрә, ишетә, уйлай һәм нимә эшләргә икәнен күрһәтә, ә тән шуны үтәй. Ә һин Алла хаҡында көндәр буйы уйланып ултырһаң да, Уның менән бер бөтөн булыуға өлгәшә алмағанһың. Шуны хәтереңдә тот: мохтаж кеше менән осрашҡанда кем күҙҙәрен ситкә күсермәй, үҙенең йөрәген бикләмәй, ҡулдарын йөҙрөккә төйнәмәй, ярҙам һорап ҡыҫҡырған тауыш ишеткәндә ҡолаҡтарын ҡапламай, шул саҡта ғына йөрәгең менән Хоҙайҙы күрә, Унан килгән хәбәрҙе ишетә, Ул ебәргән бүләкте тоя алаһың. Башҡалар мохтажлығына күҙҙәрен йомған кеше үҙенең эргәһендә торған Хоҙайҙы ла күрмәйәсәк..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 24031

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |
| Матбуғат таратыу | 252-39-99 |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
8 август 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 2750
Заказ - 1336